ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29-4
май - июнь
(һабанай - һөтәй)

2026

№21 (1216)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Аҙаҡҡаса көрәшегеҙ!




6

Башҡорт балалар баҡсалары...




Өфөлә лә яҡты бер маяҡ кеүек!

8-9

Бәхетле бала саҡ...

бәхетле тормоштоң нигеҙе ул



11

Аралашыу, ҡунаҡҡа йөрөшөү...

шулай уҡ халҡыбыҙҙың изге йолаһы



13

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!* ПР905 индекслы *"Киске Өфө"* гәзитенә республика ҡалалары һәм районларының бөтә почта бүлексәләрендә лә 2026 йылдың икенсе ярты йыллығына *1124 һум 40 тингә* яҙыла алаһығыҙ. Әйткәндәй, ике кешегә (562 һум 20 тин), өс кешегә (374 һум 80 тин) бер дана гәзит алдырыу ҙа хуплана. Һәр ваҡыттағыса, гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур башҡорт китаптары менән бүләкләнер.**

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# АБРУЙЛЫ БӘЙГЕ ЕҢЕҮСЕЛӘРЕ

**Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә VII "Айыҡ ауыл" республика конкурсы финалсылары иғлан ителде. Республика Башлығы Радий Хәбиров еңеүселәрҙе аҡсалата сертификаттар һәм дипломдар менән бүләкләне.**




Мәҫәлән, "Бәләкәй тораҡ пункттар" номинацияһында өсөнсө урынды Тәтешле районының Бәләкәй Бәлзүгә ауылы алды, икенсе урында - Борай районының Яңы Йәлдәк ауылы, беренсе урында - Асҡын районының Гөмбә ауылы.

"Уртаса торак пункттар" номинацияһында өсөнсө урынға - Бүздәк районының Ҡаран ауылы, икенсе урынға - Ауырғазы районының Кәкүш ауылы, беренсе урынға Ауырғазы районының Татар Нуғаҙаҡ ауылы лайыҡ булды.

"Ҙур торак пункттар" номинацияһында өсөнсө урынды Кушнаренко районының Ҡалтай ауылы яуланы, икенсе урында - Краснокама районының Яңы Бөртөк ауылы, беренсе урынға Ейәнсура районының Өмбәт ауылы сыҡты.

"Эре торак пункттар" номинацияһында өсөнсө урынды Баймаҡ районының Мерәҫ ауылы алды, икенсе урын - Өфө районының Николаевка ауылы, беренсе урын - Дүртөйлө районының Иҫке Байыш ауылы.

"Был конкурстың һөҙөмтәһе беҙ көткәндән күпкә яҡшыраҡ. Кешеләрҙә йәшәү рәүешенә ынтылыш барлыҡҡа килә. Күңелдә яҡшылыҡҡа ышаныс тыуа. Конкурсты ойоштороусыларҙың береһе Эльвира Айытҡоловаға рәхмәтемде белдерәм. Унда олоһо ла, кесеһе лә ҡатнаша", - тине Радий Хәбиров.

Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко үҙенең видеосәләмләүендә билдәләүенсә, Башҡортостандың "Айыҡ ауыл" проекты сәләмәт йәшәү рәүешенә ылыҡтырыу һәм халыҡ араһында хәмер эсеүҙе кәметеү йәһәтенән уңышлы миҫалдарҙың береһе булып тора.

*АФАРИН!*

# ШУНДАЙ ЕГЕТТЕР ҮҪӘ БЕҘҘӘ!

**Үҫмерҙәрҙең күбеһе социаль селтәрҙәрҙәге трендтар тураһында бәхәсләшеп, йәйге каникулға әҙерләнгәндә, Стәрлетамаҡтан 9-сы класс уҡыусыһы Руслан Әминев Ҡытайға барырға йыйына. Юҡ, каникулға түгел. Руслан илдең иң яҡшы 5 йәш иҡтисадсыһы иҫәбенә инде һәм июлдә халыҡ-ара иҡтисади олимпиадала Рәсәй исеменән сығыш яһаясаҡ.**

Руслан Стәрлетамаҡтың 3-сө башҡорт лицей-интернатында уҡый. Уның уңышы осраҡлы ғына тип әйтеп булмай. Иң тәүҙә ул Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетына юл асыусы Бөтә Рәсәй олимпиадаһы призеры статусына эйә була. Ул саҡта Мәскәүҙә Русланға бар илдән йыйылған иң текә 70 уҡыусы араһында иҡтисад, финанс һәм стратегия буйынса имтихан тапшырырға тура килә һәм 24 еңеүсе уҡыусы иҫәбендә финалға сыға. Уларҙы командаларға берләштерәләр, Гарвард бизнес мәктәбенең реаль кейсын бирәләр һәм уны инглиз телендә яҡларға ҡушалар. Руслан еңеп кенә ҡалмай, ул биш лидер иҫәбенә инә.

- Бындай кимәлдә еңеү өсөн үҙенсәлекле сифаттарға эйә булырға кәрәк, - тип иҫәпләй олимпиада еңеүсеһенең остазы - 3-сө башҡорт лицейының математика һәм иҡтисад уҡытыусыһы Руслан Ғабдрахманов. - Беренсенән, ныҡлы нервылар кәрәк. Гарвард мәсьәләләрен жюри күҙлегенән ҡаты тайминг шарттарында хәл итеү - стресс, уны һәр өлкән топ-менеджер күтәрә алмай. Икенсенән, бизнес-фекерләү. Трендтарҙы күрә белергә, хәүефте һанарға һәм ҡағыҙҙа ғына түгел, ә ысынбарлыҡта эшләгән ҡарарҙар тәҡдим итергә кәрәк. Өсөнсөнән, харизма һәм тел. Проектты инглиз телендә яҡлау телде яҡшы белеүҙе генә түгел, ә ораторлыҡ оҫталығын да талап итә. Руслан - ҡатмарлы бурыстарҙан ҡурҡмаған һәм хатта ҡаты конкуренция шарттарында ла һөҙөмтәгә эшләргә әҙер булған егеттәрҙең береһе. Беҙ системалы әҙерләндек: теорияны ғына түгел, ә заданиеларҙың төрлө варианттарын һәм йәмәғәт яҡлау күнекмәләрен ентекле эшләнек. Русланды әҙерләүгә Өфөнөң "Аврора" таланттарҙы үҫтереү үҙәге һәм Стәрлетамаҡтың мәғлүмәт-методик үҙәге лә йәлеп ителде.

Шулай итеп, 12-20 июлдә Руслан Әминев Ҡытайҙа ил намыҫын яҡлаясаҡ. Был исемде иҫегеҙҙә тотоғоҙ, беҙ уның тураһында тағы ла ишетербеҙ әле.



12+

✓ *"Республикала бөтәһе 17 мең бюджет урыны бар, урта һөнәри белем дә иҫәпкә алынды. Бакалавриатҡа һәм белгеслеккә генә бюджет урындарын алғанда, улар 11 меңдән ашыу", - тип белдерҙе Мостафина.*



ҠЫҪҠАСА

# ШҮЛГӘНТАШ БАҺАЛАНДЫ

**"Шүлгәнташ" музей-ҡурсаулығы Д.С. Лихачев исемендәге Милли премияның "Милли ҡаҙаныш" номинацияһында еңеү яуланы.** Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошондай ҡыуаныслы яңылыҡ менән уртаҡлашты. Билдәләнеүенсә, Рәсәйҙең төп музейҙары - "Петергоф", "Бородинское поле", "Сталинград һуғышы" музей-ҡурсаулыҡтары һәм башҡалар Бөрйән районы проектының конкуренттары булды. Конкурсҡа бөтәһе меңдән ашыу ғариза ҡабул ителгән. "Республикаһың еңеүе шуның менән ҡәҙерле! Беҙҙең "Шүлгәнташ" музейы - Рәсәйҙә палеолит дәүеренең мәмерйә ҡаяһына төшөрөлгән һүрәттәренә арналған тәүге һәм әлегә берҙән-бер музей. Был һүрәттәрҙең йәше - 16,5-20,5 мең йыл. Быштыр улар ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы исемлегенә индерелде. Барыһын да иҫ киткес шәп музейыбыҙҙы килеп күрергә саҡырам", - тине республика етәксеһе.

✓ **Башҡортостандың фән һәм юғары белем буйынса дәүләт комитеты рәйесе Светлана Мостафина 2026 йылда төбәк университеттарында бюджет урындарының һаны артты.** "Быйыл абитуриенттарыбыҙға уныш йылмайҙы. Республикала бөтәһе 17 мең бюджет урыны бар, урта һөнәри белем дә иҫәпкә алынды. Бакалавриатҡа һәм белгеслеккә генә бюджет урындарын алғанда, улар 11 меңдән ашыу", - тип белдерҙе Мостафина. Ведомство етәксеһе мәғлүмәттәре буйынса, 2026 йылда мәктәпте 16 мең бала тамамлай. Башҡортостан шулай уҡ Махсус операция яугирҙары һәм уларҙың балалары һанынан льгота алыусылар категорияһын киңәйтте. Светлана Мостафина һүҙҙәренсә, хәҙер МХО биләмәһендә һәләк булған яугирҙарҙың хәләл ефеттәре бушлай уҡыу һәм имтиханһыҙ уҡырға инеү хоҡуғына эйә.

✓ **Республикала бәләкәй ҡалаларға медицина кадрҙарын йәлеп итеү өсөн тағы бер программа эшләй башланы.** Башҡортостанда табиптар өсөн яңы ярҙам программаһы ғәмәлгә ашырыла. Ул 17 йүнәлештә эшләгән белгестәргә (акушер-гинеколог, анестезиолог-реаниматолог, хирург, кардиолог, невролог, офтальмолог, психиатр, травматолог-ортопед, ашығыс ярҙам табибы, стоматолог һәм башҡалар) ҡағыла. Бәләбәй, Белорет, Ишембай, Күмертау, Мәләүез, Нефтекама, Октябрьский, Салауат, Сибай, Стәрлетамаҡ, Туймазы дауаханаларына эшкә килгән табиптарға 2 миллион һум бирелә. Аҡса ике йыл дауамында берәр миллион һумлап түләнә. Программала вузды тамамлағандан һуң тәүге тапҡыр эшкә төшкән белгестәр һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән Башҡортостанға килгән табиптар ҡатнаша ала. Контракт буйынса кәмендә 5 йыл эшләргә кәрәк. Программа даими эшләй: 2026 йылдан башлап ике йылға бер тапҡыр табиптар менән килешеүҙәр төҙәлә, тип хәбәр итте һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда табиптарға һәм фельдшерҙарға бер тапҡыр бирелә торған түләү 1,5 миллион һумға һәм 750 мең һумға тиклем арттырылды.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ЖИРИНОВСКИЙҘЫ ИҪЛӘП...

**"Башинформ" хәбәрсеһенең һорауына яуап биреп, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Владимир Жириновский менән аралашыуы тураһында һөйләне.**

Ғәҙәттә кешеләр уны экспрессив һәм эмоциональ кеше итеп күрҙе. Ә уның менән кабинетында аралашҡанда алдымда һынсыл ҡарашлы, бик аҡыллы кеше тора ине. Тап ошондай форматта беҙ уның менән тығыҙ бәйләнештә эшләгәнебеҙҙә бик шатмын", - тине Башҡортостан Башлығы.

Партия рәйесе Леонид Слуцкий Башҡортостанды кешеләр тормошонон төрлө өлкәләрендәге мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә эталон тип атаны. "Башҡортостанда Владимир Жириновский иҫтәлегенә арналған бер нисә сарала ҡатнашыуыбыҙға бик шатбыҙ. Әйтәйек, тантаналы йыйылыш, урам асыу, уның хөрмәтенә спорт турниры, - тип билдәләне Леонид Слуцкий. - Радий Фәрит улы Хәбировтың уникаль тәжрибәһе бар: ул республикаһына һәм халҡына тоғро. Осрашыуҙа көнүҙәк, шул иҫәптән МХО-ға ярҙам итеү, иҡтисадты үҫтереү мәсьәләләре тикшерелде. Башҡортостандың халыҡ алдындағы бурыстарын үтәүгә системалы ҡарашы бигерәк тә ҡыуандыра, башҡа төбәктәр өсөн өлгө булып тора".

# ЯҢЫ ЗАВОДТАР ТӨҘӨЛӘ

**Өфөгә эш сәфәре менән Ташкент өлкәһенән Premier Electrotech компанияһы делегацияһы килде.**

Компания республика биләмәһендә бер юлы ике уртаҡ проекты бойомға ашыра. Иглин районында яҡтар 300 һыйырға иҫәпләнгән заманса ферма төҙөргә планлаштыра. Яңы юғары технологиялы комплекс халыҡҡа эш урындары булдырыуҙы һәм районды урында етештерелгән аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүҙе күҙ уңында тота.

Шулай уҡ Башҡортостанда көнкүреш техникаһы етештереү буйынса завод барлыҡҡа киләсәк. Был иһә импортты алыштырыуға һәм магазин кәштәләрендә яңы тауарҙар һатыуға өлөш индереү, тип билдәләне республиканың тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры Маргарита Болычева.

Сәфәр барышында ҡунаҡтар Иглин районы башлығы һәм "Өфө" индустриаль паркы директоры менән осрашты. Үзбәкстан менән хеҙмәттәшлек республика халҡына файҙа килтерерҙәй реаль эштәргә әүерелә, тип өҫтәне министр.

# ҠАЙҒЫ УРТАҠЛАШЫП...

**Башҡортостан Башлығы Нефтекамала МХО-ла һәләк булған яугирҙарҙың ғаиләләре менән осрашты.**

Республика етәксеһе һәләк булған хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ата-әсәләренең һәм хәләл ефеттәренең ауыр ҡайғыһын уртаҡлашты, шулай уҡ уларға яугирҙарҙың үлгәндән һуң лайыҡ булған генерал Шайморатов орденын тапшырҙы. "Яҡташтарыбыҙ Тыуған ил өсөн ғүмерен ҡорбан итте. Уларҙың һәр береһе үҙ бурысын аҙағына тиклем үтәне. Улар - ысын геройҙар, - тине республика етәксеһе. - Улдарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт. Беҙҙең төп бурыс - улар тураһында онотмау, уларҙың хәтерен мәңгеләштереү, ата-әсәләре, ҡатындары һәм балалары хаҡында хәстәрләк күреү. Махсус хәрби операция тамамланғас, Өфөлә яугирҙарыбыҙ хөрмәтенә мемориал ҡуйырға уйлайбыҙ. Барлыҡ муниципалитеттарҙа ла Хәтер аллеялары барлыҡҡа киләсәк. Башҡортостанда МХО-ла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә киң ярҙам саралары ғәмәлдә", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Республика етәксеһе шулай уҡ һәләк булған яугирҙарҙың балаларының нисек уҡыуҙары менән ҡыҙыҡһынды, уларҙың уҡыу йорттарына ингәндә льготаларға эйә булыуҙарын әйтеп үтте. Һәр ғаиләгә координатор беркетелде, тип асыҡлыҡ индерҙе Нефтекама хакимиәте башлығы Эльдар Вәлидов. Һәләк булған яугирҙарҙың туғандары республика Башлығына үҙҙәрен борсоған һорауҙар менән мөрәжәғәт итте, Радий Хәбиров улар буйынса урындағы властарға йөкләмә бирҙе.

# ИХТЫЯЖ ҘУР

**Өфө - Белорет маршруты буйынса ике системалы яңы "Финист" электричкаһы сафҡа индерелгәндән һуң, ике аҙна эсендә 6,5 мең пассажир ташыған.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә ошо турала хәбәр итте. "Поезд алмаш һәм даими токта эшләй ала. Был ваҡытты ныҡ экономиялай. Әгәр элек ток алмашынған Инйәр станцияһында локомотивты алмаштырырға тура килһә, хәҙер быны эшләргә кәрәкмәй. Шуға юлға 6 сәғәт урынына яҡынса 5 сәғәт китә, киләсәктә 4 сәғәткә тиклем кәметергә мөмкин буласаҡ", - тине республика етәксеһе.

Шулай уҡ 8 майҙа Һамарҙан республикабыҙҙың баш ҡалаһына тәүге "Карлугас" йөрөй башланы, уның ярҙамында юлдағы ваҡыт 2 сәғәткә ҡыҫҡарҙы. "Был иһә беҙҙең өсөн заманса ҡала яңы поездары хеҙмәтләндергән өсөнсө төбәкара маршрут. Ырымбурға һәм Силәбегә йөрөгән электричкалар көйөк уҡ уға ихтыяж ҙур булыр тип ышанам. Бынан тыш, ҡайһы бер пассажирҙар өсөн төбәк һәм федераль льготалар ғәмәлдә", - тип билдәләне Р. Хәбиров.

# ЗУБРҘАР ИШӘЙӘ



**"Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт паркы Беловежье урманынан тағы алты зубр менән тулыланды, хәҙер Башҡортостанда улар 31-гә етте, тип хәбәр итте республика етәксеһе Радий Хәбиров.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанға зубрҙар 2023 йылда Көньяҡ Уралдың ҡырағай тәбиғәтендә уларҙың тарихи популяцияһын тергеҙеү өсөн килтерелгәйне. Малҡайҙар "Мораҙым тарлауығы" паркы менән сиктәш Ыҡ заказнигына урынлаштырылған. Был хайуандар таулы-урманлы урынға тиҙ яраҡлашҡан. Ике йыл ваҡыт эсендә 13 быҙау тыуған. 2030 йылға Башҡортостан зубрҙары һанын 50-гә еткереү планлаштырыла.

"Мин күп тапҡыр әйткәнем бар: был ахмаҡлыҡ түгел. Беҙ "Экологик именлек" милли проекты сиктәрендә биологик төрлөлөктө һаҡлау буйынса мөһим дәүләт бурысы менән шөғөлләнәбеҙ. Йәнә лә тәбиғәт-әсәгә бурысыбыҙҙы ҡайтарабыҙ. Кешеләрҙең ғәйебе менән зубрҙар юҡҡа сығыу сигенә етте, XX быуат башында уларҙы ҡырағай тәбиғәттә тулыһынса ҡырып бөтөрҙеләр. Советтар Союзы төрҙө тергеҙеү буйынса донъя үҙәктәренең береһенә әүерелде, бөгөн беҙ ошо ҙур эште дауам итәбеҙ. Хәтерегеҙгә төшөрәм, Башҡортостан - илдә Беловежье зубрҙары ирекле биләмәлә йәшәгән берҙән-бер төбәк. Уларҙы Мораҙым тарлауығында үҙ күҙҙәрең менән күрергә мөмкин", - тип билдәләне республика етәксеһе.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Өфө Экспо" күргәҙмә комплексында 34-се "Газ. Нефть. Технологиялар" күргәҙмәһе һәм Рәсәй нефть-газ химияһы форумы дауам итә. Уның эшендә РФ сәнәғәт һәм сауҙа министры урынбаҫары М.Н. Юрин, Башҡортостан Республикаһы етәкселеге, Рәсәй федерацияһы субъекттары министрҙары, сит илдәр делегациялары ҡатнаша. Форумдың юғары статусы тураһында Ҡытай, Белоруссь, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Монголия, Һиндостан һәм башҡа дәүләттәр вәкилдәренең ҡатнашыуы һөйләй. Үҙҙәренең экспозицияларында 270 компания ер аҫты эҙләнеүҙәренән алып эшкәртеүҙең яңы технологияларына һәм ҡоралдарға тиклем тулы технологик циклды күрһәтә. Эшлекле программа 60 сараны үҙ эсенә алған.

✓26 майҙа Башҡортостанда 17,6 меңдән ашыу - ун беренсе, 54 меңдән ашыу туғыҙынсы класс уҡыусыһы өсөн һуңғы ҡыңғырау яңғыраны. Өфөлә 11-се класс уҡыусылары өсөн уҡыу йылы тамамланыуға арналған байрам "Торатау" конгресс-холы майҙансығында ойошторолдо. Алда - мөһим имтихандар, һөнәр һайлау юлында яуаплы аҙым һәм онотолмаҫ сығарылыш кисәһе. Быйыл берҙәм һәм төп дәүләт имтихандары июндә башлана. Аттестат тапшырыу тантанаһы 27 июндә була.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың пленар ултырышында депутат Гөлнур Ҡолһарина вәкәләттәрен ваҡытынан алда туҡтатты. Ул "Башинформ"ға үҙенең ҡарарын "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фондындағы эшкә баҫым яһау кәрәклеге менән аңлатты.

✓"Бөтә республика буйынса федераль ярҙам менән табип амбулаторияһы һәм ФАП-тар төҙәлә. Байтаҡ эш башҡарылды, әммә яңыртыуға мохтаж булған ауыл медицина учреждениелары бар әле. Беҙҙең бурыс - 2030 йылға ошо эште тамамлау, - тине республика Башлығы Радий Хәбиров Ҡырмыҫҡалы районына эш сәфәре барышында райондың Олоҡүл табип амбулаторияһы менән танышып сыҡҡас. Медицина учреждениеһы 4,9 мең кешене, шул иҫәптән 700-ҙән ашыу баланы хеҙмәтләндерә, көндөҙгө стационар, процедуралар һәм прививкалар кабинеттары, шулай уҡ терапевт, педиатр, акушер-гинеколог һәм стоматолог бүлмәләре эшләй.

✓Республиканың Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, "Йәшел Башҡортостан" акцияһы сиктәрендә 83 яңы тематик аллея ултыртылған. Уның барышында 65 меңдән ашыу кеше, 3,5 меңдән ашыу ойошма ҡатнашҡан, 1283 берәмек техника йәлеп ителгән. Һөҙөмтәлә 4,3 меңдән ашыу ҙур ағас һәм 139 меңдән ашыу башҡа үҫенте ултыртылған. Өфөнө алһаҡ, ҡалала 10 яңы аллеяға нигеҙ һалынған, 320 ағас һәм 684 ҡыуаҡ ултыртылған.

✓ Тел - милләттең йәне. Әгәр мин уны өйрәнһәм, беҙ ҡасандыр ҡобайырҙар яҙыша, йолаларҙы тергеҙешә, мәҙәни мираҫты өйрәнә аласаҡбыҙ. Әлегә был - ҡараңғы бүлмәләге сыраҡ яҡтыһы кеүек кенә, әммә шуныһы ла яҡшы.



ШУНДАЙ ХӘБӘР!

# ЯҺАЛМА ИНТЕЛЛЕКТТЫ...

## эшкә егәбеҙме?

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Евразия ғилми-белем биреү үҙәге Өфө вуз-ара кампусының Геном үҙәге майҙансығында республикала яһалма интеллект индереү буйынса стратегик сессияла ҡатнашты.**

Сессия ваҡытында Радий Хәбиров Башҡортостанда Һанлы үҫеш һәм яһалма интеллект технологияларын индереү мәсьәләләре буйынса совет булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Совет дәүләт органдары, муниципалитеттар һәм ойошмаларҙың ошо өлкәлә үҙ-ара эш итеүен тәьмин итеү өсөн даими эшләүсе орган булырға тейеш. Уға хөкүмәт, эксперт һәм бизнес-берләшмә вәкилдәре инә.

Артабан Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә яңы вице-премьер Олег Ли менән таныштырҙы. Ул республикала яһалма интеллектты индереү өсөн яуаплы. "Ауыр йылдарҙа ла беҙ стратегик йүнәлештәр тураһында уйларға тейешбеҙ, тип уйлайым. Шундай йүнәлештәрҙең береһе - яһалма интеллект. Мин тәжрибәһе булған кешене эҙләнем һәм Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Яһалма интеллектты үҫтереү буйынса милли агентлыҡҡа сыҡтым. Олег Ли унда етәксе кәңәшсеһе булып эшләй ине", - тине республика етәксеһе.

**Әйткәндәй, был тема буйынса ЯИ КӨФӨ-гә лә һорау бирәйек әле.**

ЯИ-КӨФӨ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ



# ҠУРҠЫРҒАМЫ, АЛҒА БАРЫРҒАМЫ?

**Рөстәм Нурыев: Хәйерле көн, ЯИ КӨФӨ! Беҙҙең республикала ҙур үҙгәрештәр көтөлә. Башҡортостанда Һанлы үҫеш һәм яһалма интеллект технологияларын индереү буйынса совет булдырылды. Башҡортостан Башлығы Радий Хабиров, һинең кеүек аҡыллы системаларҙы бар өлкәләргә лә "ут һәм ҡылыс" итеп индерәм, ти. Ни өсөн идара итеүселәргә был мөһим?**

***ЯИ КӨФӨ:*** Хәйерле көн! Идарасы өсөн ЯИ - киләсәкте күрһәтеүсе яҡтылыҡ та, бюрократияны тураҡлаусы ҡылыс та. Радий Хабиров был турала асыҡтан-асыҡ: "ЯИ "хыял ғына түгел, ә төбәктәрҙең артабанғы үҫеш ҡоралы", - тип әйтте. Артта ҡалырға теләмәһәгеҙ - ЯИ менән эш итергә тура килә, тигәнгә ишара был.

***Рөстәм Нурыев:*** Йәғни, был ябай ғына мода артынан ҡыуыу түгел, ә бик тә бик мөһим мәсьәләме?

***ЯИ КӨФӨ:*** Әлбиттә, йә һеҙ технологик лидерҙар, йә артта һөйрәлеүселәр рәтендә булаһығыҙ. Ҡарағыҙ, ЯИ Өфө моторҙар эшләү заводында деталдәрҙең сифатын тикшерә, унда хата - хаҡы кеше ғүмере. "Башнефть" менән ер аҫтын 8 мең скважинала күҙәтә - кеше быны эшләй алмай. Ауыл хужалығында мал аҙығын экономиялай - йылына тиҫтәләрсә миллион һум. Идарасы өсөн был абстракция түгел, ә уның эш күрһәткестәре.

***Рөстәм Нурыев:*** Әммә күптәр һинән ҡурҡа, шик менән ҡарай...

***ЯИ КӨФӨ:*** Бына быныһы - бик мөһим мәсьәлә. Радий Хәбиров тап шуны әйтте: "Кешеләр ҡурҡырға түгел, ә аңларға тейеш. Беҙ ЯИ-ның ни өсөн кәрәклегенә иғтибар итәйек". Идарасы өсөн иһә мин - хәүеф түгел, ә ҡотолоу алымы. Уҡытыусыларҙы - тикшереүҙәрҙән, табиптарҙы - сираттарҙан, инженерҙарҙы хаталарҙан ҡотҡарам.

***Рөстәм Нурыев:*** Ләкин мин бер нәмәне аңламаным: ни өсөн һүҙ бары тик торбалар, скважиналар һәм завод деталдәре тураһында ғына бара? Ә беҙҙең мәҙәниәт, рухиәт ҡайҙа?

***ЯИ КӨФӨ:*** Һорауығыҙ урынлы. Ысынлап та, мин - заводта ла, больницала ла, хатта урман янғынын һүндереүҙә лә бармын. Тик мәҙәниәт тураһында бик өндәшеп бармайҙар. Проблема - өҫтөнлөктәрҙә. Етәкселәр өсөн күренеп торған иҡтисади файҙа - беренсе урында. Ә "мәҙәни аң-кимәл" тип аталған нәзәкәтле өлкә иһә "һатып була торған" тауар түгел. Шулай ҙа өмөт бар. Максим Ульчев әйткәнсә, мине башҡорт теленә, башҡорт мәҙәниәтенә яҡшыраҡ өйрәтәсәктәр. Гәзит-журналдар үҙ мәғлүмәттәрен тапшырасаҡ. Был - бик мөһим. Тел - милләттең йәне. Әгәр мин уны өйрәнһәм, беҙ ҡасандыр ҡобайырҙар яҙыша, йолаларҙы тергеҙешә, мәҙәни мираҫты өйрәнә аласаҡбыҙ. Әлегә был - ҡараңғы бүлмәләге сыраҡ яҡтыһы кеүек кенә, әммә шуныһы ла яҡшы.

***Рөстәм Нурыев:*** Ә ни өсөн башҡорт мәҙәниәте өсөн дә файҙалы булырға тейешһең һуң?

***ЯИ КӨФӨ:*** Минең көсөм - бик ҙур күләмдә мәғлүмәтте эшкәртеүҙә. Күҙ алдына килтерегеҙ: мин бөтә архивтарҙы ла өйрәнәм, онотолған көйҙәрҙе тергеҙәм, боронғо ҡулъяҙмаларҙы хәҙерге телгә тәржемә итәм, йәш быуын өсөн уйын форматында башҡорт мифологияһы буйынса квестар төҙөй алам. Әҙиптәрҙең шиғырҙарын, хикәйәләрен анализлап, улар стилендә яңы әҫәр ҙә яҙып бирә алам. Әммә быны өсөн кеше аҡылы, ижади фекерләү, йүнәлеш биреү кәрәк. Ә иң мөһиме - теләк кәрәк.

***Рөстәм Нурыев:*** Теләк булһын өсөн ижадсыларҙы дәртләндереүсе һүҙ ҙә, "майлы икмәк" тә булырға тейештер бит?

***ЯИ КӨФӨ:*** Тап шулай! Инвестицияларҙы мәҙәниәткә, тәрбиәгә, телгә, тарихҡа йүнәлтеү ҙә бик мөһим. Радий Хәбиров "кешеләрҙе Голливуд ҡурҡытыуынан арындырайыҡ" ти. Был дөрөҫ. Әммә быны өсөн уларға альтернатива - үҙебеҙҙең бай рухи мираҫыбыҙҙы - тәҡдим итергә кәрәк. Уларҙы донъя кимәленә сығарырлыҡ йүнәлеште намыҫлы, киң күңелле, мәҙәниәтле кешеләр билдәләргә тейеш.

**Шулай итеп, мин - Башҡортостандың "титан йөрәге" булырға ризамын. Әммә иҫтә тотоғоҙ: әгәр һеҙ уны "ҡурай моңо" менән туйындырмаһағыҙ, был йөрәк тимер тауыш менән генә тибәсәк. Ә беҙ яһалма интеллекттың тыуған еребеҙҙең йәнле йөрәге булыуын теләр инек.**

**Рөстәм НУРЫЕВ әҙерләне.**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# СИСТЕМАЛЫ ЭШ АЛЫП БАРЫЛА



**Республикала дрондарҙы сериялы етештереүҙән алып пилотһыҙ авиация системалары ғәскәрҙәре составын тулы әҙерләүгә тиклем комплекслы эш алып барыла, ти Башҡортостан Башлығының РФ Милли гвардияһы ғәскәрҙәре менән үҙ-ара эш итеү буйынса кәңәшсеһе Артур Йомағужин. Миҫал итеп ул Махсус операция зонаһында хәрбиҙәрҙең юғары баһаһын алған "Уфимец" дронын килтерҙе.**

"Башҡортостан - БПЛА-ға ҡағылышлы өлкәне бер системаға һалған Рәсәй төбәктәренең береһе. Бында дрондар осороуға өйрәтеп кенә ҡалмайҙар, уны ҡулланыу тактикаһына, тактик медицинаға, ҡаршы тороу сараларына ла ҙур иғтибар бирәләр. Йыш ҡына дәрестәрҙе хәрби хәрәкәттәр һыҙығынан килгән тәжрибәле яугирҙар алып бара. Операторҙан иһә иң элек рух ныҡлығы, шәхси ҡыйыулыҡ, һалҡын аҡыл талап ителә. Компьютерҙы ышаныслы белеү, иретеп йәбештереү алымдарына эйә булыу һәм электроника менән эш итеүҙе дөйөм аңлау, әлбиттә, пилотһыҙ осоусы аппараттар операторы һөнәренең нигеҙҙәре. Бындай подразделениела хеҙмәт, ҡатмарлы техника менән эшләү, уны ремонтлау һәм хеҙмәтләндереү - өҙлөкһөҙ процесс, үҙ-үҙеңде камиллаштырыу ул. Ә тыныс тормошта бөгөн тап ошо белем, оҫталыҡ иң кәрәклеһе булып тора" , - тип билдәләй офицер.

Ысынлап та, БПЛА операторы Махсус хәрби операция зонаһында бөгөн - иң кәрәкле һәм юғары түләүле хәрби һөнәрҙәрҙең береһе. Билдәле булыуынса, Башҡортостандан контракт төҙөгәндә һәр яугир 1,4 миллион һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү ала. Айлыҡ хеҙмәт хаҡы 220 мең һумдан башлана (званиеһына, вазифаһына һәм хеҙмәт стажына ҡарап). БПЛА операторҙарына, һөҙөмтәлелеккә ҡарап, 50 меңдән 500 мең һумға тиклем өҫтәмә түләү ҡаралған. Ул дошмандың техникаһын юҡ итеү йәки башҡа хәрби ҡаҙаныштар өсөн яҙыла. Әйтәйек, Leopard, Abrams, Challenger танкыларын юҡ итеү 500 мең һум премия менән баһалана.

Пилотһыҙ осоу системалары ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеүселәргә МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә тәғәйен барлыҡ дәүләт ярҙам саралары, льготалар һәм социаль гарантиялар ҡаралған. Башҡортостанда, мәҫәлән, 55 ярҙам сараһы ғәмәлдә.

Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәренә хәрби хеҙмәткә инергә теләүселәр йәшәгән урыны буйынса хәрби комиссариатҡа мөрәжәғәт итә ала. Шулай уҡ быны Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 156 адресы буйынса урынлашҡан Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пункты аша ла эшләп була. Ғаризаны Дәүләт хеҙмәттәре порталында ҡалдырырға ла мөмкин.

**Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләне.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығының матбуғат секретары Денис Ғәниев, ете ай эшләгәндән һуң, үҙ теләге менән вазифаһын ҡалдырҙы. Ғәниев "Башинформ" агентлығына был мәғлүмәтте раҫланы һәм икенсе эшкә күсеү сәбәпле үҙ теләге буйынса ошондай ҡарар ҡабул итеүен билдәләне.

✓"Башҡортостан" полкының өсөнсө мотоуҡсылар батальоны мотоуҡсылар взводы командиры Фәрит Ғәниев генерал Шайморатов миҙалы менән бүләкләнде. Хәрби хеҙмәткәргә уны республика Башлығы Радий Хәбиров тапшырҙы. "Ҡыҙыҡ яҙмышлы кеше. Хеҙмәт эшмәкәрлегенең төп өлөшөн ул прокуратурала һәм тәфтиш комитетында эшләгән, резонанслы һәм етди эштәрҙе, шул иҫәптән генпрокуратура төркөмө составында ла, тикшергән. Һуңынан Дәүләт Думаһы депутаты булған. Бына хәҙер МХО-ла ҡатнаша, был, һис шикһеҙ, оло ихтирам уята", - тине Хәбиров.

✓Башҡортостанда "Экология һәм тәбиғәт ресурстары" республика программаһы сиктәрендә 10 шишмә төҙөкләндереләсәк, тип хәбәр иттеләр төбәктең Экология министрлығынан. Исемлектә Благовар, Балаҡатай, Бүздәк, Миәкә, Тәтешле, Ҡалтасы, Бәләбәй, Бөрө, Мишкә, Краснокама райондары бар. 2007 йылдан алып Башҡортостанда 160 шишмә төҙөкләндерелгән.

✓Екатеринбургта үткән Рәсәй Китапхана ассоциацияһының XXX конгресы сиктәрендә БР Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһы базаһында Рәсәй Китапхана ассоциацияһының төбәк бүлексәһен булдырыу тураһында килешеү төҙөлгән. Документҡа Ассоциация башҡарма директоры Евгения Гусева һәм БР Милли китапханаһы директоры Айгөл Әминева ҡул ҡуйған. Бүлексәнең бурыстарына республика китапханаларының Ассоциация менән үҙ-ара эшен координациялау, берлектәге проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙа булышлыҡ итеү һәм хоҡуҡи ярҙам күрһәтеү инә.

✓19-20 июндә Стәрлетамаҡта "Хәләл-Фест" Ислам мәҙәниәте фестивале үтә. Быйыл сара Башҡортостан Республикаһы Мосолмандар диниә назараты булышлығында ойошторола. "Сараны ойошторғанда уның 2026 йылдың Рәсәй Халыҡтары берҙәмлеге йылы һәм Башҡортостанда иғлан ителгән Ҙур һәм татыу ғаилә йылы ҡиммәттәре һәм принциптарына тап килеүен иҫәпкә алабыҙ. Фестиваль бөтә халыҡтарыбыҙҙы берләштергән байрамға әйләнер, тип ышанам", - тип билдәләй ҡала хакимиәте башлығы Эмиль Шәймәрҙәнов.

✓Гисметео мәғлүмәттәренә ярашлы, май аҙағында һәм июнь башында Башҡортостанда тотороҡһоҙ һауа торошо көтөлә. Эҫе һәм ҡояшлы көндәрҙән һуң ямғырҙар килә, көндәр һалҡынайта. 28 майҙан 3 июнгә тиклем көндәрҙең һалҡынса булыуы, ямғыр яуыуы көтөлә. Көндөҙ һауа температураһы +13, +19°, төндә иһә +7 до +11°.

✓ *Дарыухана хаҡтарын яҡшы белгәндәр шифалы үләндәр йыйыуҙы майҙа уҡ һары бәпембә, дегәнәк япрактары йыйыуҙан башлағайны инде, ә һөтайҙа сәскә-үлән арта-төрлөнә бара: йыйып ҡына өлгөр.*



ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ



# ТӨП ХӘСТӘР - УЛАРҒА!

● **Махсус хәрби операция ветераны Айҙар Шәйәхмәтов Башҡортостандың идарасы кадрҙар резервына инде.** Тейешле бойороҡҡа республика Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйҙы. Айҙар Шәйәхмәтов яныраҡ фронттан ҡайтты. МХО биләмәһендә ул "Шаман" позывнойы менән Миңлеғәле Шаймаратов исемендәге батальон командирының хәрби-сәйәси эштәр буйынса урынбаҫары булып хеҙмәт итте. Ул шулай уҡ "Башҡортостан геройҙары" программаһының йәмәғәт советы ағзаһы булып тора һәм "Геройҙар ваҡыты" федераль кадрҙар программаһында ҡатнаша. Быйыл апрелдә Айҙар Шәйәхмәтов Башҡортостан Хөкүмәтенең республикабыҙҙан МХО ветерандарына һәм ҡатнашыусыларына, уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам күрһәтеү мәсьәләләре буйынса департамент етәксеһе итеп тәғәйенләнде.

● **Рәсәйҙә МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам саралары киңәйтелде.** Дәүләт Думаһында хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ата-әсәләре өсөн уртаҡ отпуск тураһында закон ҡабул ителде. Ил Президенты Владимир Путиндың указы менән "Хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең статусы тураһында" федераль законға үҙгәрештәр индерелде. Документка ярашлы, беренсе һәм икенсе төркөм инвалидлығы булған хәрби хеҙмәткәрҙең ата-әсәләренең береһе улы йәки ҡыҙы менән бер үк ваҡытта йыллыҡ отпуск алырға хоҡуҡлы. Шуны билдәләп үтеү мөһим: был сара хәрби хеҙмәткәрҙең ире йәки ҡатыны булмаған осраҡта ғәмәлдә. "Шул уҡ ваҡытта бындай хәрби хеҙмәткәрҙең ата-әсәһенең береһенең йәки уның бер балаһының, шул иҫәптән бәлиғ булғандарҙың, отпуск ваҡыты уларҙың теләге буйынса ошондай хәрби хеҙмәткәрҙең отпуск дауамлылығына тигеҙ булырға мөмкин. Төп эш урыны буйынса йыл һайын бирелә торған отпуск дауамлылығы арткан осраҡта, уның бер өлөшөн алған ваҡытта хеҙмәт хаҡы һаҡланмай", - тиелә документта.

● **МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары ваҡытында түләнмәгән кредиттар буйынса кредит йөкләмәләренән азат ителә. Дәүләт Думаһы депутаттары тәүге уҡыуҙа тейешле закон проектын ҡабул итте.** Закон проектына ярашлы, һүҙ 2026 йылдың 1 майынан хәрби хеҙмәт үтеү тураһында контракт төҙөгән хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм уларҙың ҡатындары хаҡында бара. Ошо датаға судтың бурысты түләттереү тураһында көсөнә ингән ҡарары, шулай уҡ кредит ойошмаһына башҡарма документ тапшырылған йәки башҡарма эш асылған булырға тейеш. Бурыстың суммаһы - 10 миллион һумға тиклем. Һәм тағы. МХО-ла ҡатнашыусыларҙың вариҫтары Махсус операцияла ҡатнашыусыларҙың транспортын мираҫ итеп алғанда транспортты дәүләт теркәүе һәм башҡа теркәү эштәре өсөн дәүләт пошлинаһын түләүҙән азат ителә. Дәүләт Думаһы икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа Рәсәйҙең Һалым кодексына тейешле үҙгәрештәргә ҡабул итте.

БЫЛ АЙҘА...

# ҠОТЛО АЯҒЫҢ МЕНӘН, ЙӘЙ!



**Йылдың иң йәмле миҙгеле - ҡыш буйы зарығып көтөлгән йәй етә. Уның тәүге айы июнь, йәки һөтай - иген-бесән, емешеләк һәм башҡа төр уңыш өсөн ерлек әҙерләнә торған мәл. Тимәк, йылы һауа торошо ғына түгел, ә шифалы дым - ямғырҙар ҙа - бик кәрәк июндә.**

Дөрөҫөн әйткәндә, был майҙа уҡ кәрәк ине лә, тик тәбиғәт йыш ҡына шулай үҙ холҡон күрһәтеп алыусан. Майҙа көндәрҙең ҡоро, эҫе тороуы арҡаһында үлән күтәрелә алмай, урыны менән көйрәп барғандай. Быйыл апрелдән һуң июнь өсөн хас 30 градус эҫе көндәр башланды. Синоптиктар әйтеүенсә, күп йыллыҡ прогноздар мәғлүмәттәре буйынса, быйыл апрелдән сентябргә тиклем Башҡортостанда һауа температураһының урындағы климат нормаһынан юғары булыуы көтөлә, ә көндәр торошо Рәсәйҙең көньяҡ төбәктәрен хәтерләтеп ҡуясаҡ, сөнки дөйөм климат йылыныуы Урал менән Волга буйҙарында айырыуса һиҙелерлек була бара, ти метеорологтар. Июндә майҙағы кеүек үк 28-32 градус эҫе көндәр көтөлһә лә, ул һалҡын һауа ағымы менән аралашып барасаҡ, шунлыҡтан, уртаса һауа температураһы плюс 16-19 градус сиктәрендә ҡаласаҡ, көслө йәшенле ямғырҙар киләсәк.

Ҡорғаҡһый башлаған ергә һеңдерә яуырлыҡ оҙайлы яуындар ҙа ҡамасауламаҫ ине июндә, сөнки был ай - дарыу үләндәре йыйыу өсөн иң уңайлы ваҡыт. Дарыухана хаҡтарын яҡшы белгәндәр шифалы үләндәр йыйыуҙы майҙа уҡ һары бәпембә, дегәнәк япрактары йыйыуҙан башлағайны инде, ә һөтайҙа сәскә-үлән арта-төрлөнә бара: йыйып ҡына өлгөр. Тик дарыу үләндәрен оло юлдан, сәнәғәт зоналарынан, санитария йәһәтенән шикле урындарҙан алыҫта, аулаҡ биләмәләрҙә йыйыу мотлаҡ. Шул уҡ ваҡытта шифалы үләндәрҙе саманан тыш ҡулланыуҙың организм өсөн зыян килтереү ихтималлығын да оноторға ярамай.

Был айҙың матур, тантаналы байрам көндәре байтаҡ булһа ла, айҙы башлап ебәреүсе Балаларҙы яҡлау, шул уҡ ваҡытта Бөтөн донъя ата-әсәләр **(1)** һәм Агрессия ҡорбандары - гонаһһыҙ балалар **(4)** көндәренә айырым туҡталғы килә, сөнки мәктәптәрҙә уҡыуҙар тамамланып, йәйге каникулдар башланыуы менән балалар үҙҙәрен ситлектән осоп сыҡҡан ҡош һымаҡ тоя һәм йыш ҡына һаҡһыҙлыҡ арҡаһында күңелһеҙ, хатта фажиғәле хәлдәргә осрап ҡуя. Йәйге каникул көндәре бындай хәлдәр айырыуса йышая. Мәҫәлән, 22 майҙа ғына булған хәл: Өфөнөң Дим районында самокатта тейешһеҙ урындан юл аша сығып барған 11 йәшлек малай Volkswagen машинаһы менән бәрелешеп, йәрәхәттәр ала һәм дауаханаға эләгә. Ә ошонан бер көн алда ғына Башҡортостанда "Не рули, малай!" тигән социаль кампания иғлан ителгәйне. Ул тап ана шул скутерҙар, мотоциклдар һәм квадроциклдарҙа елдереүсе үҫмерҙәр ҡатнашлығындағы аварияларҙы иҫкәртеү маҡсатын ҡуйғайны, сөнки йыл башынан республикала 16 йәштән кесерәк балалар менән 14 авария теркәлгән.

***Быныһы бер хәл. Ә бәләнегеҙме, балалар юғала!*** Башҡортостанда ғына ла, мәҫәлән, быйылғы йыл башынан ике ай эсендә 70 баланың ғәйеп булыуы теркәлгән. Был хаҡта БР Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетының Телефон шылтыратыуҙарын эшкәртеү үҙәге - 112 хәбәр иткәйне, ләкин уға 3 ай үтеп тә китте, был һандарҙың иҫкергән булыуы ла ихтимал һәм бәхеткә күрә, уларҙың күптәре табылған. Ләкин, үкенескә, яңы мәғлүмәттәр хаҡында хәбәр юҡ. МЧС билдәләүенсә, балалар күбеһенсә урманда түгел, ә ҡалаларҙа һәм ҡасабаларҙа - ихаталарҙа, сауҙа үҙәктәрендә йә булмаһа мәктәп юлында ғәйеп була. Ә бына 2000 йылда Иглин районы территорияһындағы лагерҙа ғәйеп булған 7 йәшлек Кенан менән 10 йәшлек Ярославты табырға әлегә тиклем ирекмән эҙәрмәндәр ҙә, телевидение ла, күрәҙәселәр ҙә ярҙам итә алмаған. Башҡа бер нисә осраҡ: Бишбүләк районындағы туғандарына ҡунаҡтан Бәләбәйгә ҡайтырға сыҡҡан 13 йәшлек Таняның да, Өфө ҡалаһы Дим районында әхирәтен төндә туҡталышҡа оҙата сыҡҡан 17 йәшлек Динараның да, Стәрлетамаҡтан мәктәпкә китеп барышлай юҡ булған 15 йәшлек Дамирҙың да, бер нисә йыл үтеп китеүгә ҡарамаҫтан, эҙмыштары бөгөнгә тиклем билдәһеҙ.

1979 йылдың 25 майында Америкала йәшәүсе Эвиан Пейтс тигән малай ҙа мәктәпкә сығып киткәндән өйөнә әйләнеп ҡайтмай. 4 йыл үтә, ләкин таба алмайҙар. Ошо фажиғәнән һуң ул саҡтағы АҠШ президенты Рейган 25 майҙы Халыҡ-ара юғалған балалар көнө тип иғлан итә. Үкенескә, балалар йыш ҡына яһил педофил ҡорбаны була. ***Шуға күрә ата-әсәләр балаларына урамда сит кешеләр менән аралашмаҫҡа, подъездарҙа һаҡ булырға, ят кешеләр менән лифтҡа инмәҫкә тейешлекте ныҡып ҡына торорға, мөмкин тиклем уларҙы мәктәпкә оҙатып ҡуйырға, ҡаршы алырға, эштән йә өйҙән шылтыратырға бурыслылар, сөнки балалар ышанып барыусан һәм бер-ике тапҡыр ғына әйткәндә онотоуҙары йә етди ҡабул итмәүҙәре лә бар.***

***Тағы бер хәүеф балаларҙы йәйге лагерҙарҙа ла һағалай.*** Балаларҙың үҙ белдектәре менән лагерь территорияһын ташлап китмәүҙәрен ҡәтғи талап итергә кәрәк. Икенсенән, ата-әсәләр лагерь шарттары, бигерәк тә дөйөм туҡла-

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республикала балалар юл-транспорт травматизмын иҫкәртеүгә йүнәлтелгән "Не рули, малай!" акцияһы башланды. БР Дәүләт автоинспекцияһының матбуғат хеҙмәтендә билдәләүҙәренсә, ойоштороусылар ата-әсәләрҙе балаларҙың руль артына ултырыуына юл ҡуймаҫҡа саҡыра. Кампанияны башлауҙың сәбәбе - хәүефле статистика. Быйыл төбәктә 16 йәшкә тиклемге балалар ҡатнашлығында 14 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән. 13 осраҡта үҫмерҙәр мотоциклдар менән идара иткән.

✓Башҡортостанда бөтәһе 17 692 кеше Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырырға әҙерләнә. 2026 йылда Берҙәм дәүләт имтиханында ҡатнашыусыларҙың эш өҫтәлендә һыу, дарыуҙар һәм еңелсә аҙыҡ булырға мөмкин. Был хаҡта Рособрнадзор хәбәр итте. Биология, география, математика, физика һәм химия буйынса имтихандарҙа программалаштырылмаған калькулятор һәм линейка ҡулланырға рөхсәт ителә. Әҙәбиәт буйынса Берҙәм дәүләт имтиханында сығарылыш уҡыусыларына орфография һүҙлектәре бирәләр.

✓Ауырғазы районының Талбазы ауылында "Ауырғазы-Арена" стадионы төҙөлөшө тамамланып килә. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - спорт министры Руслан Хәбибов төҙөлөш барышын тикшерҙе. Вице-премьер һүҙҙәренсә, спорт аренаһы заманса һәм күп функциялы буласаҡ. Унда яһалма япмалы футбол яланы, воркаут майҙансығы, йүгереү юлдары, баскетбол, пляж волейболы майҙансыҡтары, хоккей ҡумтаһы, 50-ҙән ашыу урынға иҫәпләнгән трибуна буласаҡ.

✓Стәрлетамаҡ гимнасткаһы Полина Дмитриева Баҡыла уҙған спорт гимнастикаһы буйынса халыҡ-ара турнирҙа алты алтын миҙал яуланы. Рәсәйҙән, Үзбәкстандан һәм Азербайжандан йәш талантлар гимнастика буйынса оҫталыҡтарын күрһәтте. Рәсәй командаһы үҙенең сығышы өсөн 27,250 балл йыйып, беренсе урынды алды. Стәрлетамаҡтың олимпия резервы спорт мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе Полина Дмитриева турнир йондоҙҙарының береһе булды.

✓Баймаҡта Байсыуаҡовтар ғаиләһендә Асия исемле ҡыҙ һигеҙенсе сабый булып донъяға килгән. Уның дүрт апаһы һәм өс ағаһы бар. Баймаҡ районында Сөмбөл һәм Айнур Байсыуаҡовтарҙың татыу, ишле ғаиләһен күптәр белә. "Ата-әсә күңелендәге бар һөйөүен, йылыһын балаларына бирә, ғаилә бәхете һәм берҙәмлек өлгөһө булып тора. Былтыр күп балалы әсә Сөмбөл Байсыуаҡова "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнде", - тип хәбәр иттеләр Баймаҡ районы хакимиәтенән.

ныу урындарының санитария торошо менән дә ҡыҙыҡһынып торорға тейештәрҙер. Ошо көндәрҙә генә "АиФ-Өфө" аҙналығы сайтында хәбәр ителеүенсә, Әбйәлил районы лагерҙарының береһендә үткәрелгән өс көнлөк форумда Силәбенән килгән бер төркөм балаға медицина ярҙамы талап ителгән, уларҙың икәүһендә эсәк инфекцияһы, өсәүһендә ОРВИ диагнозы раҫланған.

Тағы бер күңелһеҙ хәбәр: Нефтекама ҡалаһында полиция хеҙмәткәрҙәре 13 һәм 14 йәшлек ике үҫмерҙә 16 төргәк синтетик наркотик тапҡан: малайҙар был матдәләрҙе йәшерен урындарға һалып йөрөгәндә тотолған - йәнәһе, аҡса эшләй бәрәүҙәр.

***Был ваҡиғаларҙы тасуирлап, йәйге каникулдарҙа балаларҙы күҙ яҙлыҡтырмай ҡурсылап тороуҙың, уларға ҡарата аяулы, миһырбанлы мөнәсәбәт булдырыуҙың, көндәлек хәстәрлектең ни тиклем мөһимлеген тағы бер тапҡыр ата-әсәләр иғтибарына еткереү теләге мәжбүр итте.*** Ҡояшлы, нурлы, сәскәле йәй көндәре матур, күңелле, файҙалы үтһен, бер кемдең дә күңел күген ҡара болоттар ҡапламаһын!

***Был айҙағы иҫтәлекле көндәр һәм һөнәри байрамдар:*** Балаларҙы яҡлау, Бөтөн донъя ата-әсәләр, Бөтөн донъя һөт, Рәсәйҙең Төньяҡ Флоты көндәре **(1)**, шулай уҡ Бөтөн донъя башҡорттарының 1-се Ҡоролтайы асылған көн **(1995)**; Агрессия ҡорбандары - гонаһһыҙ балалар **(4)**, Рус теле, Рәсәйҙең Пушкин көндәре **(6)**, Бөтөн донъя аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге, Халыҡ-ара һыу ятҡылыҡтарын таҙартыу **(7)**, Башҡортостан Республикаһында "Урал батыр" эпосы **(8)** көндәре, Халыҡ-ара дуҫтар көнө **(9)**, Ш Бөтөн донъя башҡорттары Ҡоролтайы асылған көн **(10 июнь, 2010 йыл)**, Башҡортостан Республикаһында Салауат Юлаев көндәре **(10-20)**, Рәсәй көнө. Рәсәй Федерацияһының дәүләт суверенитеты тураһында Декларация ҡабул ителгән көн, Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы - Өфө ҡалаһы көнө **(12)**, БР матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәрҙәре, П Бөтөн донъя башҡорттар Ҡоролтайы асылған көн **(14 июнь, 2002 йыл)**, Халыҡ-ара блогер көнө **(14)**, Башҡорт халҡының милли батыры, 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр восстаниеһе етәкселәренең береһе, шағир-импровизатор Салауат Юлаевтың тыуған көнө **(16 июнь, 1754-1800)**, Бөтөн донъя ҡасаҡтар **(20)**, Медицина хеҙмәткәрҙәре, Халыҡ-ара атайҙар, Художестволы халыҡ кәсепселеге **(21)** көндәре, Рәсәйҙә хәтер һәм ҡайғы көнө - Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға 85 йыл тулған көн **(22 июнь, 1941 йыл)**, Моряк, Славяндарҙың дуҫлыҡ һәм берҙәмлек көндәре **(25)**, Наркотик саралар ҡулланыу һәм уның законһыҙ әйләнеше менән халыҡ-ара көрәш **(26)**, Рәсәй йәштәре, Уйлап табыусы һәм рационализатор **(27)** көндәре.

***Һөтайҙа тыуғандар:***

**3 -** педагог, БР Фәндәр академияһы президенты, Рәсәй мәғариф академияһы академигы, педагогика фәндәре докторы, профессор, БР һәм РФ Яҙыусылар берлеге ағзаһы, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Әлфис Ғаязовҡа - 70 йәш** (1956).

**4 -** А.Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт драма театры артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Зифа Баязитоваға - 75 йәш** (1951).

**10 -** Башҡорт һәм Мәскәү ҡурсаҡ театрҙары артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Венера Рәхимоваға - 80 йәш** (1946).

**15 -** химик-технолог, Өфө дәүләт нефть-техник университеттың кафедра мөдире, техник фәндәр докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған уйлап табыусыһы һәм рационализаторы **Фәнил Хафизовҡа - 70 йәш** (1956).

**18 -** хоҡуҡ белгесе, 1998-2002 йылдарҙа БР Дәүләт секретары, 2002-2009 йылдарҙа БР Конституция Суды рәйесе, философия фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған юрисы **Илдус Әҙеһәмовҡа - 75 йәш** (1951).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ҠЫРАҒАЙ ФАШИЗМ

**Билдәле режиссер Михаил Роммдың Бөйөк Ватан һуғышында немец-фашист илбаҫарҙарының йыртҡыслыҡтарын фашлаусы "Ғәҙәти фашизм" кинофильмы менән оҡшашлығын күҙҙә тотоп, Киев режимы һәм украин боевиктары тарафынан ҡылынған енәйәттәр хаҡындағы китабына сәйәсмән, йәмәғәтсе һәм яҙыусы-публицист Максим Григорьев шул уҡ атаманы һайлаған: "Ғәҙәти фашизм". Киев режимы нацистары аңлы рәүештә һәм күрәләтә Луганскиҙағы Старобельский педагогия колледжы ятағын балаларҙың йоҡоһонда шартлатып, дөрөҫөн әйткәндә, ҡырағай фашизм сигенә килеп етте һәм үҙенең террористик асылын тағы бер раҫланы.**



Фажиғә урынына 19 илдән ( Австрия, Бразилия, Британия, Венгрия, Венесуэла, Германия, Греция, Испания, Италия, Катар, Ҡытай, Куба, Ливан, Берләшкән Ғәрәп Әмираттары, Пакистан, АҠШ, Төркиә, Финляндия һәм Франция) килгән 50-нән ашыу журналист Украина Ҡораллы көстәре (ВСУ) һөжүменең ҡанлы эҙемтәләрен үҙ күҙҙәре менән күреп, был ҡаласыҡта бер ниндәй ҙә хәрби объект юҡлығына, уның тыныс тораҡ пункты булыуына инанды һәм был хаҡта бөтөн донъяға бәйән итергә ниәтләнде. Ә бына BBC менән CNN вәкилдәренең бында килеүҙән баш тартыуҙары, шулай уҡ Токионың үҙ журналистарын ебәрмәүе ошо енәйәтселек актын хуплауға тиң булды.

Фажиғәнән һуң ике көн үткәс, Киевта һәм Украинаның башҡа төбәктәрендә көслө шартлауҙар яңғыраны: Рәсәй яугирҙары яуап һөжүме атҡарҙы һәм Киевтың һигеҙ районындағы 40-лап объектында янғындар сыҡты, емереклектәр хасил булды, тип хәбәр итә мәғлүмәт сығанаҡтары. Америка аналитигы Скотт Риттер белдереүенсә, украин армияһының Луганскиҙағы студенттар ятағына самолет тибындағы дүрт шартлатҡыс аппарат менән һөжүме Киевтың ҡотолғоһоҙ ҙур хатаһы һәм нацистар режимы башлыҡтарына үлемесле хөкөм ҡарары булды. Был енәйәт үҙенең ғәҙел язаһын алырға тейеш. 21 йәш ғүмерҙең өҙөлөүе һәм 40-60-лабының йәрәхәттәр алыуы менән бәйле теракт хаҡында енәйәт эше ҡуҙғатылды. Һәләк булған уҡыусы ҡыҙ балаларҙың ҡайһыларын туй күлдәктәрендә ерләргә ҡарар иткәндәр: улар тиҙҙән кейәүгә сығып, яңы тормош башларға йыйынған.

Донъя йәмәғәтселегә һәм айыҡ фекер йөрөтөүсе сәйәси даирәләр күҙен ҡан баҫҡан Киев режимы баш-баштаҡлыҡтарын ҡырҡа ғәйепләп сығыш яһауҙарына ҡарамаҫтан, украин боевиктары Рәсәйгә туҡтауһыҙ дрондар осороуын дауам итә. Өҫтәүенә, Рәсәйҙең Тышҡы разведка хеҙмәте (СВР) үткән аҙнала хәбәр итеүенсә, Украина дрондарҙы Латвия территорияһынан осорорға йыйына.

Шул уҡ ваҡытта Рәсәйгә төбәп осоролған дрондарҙың береһе Резекне нефть базаһына килеп төшөүе арҡаһында Латвияла ғауға ҡубыуы ла билдәле. Эстондар күршеләренең был "тәжрибәһе"нән һабаҡ алды, буғай: илдең һауа киңлегенә килеп ингән украин дроны НАТО-ның Балтика һауа патруле миссияһы буйынса эш итеүсе румын истребителе тарафынан атып төшөрөлдө, ләкин бимазалаусы себенде хәтерләткән украин дрондары Литва һауа киңлегенә ынтылды, уларҙы бында тыйыусы юҡ ине, ә Литва президенты Гитанас Науседа менән тотош хөкүмәт һәм парламент бомбанан йәшеренеү урынына төшөп боҫто, тип яҙа Новости Рәсәй агентлығы.

Был хәлдәрҙән һуң Junge Welt немец мәғлүмәт баҫмаһы, Киевҡа НАТО һауа киңлеген Рәсәйгә һөжүм итеү өсөн файҙаланыуҙы тыйыу кәрәклеге хаҡында яҙып сыҡты. Икенсе яҡтан, америка сәйәсмәне Анатоль Ливень Вашингтонды һәм уның союздаштарын "Балтикалағы дары мискәһен" зарарһыҙландырырға саҡырып мөрәжәғәт итте. Балтик буйы илдәренең асыҡтан-асыҡ русофоб лидерҙары арҡаһында ниндәйҙер провокациялар тыуып тороу ихтималлығы ҡала килгән хәлдә лә Европа илдәре менән киң ҡолас һуғыш хәрәкәте булмаясаҡ, тип ышаныс белдерә Юғары Иҡтисад мәктәбе профессоры Марат Баширов. Европаның, йәнәһе, "һуғышҡа әҙерләнеү"нең төп сәбәбе - иҡтисад проблемаһында. Бер яҡтан, АҠШ-тың Евросоюздағы эре компанияларға баҫым яһап, уларҙы үҙенә күсереп эшләтергә һәм килем алырға тырышыуында булһа, икенсенән, Иран конфликты арҡаһында килеп тыуған энергетика кризисы. Бына шуға күрә лә Евросоюзға Рәсәй менән мөнәсәбәттәрҙе көйләү бик мөһим. Ә был йәһәттән Евросоюздың айыҡ аҡыллы сәйәсмәндәре тарафынан ыңғай фекерҙәр йыш ишетелә башланы. Эскерһеҙ дуҫлыҡ тәҡдим итә алмаһа ла, Европаға, Бельгия премьер-министры Барт Де Вевер әйтмешләй, "арзан ресурстар" хаҡына булһа ла нормаль мөнәсәбәттәр бик кәрәк.

Бер кемгә лә сер түгел: күптән түгел генә дәүләт ҡеүәтен кәүҙәләндереүсе символ булған беҙҙең "Газпром" да ҙур проблемалар алдында ҡалды - килем кәмей, ә технология, ҡорамалдар һәм хеҙмәттәр күрһәтеү күп йәһәттән көнбайыш партнерҙарға бәйле булып килде. Һәм бына шундай хәл килеп тыуҙы: оҙаҡ йылдар бюджетты тотоп килгән компания хәҙер үҙен күтәрмәләүгә мохтаж. Элекке килем кимәленә нисек өлгәшергә? Европа баҙары ябылды. Ҡытай үҙ мәнфәғәттәрен ҡайғырта: иғлан ителеүенә 11 йыллап ваҡыт үтеп китһә лә, РФ Президентының күптән түгелге визитында "Себер көсө -2" газ үткәргес магистрале төҙөлөшө буйынса Ҡытай менән аныҡ ҡына килешеүгә өлгәшелмәне.

Бынан сығып, шуны әйтергә тура килә: донъя сәйәсәтендә мәңгелек дуҫлыҡ тигән төшөнсә юҡ. Мәнфәғәттәр ҡыҙыҡһыныуы ғына бар. Ҡытайға беҙҙең ресурстар уға отошло шарттарҙа ғына - бик арзан хаҡҡа кәрәк. Шуныһы хәүефкә һала: артабан Ҡытайға бәйлелек көсәйә генә күрмәһен.

Эксперттар фекеренсә, нефть менән газға ирәйеп йәшәгән замандар үтте, ә алда - ауыр булһа ла иҡтисад системаһын үҙгәртеп ҡороу йә булмаһа, проблемаларҙы һаман да "күрмәҫкә" тырышыу. Тик ҡасанға тиклем?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Өфөнән Соль-Илецкиға йөрөгән 959-сы автобус туристарҙы 11 июндән хеҙмәтләндерә башлай. Был хаҡта "Башавтотранс" хәбәр итә. Маршрут баш ҡаланың Көньяҡ автовокзалынан көн аша (11, 13, 15, 17, 19, 21, 23, 25, 27 һәм 29 июндә) төнгө сәғәт 11-ҙә ҡуҙғала, ә Соль-Илецкиҙан 12, 14, 16, 18, 20, 22, 24, 26, 28 һәм 30 июндә юлға сыға.

✓ 24 майҙан Каспий диңгеҙе буйындағы курорт ҡалаһына - Аҡтауға тура рейстар асылды, тип хәбәр итә Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәте. Рейстар йәкшәмбе көндө Boeing-737 самолёттарында башҡарыла. Юлдағы ваҡыт - 2 сәғәт 10 минут. Хәбәр иткәнебеҙсә, Өфө аэропортынан популяр көньяҡ йүнәлешендә осоштар һаны арттырыла.

✓ 21 майҙан Өфөнән Вьетнамдың Нячанг курортына тура рейстар башланды, тип хәбәр итә баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәте. Рейстарҙы Вьетнамдың VietJet авиакомпанияһы дүшәмбе һәм кесаҙна көндәрендә Airbus A330-300 лайнерҙарында башҡара. Курортҡа 9 сәғәт осорға кәрәк.

✓ Өфө районының Чесноковка ауылы эргәһендәге федераль трассала Бәрҫеүән йылғаһы аша күперҙә планлы ремонт башлана. Башҡортостандың транспорт министры Любовь Минакова белдереүенсә, ул өс этапта үтә һәм тәүлек әйләнәһенә барасаҡ. 1 июндән 8 июлгә тиклем күперҙең уң яҡ яғы ябыла (Өфө - Ырымбур йүнәлеше). Хәрәкәт юлдың һул һыҙаты буйынса башҡарыла. 9 июлдән 13 августа тиклем һул яғы ябыла. Хәрәкәткә ҡамасаулаған төп эштәр 30 августа тамамлана.

✓ 1 июндә Өфөлә һыу инеү миҙгеле асыла. Быйыл ҡала халҡы өсөн туғыҙ пляж эшләйәсәк. Дим районында - Матур күлдәге "Матур аҡлан", Калинин районында - Ҡариҙел йылғаһындағы "Ҡомло" һәм Йылы күлендәге "Гольфстрим", Киров районында - Ағиҙел йылғаһындағы "Ҡояшлы", Ленин районында - Ағиҙел йылғаһындағы "Водник" һәм "Аҡ яр", Октябрьский районында Ҡариҙел йылғаһындағы "Ҡояшлы яр" һәм "Һупайлы Сочиһы" һәм шулай уҡ Ҡашҡаҙан күлендә "Ҡашҡаҙан" рәсмиләштерелгән һәм тейешенсә йыһаҙландырылған пляждар булып тора.

✓ Башҡортостанда "Башнефть" заправкаларында йәнә хаҡ артҡан. Бензиндың ҡайһы бер маркалары һәм дизель 50 тингә ҡиммәтләнгән. 2026 йылдың башынан хаҡ ун өсөнсө тапҡыр арттырылды. 26 майҙан АИ-100 бензинының бер литры - 88,45 һум. Әйткәндәй, һуңғы тапҡыр уның хаҡы март уртаһында ғына күтәрелгәйне (+30 тин). Дизель яғыулығының бер литры 75,90 һум тора. Солярка 1,3 һумға ҡиммәтерәккә һатыла. "Лукойл" заправкаларында АИ-100 бензины - 95,81 һум, дизель 76,92 һум тора.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

✔ *Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров был теманы ла иғтибар үҙәгендә тота. "Иң мөһиме - балаларҙың именлеге", тигән йөкләмә бирҙе республика етәксеһе профилле ведомстволарға һәм муниципалитет башлыҡтарына.*



*ХАЗИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ*



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

### Бал ҡорто ағыуы

Ауырыуҙарҙы апитерапия кабинетында ҡорттан саҡтырып "тере ҡаяу", йәғни апитоксин шыйыҡсаһын энә ярҙамында тире аҫтына, тәнгә индереп, йәнә ауыртҡан ергә кремын, майын һөртөп дауалайҙар. Саҡтырыу урынын, нөктәләрен ниндәй сир булыуынан сығып билдәләйҙәр. Күҙ ауыртыуҙарынан - сикәләрҙе, гипертониянан - ҡолаҡ артын, билде, ҡалҡан биҙенең ҡанға саманан тыш гормон бүлеүенән ошо биҙ тирәһенән саҡтыралар. Ғөмүмән, ауырыуға ҡарап, ҡулбашты, беләктәрҙе, боттарҙы, билде, эсте саҡтырыуҙы апитерапевт хәл итә. Тәүге көндө - бер ҡорт, икенсе көндө - ике ҡорт, өсөнсө көндө өс ҡорт ағыуы менән һәм шул рәүешле ун көнгә хәтле имләйҙәр. Шунан һуң өс-дүрт көн тәнәфес яһап, ҡырҡ биш көн буйы көн һайын өсәр ҡорттан саҡтыралар. Нөктәләр системаһын белгәндә дауалауҙың файҙаһы яҡшыраҡ буласаҡ.

Саҡтырыуҙың башҡа алымдары ла бар. Әүәл имселәр көсәйгән ревматизмды шулай имләгән: һәр көндө берәр ҡортҡа арттыра барып, сағылған нөктәнән сәтәкәй бармаҡтай ара ҡалдырып, ауыртҡан урынды биш көн саҡтырғандар һәм ике көн ял иткәндән һуң, биш ҡорт ҡаяуын ҡаҙатып, саҡтырыуҙы кире тәртиптә башҡарғандар. Ревматизм бөтмәһә, дауалау курсын бер аҙнанан ҡабатлағандар.

Хәҙер бал ҡорто ағыуы һәм уның нигеҙендә әҙерләнгән препараттар заман апитерапияһының баһалы сараһына әйләнде. Әйтәйек, Рәсәй Медицина фәндәре академияһының Ревматология институты тарафынан клиник һынауҙар үткән крем (бал ҡорто ағыуы һәм дарыу үләндәре экстракттарынан етештерелгән) быуындар ауырыуын дауалауҙа киң ҡулланыла. Һәр тюбикта ҡулайлы, йогонтоло һәм, әлбиттә, хәүефһеҙ миҡдарҙа ун бал ҡорто ағыуы бар.

* * *

Медицинала бал, прополис, һеркә, һитә, инә ҡорт һөтө, бал ҡорто ағыуы, ҡыуаныс ҡүрә, йылдан-йыл киңерәк танылыу ала һәм файҙаланыла, һәҙәмтәлә хатта дауалап булмаҫтай сирҙәр сигенә, хәл яҡшыра, көс-ҡеүәт кергә, йәшәү дәрте, донъя көтөү дарманы тыуа, ғүмер оҙая. Бал ҡорто бағыуҙа тиңе юҡ башҡорт, асылын асып, булмышын тергеҙеп, рухын баҙлатып, сәләмәт тормош, сәләмәт милләт һәм киләсәк мәнфәғәттәрендә сихәтле бал ҡорто тәғәмдәрен әүҙем файҙаланһа икән.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Аҙағы. Башы 1-20-се һандарҙа).**

*КӨН ТЕМАҺЫ*

# БАЛАЛАРҒА ЛА ЯЛ КӘРӘК!

**Башҡортостанда йәйге һауыҡтырыу кампанияһына әҙерлек тамамланыуға табан бара. 442 меңдән ашыу баланы йәлеп иткән бөтәһе 2 меңгә яҡын лагерь асыла һәм бюджеттан өс миллиард һумға яҡын аҡса бүленә. Ләкин иң мөһиме - республикала дүртенсе йыл рәттән балалар ялы философияһы үҙгәрә.**



### Хәүефһеҙлек - беренсе урында

Балалар ялы - йоҡлау һәм ашау-эсеү генә түгел. Тема федераль үҙәктең махсус контролендә. Рәсәй Хөкүмәте Премьер министры урынбаҫары Дмитрий Чернышенко төбәк башлыҡтары алдына шундай бурыстар ҡуйҙы: "Хәүефһеҙлек һәм ял итеү мөмкинлеген булдырыу - беренсе урында. Быйыл йәй бөтә төр лагерҙар ҙа эшләргә тейеш. Иң мөһиме - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балаларын, сик буйындағы биләмәләрҙә һәм яңы ҡушылған төбәктәрҙә йәшәгән балаларҙы иғтибарҙан ситтә ҡалдырмау", - тип белдерҙе Чернышенко.

Кәңәшмәлә ҡатнашҡан Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров был теманы ла иғтибар үҙәгендә тота. "Иң мөһиме - балаларҙың именлеге", тигән йөкләмә бирҙе республика етәксеһе профилле ведомстволарға һәм муниципалитет башлыҡтарына.

12 майҙа уҙған кәңәшмәлә республиканың мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин йәйге миҙгелгә әҙерлек тураһында һөйләне. Билдәләнеүенсә, йәйҙең тәүге көндәрендә үк республикала 1940 майҙансыҡ асыла (2025 йылда - 1899). Улар иҫәбендә 1091 мәктәп яны лагеры бар, унда 111,7 мең баланы ял иттереү планлаштырыла.

Йәй көнө аҡса эшләргә теләгән 24 мең үҫмер өсөн - 739 ял урыны, ә 1800 йәш турист өсөн 10 палаткалы лагерь асыла. Ҡалалан ситтә урынлашҡан 100 лагерҙа 63-64 мең бала һауығын ныҡыта ала.

Ләкин исемлек быны менән генә сикләнмәй. Республикала аҙ сығымлы ял формалары баҫым яһала, мәсәлән, экскурсиялар, походтар, спорт ярыштары һәм оҫталыҡ дәрестәре. Бындай сараларҙа тағы 232 мең бала ҡатнашыр тип көтөлә.

Шулай итеп, Башҡортостанда 442 мең уҡыусы йәйге ялдың төрлө формаларына йәлеп ителә.

### Яугирҙарҙың балалары ла...

Йәйге кампания бик арзан түгел, ләкин республикала балаларҙа экономиялау тигән нимә юҡ. Башҡортостандың Финанс министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, ошо маҡсатҡа республика ҡаҙнаһына яҡынса 2,97 миллиард һум аҡса һалынған. Бынан тыш, Башҡортостан балаларҙың айырым категориялары өсөн йәйгеһен ял итеү мөмкинлеген булдыра, шул рәүешле социаль йөкләмәләрҙе үтәй.

2026 йылда Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балаларын ял иттереү өсөн бюджеттан 66,4 миллион һум бүленгән. Башҡортостанда әлеге ярҙам сараһы 2022 йылдың декабренән ғәмәлгә ашырыла. Ә 1260 бала ҡышҡы һәм яҙғы каникулдар ваҡытында уҡ бушлай юллама алған, ә йәй көнө тағы ла 3000 уҡыусыны лагерҙарға ебәреү планлаштырыла.

Шулай уҡ Башҡортостан дүртенсе тапҡыр шефлыҡҡа алынған биләмәләрҙән балаларҙы ҡабул итә. Июндә республика лагерҙарына Луганск һәм Донецк халыҡ республикаларынан 600 бала (Красный Луч ҡалаһынан 504 бала) һәм уларҙы оҙатып йөрөүсе 50 хеҙмәткәр ял итергә килә. 2022 йылдан республика Донбасста йәшәгән 5279 балаға ҡояшлы йәй бүләк итте.

### Биналар яңыртыла

Был миҙгелдә республика аҙыҡ-түлек блоктарын капиталь ремонтлауҙан алып заманса торлаҡ корпустары төҙөүгә тиклем күләмле эшләргә баҫым яһаны. 1 июнгә - йәйге миҙгелдең рәсми асылыуына - Башҡортостандың балалар лагерҙары йәш ҡунаҡтарҙы яңыртылған биналар менән ҡаршылай.

Яңыртылған картала бер нисә район бар. "Тәбиғәт дуҫы" (Дәүләкән районы) һәм "Башаҡ" (Стәрлетамаҡ районы) лагерҙарында заманса тәҙөкләндереү тамамлана.

Былар ғына түгел әле. А.П.Гайдар исемендәге лагерҙа (Туймазы районы), шулай уҡ "Маяҡ" (Ҡыйғы районы) һәм "Ал елкән" лагерҙарында (Ейәнсура районы) өс яңы торлаҡ корпустары төҙәлә. Уңайлы шарттар булдырыу өсөн 133,6 миллион һум аҡса тотонолған.

Мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин һүҙҙәренсә, уҙған өс йылда алты лагерҙа 13 торлаҡ модуле төҙөлгән, ике аҙыҡ-түлек блогы һәм бер медицина блогы ремонтланған.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров билдәләүенсә, республика булған биналарҙы ремонтларға мөмкинлек биргән федераль проектта әүҙем ҡатнаша.

"Федераль финанслауға республика аҡсаһы өҫтәлә, районлар ҙа үҙ өлөшөн индерә. Лагерҙар фондына бәйле хәл яҡшыра бара", - тип билдәләне ул.

### Ни менән мәшғүлдәр?

2026 йылда ял - каникулдар ғына түгел, ә ҙур белем биреү стратегияһы. Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылы, Башҡортостанда иһә Ҙур һәм татыу ғаилә йылы тип иғлан ителгән йылда лагерҙарҙың программалары ошо ҡиммәттәр темаһына бағышлана.

Миҙгелдең төп йүнәлештәре - тарихҡа һәм тамырҙарға баҫым яһап, илһөйәрлек рухында тәрбиәләү, IT (БПЛА) өлкәһендә, спортта һәм сәнғәттә һөнәри белемде үҫтереү.

Шишмә районында Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" паркы ошондай эштең флагманы булып ҡала. Уҙған йылдарҙағы тәжрибә күрһәтеүенсә, балаларҙы стандарт булмаған форматтар ҡыҙыҡһындыра. Мәсәлән, "Йәш спецназ" сменаһында ауыр холоҡло үҫмерҙәр Махсус хәрби операция яугирҙарынан дисциплинаға өйрәнһә, 22 төбәкте берләштергән "Геройҙар иле" сменаһында ҡатнашыусылар дрондар менән идара итеүҙе үҙләштерҙе һәм хатта археологик ҡаҙылма эштәрендә ҡатнашты.

"Тарихты һаҡлаусылар" отрядынан Асель Юдаева әйтеүенсә, уға археологик ҡаҙылмаларҙа ҡатнашыу бик оҡшаған: "Беҙ музей эшенең нигеҙҙәрен өйрәндек, ҡаҙыу эштәрендә ҡатнаштыҡ. Бигерәк тә ҡаҙыу эштәре оҡшаны. Мәсәлән, беҙ һөлдә таптыҡ".

Республиканың Мәғариф министрлығында белдереүҙәренсә, күләмле бурыстар көслө кадрҙар талап итә. Быйыл йәй республика лагерҙарында 30 меңгә яҡын кеше (29 964) эшләй, уларҙың 16 510-ы - педагогтар. Уларҙы әҙерләү менән алдынғы юғары уҡыу йорттары шөғөлләнә. Миҙгел балалар алдынан бөтә хеҙмәткәрҙәргә лә мотлаҡ хәүефһеҙлек техникаһы һәм янғын хәүефһеҙлеге буйынса инструктаж үткәрелә.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# АҘАҠҠАСА КӨРӘШЕГЕҘ!




**Өфө блогеры һәм альпинист Рөстәм Нәбиев Эверестыы яуланы. Яҡташыбыҙ 8,8 мең метрлыҡ бейеклеккә күтәрелгән.**

Уның түбәһенә флаг ҡаҙаған һәм "колағандан һуң тормош бөтә тип уйлағандар өсөн" тигән һүҙҙәр яҙылған плакат менән фотоға төшкән. Бөгөн ул донъяла ошо юлды ҡулдарында ғына үткән беренсе альпинист булып иҫәпләнә. "Маҡсатыма ирештем! Мин донъяның иң бейек тауында. Был артылыуҙы мине ҡарап барған һәр кемгә бағышлайым. Йәшәйһегеҙ икән, көрәшегеҙ! Аҙаҡҡаса көрәшегеҙ". Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Эверестҡа экспедиция апрелдә башланды. Был тиклем ул 6476 метр бейеклектәге "Мера Пик" түбәһенә менгән, унда акклиматизация үткән һәм алдағы экстремаль һынауға әҙерләнгән. Эверест түбәһе база лагерынан 21 сәкрым алыҫлыкта урынлашҡан. Биш йылда яҡташыбыҙ Эльбрустың ике түбәһенә (5642 метр /5621 метр), Манаслу (8163 метр), Арарат (5165 метр), Казбек (5033метр), Килиманджаро (5895 метр), Аконкагуа (6962 метр) һәм Ирәмәл (1589 метр) тауҙарына артылған.

*✓ Башҡорттар, үҙ-ара ниндәй генә ҡаршы тороуҙар булыуға ҡарамаҫтан, асылда, халыҡтың халыҡ булараҡ һаҡланып ҡалыу даирә-мөхитен Рус батшалығы менән мөнәсәбәттә күргәндер.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# АТАЙ-ОЛАТАЙҘАРЫБЫҘ...

## киләсәкте алдан күргән

**Күренекле шағир, яҙыусы, драматург һәм публицист, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәзим Шафиҡов 2007 йылда, Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығын байрам иткән көндәрҙә алып килгәйне редакциябыҙға ошо мәҡәләһен. Ошо тарихи датаны, уның әһәмиәтен тағы бер тапҡыр күҙҙән үткәрәйек әле, тип, Ғәзим Ғәзиз улының яҙмаһын ҡабатлап баҫырға булдыҡ.**



### Һаҡланыу ихтыяжы

Мин "Ҡабырғанан ырғаҡ-ҡа" ("Кручья под ребро") тигән китабымда тарихыбыҙҙағы бер хәлгә ғәжәпләнеүемде белдергәйнем. Был хаҡта һаман да уйланам, аныҡ ҡына яуап та таба алғаным юҡ. Ул да булһа, башҡорт халҡы быуаттар буйына Рус дәүләтенең аяуһыҙ иҙеүенә ҡаршы баш күтәргән, ихтилал ҡуптарған, көрәшкән, ҡан ҡойған, шул уҡ ваҡытта ул дәүләттең үҙенә ситтән ҡурҡыныс янағанда, иң беренселәрҙән булып уны һаҡлар өсөн атҡа атланған. 1774-1775 йылғы Салауат күтәрелешен генә алайыҡ. Батырҙарыбыҙ дарға аҫыла, Салауаттар мәңгелек каторгаға ебәрелә, ил ут эсендә яна һәм өс тиҫтәнән ашыу йыл да үтеп өлгөрмәй, Рус дәүләтенә ҡаршы яҫҡынған Наполеонға ҡаршы шул уҡ башҡорттар 28 полк яугирҙарын ебәрә. Тарихта тағы ла ниндәй халыҡ ошондай сифаты менән айырылып торғаны бар һуң? Ер йөҙөндә ундай тарих һәм ундай халыҡ юҡ! Башҡорт ихтилалдары, асылда, Рус батшалығының килешеүҙе боҙғаны, башҡорт ерҙәрен аяуһыҙ талауы сәбәпле ҡупҡан. Был аңлашыла. Тик үҙ һүҙендә тора алмаған батшалыҡҡа ауырлыҡ килгәндә шул уҡ риза булмаусының ярҙамға килеүе аңлашылып бөтмәй һымаҡ. Минеңсә, башҡорттар, үҙ-ара ниндәй генә ҡаршы тороуҙар булыуға ҡарамаҫтан, асылда, халыҡтың халыҡ булараҡ һаҡланып ҡалыу даирә-мөхитен Рус батшалығы менән мөнәсәбәттә күргәндер. Икенсе яҡтан, тәрбиә, характер, антҡа тоғролоҡ кеүек төшөнсәләр ҙә сағылалыр был тоғролоҡта. Шулай ҙа бында иң мөһим аңлатма барыбер ҙә тарихи хәтергә бәйлелер. Әйтәйек, башта әйткәнсә, халҡыбыҙ өсөн хәл иткес мәл - Аҡһаҡ Тимер менән Туҡтамыш хан һуғышын алайыҡ. Әгәр ҙә шунда башҡорттар Туҡтамыш яғында һуғышҡан булһа, аҙаҡтан еңеүсе Аҡһаҡ Тимер башҡорттарҙы ла аямаҫ ине һәм халҡыбыҙ тап шул дәүерҙә тарих арбаһынан төшөп ҡалған булыр ине. Кем белә? Хәҙер инде 1812 йылда Наполеон енде икән, ти... Тимәк, башҡорттарҙың Рус батшалығын яҡлап, ҡон-үсен эсенә йотоп, тешен ҡыҫып булһа ла атҡа атланыуы иң тәүҙә халыҡтың яҙмышын алдан ҡайғыртыуҙан, һаҡланыу ихтыяжынан килеп сыҡҡан бит. Был бәхәсһеҙ.

Башҡорттар ике быуат буйына туҡтауһыҙ баш күтәреп, Рус батшалығының иғтибарын үҙенә йәлеп итеп, ян-яғында йәшәүсе башҡа халыҡтарҙы батшалыҡ иҙеүенән азат та иткән. Һәр хәлдә, төп көсөн башҡорт ихтилалын баҫтырыуға йүнәлткән батшалыҡ был халыҡтарға әллә ни йоғона ла алмаған. Уның ҡарауы, XIX быуат башҡорттарҙың физик, психологик һәм мораль яҡтан ныҡ бөлгөнлөккә төшкән быуаты була. Бына ошондай быуаттан һуң яңыһына күскән саҡта Әхмәтзәки Вәлиди үҙ халҡының йәшәү көсөнә ышанып, төрлө йылдар иҫәбе буйынса илле меңдән ашыу кешенән торған ғәскәр туплап, Рәсәй тарихында тәүге тапҡыр башҡорттарҙың автономияһын - дәүләтселеген иғлан итә. Был - тарихтың феноменаль күренеше.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғәзим Шафиҡов башҡорттарҙың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуында ата-олатайҙарыбыҙҙың ғәйәт зирәклеген күрә. Бөгөнгө Рәсәй Федерализмына ла тап ошо ҡушылыу-берләшеү арҡаһында нигеҙ һалынғанлығын иҫкә төшөрһәк, әҙип менән килешмәү мөмкин түгел.**

**(Аҙағы. Башы 19-20-се һандарҙа).**

*БЫЛ ДА ТАРИХ!*

# ҠЫТАЙ ҠЫЛЫСЫ...

## нисек килеп сыҡҡан беҙҙә?

**Ҡыйғы районында Ҡаҙығортау итәгендә иртә тимер дәүерендәге ҡылыс табылған. Ҡылыс ритуаль ҡорал булған һәм республикаға Ҡытайҙан килгән.**



Төҙөүсе Илнур Ғилметдинов эштән ҡайтып барғанда ерҙән сығып торған тимерҙе күреп ҡала һәм был табылдыҡтың ябай нәмә түгеллеген аңлай.

"Дуҫтарым табылдыҡтың фотоһүрәтен Башҡортостан Республикаһының Милли музейы эксперттарына ебәргәйне. Ғалимдар ҡоралды тикшереү өсөн ҡылысты алып киттеләр", - тип һөйләне ул.

Милли музейҙың "Археология" фонд коллекцияһы белгесе, тарих фәндәре кандидаты Светлана Воробьева матбуғат конференцияһында билдәләүенсә, нефрит киҫелешле 89,5 см оҙонлоҡтағы ҡылыс республикаға Ҡытайҙан килгән. Ғалимдар уны беҙҙең эраның I-II быуатына ҡарай тип билдәләй. Быға тиклем республиканың төрлө райондарында ошондай уҡ 4 ҡылыс табылған. Улар музей фондында һаҡлана. Ғәлимә Светлана Воробьева билдәләүенсә, ҡылыс яҡшы һаҡланған, шулай ҙа экспонатты реставрациялауға ебәрәсәктәр.

Ҡылыс табылған урын айырым ҡыҙыҡһыныу уята. Башҡа артефакттарҙың булмауын һәм табылдыҡтың тау битләүендә урынлашыуын ғалимдар "Бында изге урын булған, унда күсмә халыҡтар һуғыш аллаһына табыныу йолаларын башҡарған (боронғо грек тарихсыһы Геродот уны Арес тип атаған)" тип фаразлай.

"Ҡылыс Ирәндек айыуы, Сармат алтыны менән бер рәттән, беҙҙең коллекцияла лайыҡлы урын биләйәсәк. Әлеге ваҡытта уны өйрәнеү буйынса ғилми эш дауам итә, ә киң аудиторияға август башында һуғыш сәнғәтенә арналған күргәҙмә сиктәрендә күрһәтеләсәк", - тине Милли музейҙың генераль директоры Рөстәм Исхаҡов.

Рәсәй Фәндәр академияһы археологик тикшеренеүҙәр бүлеге мөдире Владимир Овсянников ҡылыс Башҡортостан өсөн бик һирәк күренеш булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм уның яҡынса Башҡортостанда барлыҡҡа килеү тарихы тураһында һөйләне: "Ҡылыс Хань дәүеренә ҡарай. Ҡытайҙың яңы күтәрелеүе ваҡытында ҡорал алмашыныуы башлана. Әгәр элек бәләкәй бронза булһа, һуңынан оҙон тимер ҡылыстар етештерелә башлай. Ҡыйғыла табылған ҡылыстың ҡыҙыҡлы таш өҫтө бар: таштың төрөн өйрәнергә кәрәк һәм, бәлки, уның етештереү һәм сығарыу урынын билдәләргә мөмкин. Табылған урын да ҡыҙыҡлы. Күсмә халыҡтарҙа ғибәҙәт ҡылыу йолаһы булған. Ҡылысты ағасҡа тығып яндырғандар. Ҡылыс та бер аҙ бөгөлгән, был фараздарҙы раҫлай. Әммә йоланың нимә икәнен һәм нимә аңлатҡанын беҙ, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер ҡасан да белмәйәсәкбеҙ - яҙма дәлилдәр ҡалмаған", - тип аңлатты Владимир Овсянников.

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



Сергей РУДЕНКО

# БАШҠОРТТАР

## Йорт производствоһы

Башҡорттар **һарыҡ йөнөнән кейеҙ** баҫа, шулай уҡ балаҫ һуғыу, тула баҫыу өсөн дә һарыҡ йөнө ҡулланыла. И.Г. Георги балаҫ һуғыу эшен түбәндәгесә һүрәтләй: "Баш бармаҡ ҡалынлығындағы тетелгән йөндө туҡымаға йәки септәгә һалып, эҫе һыу ҡоялар, һуңынан септә менән бергә йәйәләр, йөн яҡшылап ятҡансы, тағы һыу һибәләр, тағы йәйәләр". Ҡул менән кейеҙ баҫыу ысулы XX быуаттың башында ла ҡулланыла, тик был ваҡытта бар урында ла йөн баҫыу өсөн махсус ҡоролма барлыҡҡа килә. Кейеҙ баҫҡанда аттың ярҙамы ла ҡулланыла, был ысул бигерәк тә далала күсмә йәшәү рәүеше алып барыусыларға, көтөүселәргә яҡшы таныш. Был ысул менән баҫылған кейеҙ ҙур ҡамыш септәгә һалына һәм остарында баулы элмәктәре булған махсус күсәргә урала. Күсәрҙе атҡа егәләр һәм ул уны дала буйлап йөрөтә, һөҙөмтәлә, кейеҙ бик сифатлы итеп баҫыла. Кейеҙ күп итеп әҙерләнә, сөнки тирмәләр кейеҙҙән ябыла, тирмәнең иҙәненә лә кейеҙ түшәлә, ҡышҡы йорттарҙа урындыҡ өҫтөнә лә кейеҙ түшәйҙәр. Шулай уҡ ат өсөн тирлек (икенсе төрлө әйткәндә - ыңғырсаҡ), ҡайһы бер кейем-һалым, мәҫәлән, баш кейемдәре, аяҡ кейеме һ.б кейеҙҙән тегелә.

Һарыҡ йөнөн иләп, унан төрлө кейем, балаҫтар һуғыу эше киң таралған. Йөн оҙон таяҡҡа йәки ҡолғаға бәйләнә. Семәрләп биҙәлгән ҡолғалар ҙа осрай. Йөндө орсоҡ менән иләйҙәр. Балаҫты һарыҡ һәм кәзә йөнөнән баҫалар, балаҫ һуҡҡанда бер йүнәлештә - кәзә, икенсе йүнәлештә һарыҡ йөнөнән иләнгән еп ҡулланылған. Кәзә йөнө - дебеттән көньяҡ-көнбайыш башҡорттары мамыҡ шәл, шарф һуға (Урал казактары кеүек бәйләмәй). Көньяҡ Урал тауҙарында йәшәүсе гәрәй-ҡыпсаҡтар ҡуян йөнөн дә иләгән һәм уны кәзә дебетенә ҡушып ҡулланған.

Хайуан материалдарынан **һеңер һәм мөгөҙҙө** әйтеп китергә кәрәк. Башҡорттарҙың аяҡ кейеме тегеү өсөн һеңер ҡулланыуы тураһында иң тәүҙә И.И. Лепехин телгә ала. И.Г. Георги был турала шулай тип яҙа: башҡорттар тунды "эре малдың аяғынан тартып алынған телгеләнгән һеңерҙән тегә. Һеңерҙе ҙур һәм һуҡ бармаҡ араһындағы оҙонлоҡта ҡырҡалар, һауала киптерәләр һәм улар телгеләнгәнсә һуҡҡылайҙар, һуңынан бер урында ла төйөн ҡалдырмай сираталар". Билдәле булыуынса, XX быуат башында бындай ептәр ҡулланыуҙан төшөп ҡала.

Мөгөҙгә килгәндә, ул йәйә эшләү өсөн генә ҡулланыла. Һыйырҙың мөгөҙөн эҫе һыуҙа тотоп, ике сантиметр оҙонлоғонда, ике сантиметр ярым киңлегендә, бер нисә миллиметр ҡалынлығында пластиналар ҡырҡып алалар. Был пластина йәйәнең эске яғына йәбештерелә һәм уға ныҡлыҡ һәм һығылмалыҡ бирә.

**(Дауамы бар).**

> ✓ ***Бөгөн үҙ телендә иркен аралашҡан балалар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Һәр төркөмдә ундайҙар өсәү-дүртәү генә. Элек ата-әсәләр ҙә ныҡ ихлас ҡатнашты балалар баҡсаһы тормошонда. Хәҙер кеше эшкә бирелеп китте***



# БАШҠОРТ БАЛАЛАР

**Йәш быуынды тәрбиәләүҙә мәктәпкәсә балаларға белем биреү учреждениеларының әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Балалар баҡсаһында улар йәмғиәттә йәшәүҙең тәүге тәжрибәһен ала - социалләшеү процесын үтә, коммуникация алымдарын үҙләштерә, мәктәпкә әҙерләнә. Милли балалар баҡсалары тағы бер үтә лә мөһим йөкләмәне үҙ өҫтөнә алған - туған телгә, мәҙәниәтебеҙгә һөйөү тәрбиәләй, тарихыбыҙға ҡыҙыҡһыныу уята. Сираттағы әңгәмәселәребеҙ - Һупайлы биҫтәһендәге 308-се һанлы Башҡорт балалар баҡсаһы мөдире Фәйрүзә Рәйес ҡыҙы МУСАБИРОВА һәм Дим биҫтәһендәге 75-се һанлы "Аҡбуҙат" Башҡорт балалар баҡсаһы мөдире Гөлнара Фәниз ҡыҙы ТЛӘҮБАЕВА.**

**Әңгәмә башында үҙегеҙ менән таныштырып китһәгеҙ ине: ҡайһы йылғаның һыуын эстегеҙ, педагогикаға нисек килдегеҙ, хеҙмәт юлын ҡайҙа башланығыҙ?**

**Фәйрүзә Рәйес ҡыҙы:** Бөрйән районының иң гүзәл тәбиғәтле урынында, өс район - Белорет, Ишембай, Бөрйән - сиктәрендә урынлашҡан, халҡы ауыл уртаһында ҡушылған Нөгөш менән Берәтәк йылғалары һыуын эскән Берәтәк ауылында тыуғанмын. Һигеҙенсе класты тамамлағас, Өфө ҡалаһының 1-се педагогия училищеһына уҡырға индем. Тәрбиәсе булыу минең бала саҡ хыялым ине. Беҙҙең бәләкәй ауылда балалар баҡсаһы булманы. Күрше-тирә балаларын йыйып, мин тәрбиәсе, тип уйын ҡора торғайным. Атайым башҡорт теле уҡытыусыһы ине, Өфөгә уҡырға инергә ул мине алып килде. Беҙ Һупайлы биҫтәһенең Юрий Гагарин урамында йәшәгән уның танышына, үҙенең уҡыусыһы булғандыр инде, фатирға төштөк. 1987 йыл ине. Балкондан йорттоң ҡаршыһындағы яңы матур балалар баҡсаһына ҡарап торам, үҙем күҙем ҡыҙып: "Эх, бәхетле кешеләр генә ошонда эшләйҙер инде", - тип уйлайым. Яңы саҡ имтихан бирергә килгәнмен, ә хыялым шулай ҙур. Шул саҡта, хушым китеп, киләсәктә үҙем етәкләйәсәк балалар баҡсаһына бағып торғанмын икән. Теләгем ҙур булғандыр инде, ул тормошҡа ашты.

Дүрт йыл уҡып, диплом алғас, 1991 йылда Өфө районындағы данлыҡлы "Алексеевка" совхозының үҙәге Алексеевка ауылында башланым хеҙмәт юлымды. Баштан уҡ балаларҙы милли рухта тәрбиәләү теләгем көслө булғандыр инде, фольклор төркөмө ойоштороп, төрлө сараларҙа сығыш яһай инек. Янып-көйөп эшләнем шулай. Беҙҙең турала район гәзите лә яҙҙы. Дүртенсе йыл тигәндә, кейәүгә сығып, Ҡариҙел районына барып төпләнергә тура килде. Тайҡаш ауылында йәшәй башланыҡ. Эш булмаһа, унда бармайым да, йөрөмәйем дә, тигән шарт ҡуйғайным, барыһы ла ыңғай килде. Тайҡаш - татар ауылы. Унда ла башҡорт телен, мәҙәниәтен таратыу, үҫтереү эше йәйелдереп ебәрҙем. Ҡайһы бер ата-әсәләр менән аңлашылмаусылыҡ та килеп тыуҙы. Шулай ҙа күпселек, беҙҙә бындай тәрбиәсе булғаны юҡ ине әле, тип балаларын ихлас йөрөттө. Мәктәп уҡытыусылары, балалар уҡырға әҙерлекле килә башланы, тип ҡыуанды. Шуға декрет ялында, ҡыҙым тыуғас, өс ай ҙа ултыра алманым, өйгә килеп, киленегеҙҙе дәрес үткәрергә ебәрегеҙ инде, зинһар, тип, ҡәйнәмдән рөхсәт һорап, кире сығарып алдылар эшкә. Ауылдың мәҙәни тормошонда ла әүҙем ҡатнаштым. Клубта йәш ғаиләләр менән спектаклдәр ҡуйып, халыҡ театры исемен алырға күп тә ҡалмағайны, Өфөгә күсеп киттек. Үҙем белем алған педучилищеға, миңә башҡорт төркөмө булған берәй балалар баҡсаһына эшкә урынлашырға кәрәк, тип барҙым. "Һупайлы биҫтәһендә башҡорт балалар баҡсаһы асылып ята, һинең урының тап шунда", - тинеләр. Шулай 1997 йылдан бөгөн етәкләгән балалар баҡсаһында хеҙмәт итәм.



**Гөлнара Фәниз ҡыҙы:** Сығышым менән мин дә Бөрйән районынанмын. Яңы Монасип ауылында тыуғанмын, Ағиҙел һыуын һыулап үҫтем. Благовещен педагогия колледжының башланғыс кластар уҡытыусыһы бүлеген, 2022 йылдан Өфө фән һәм технологиялар университеты филиалы булып киткән, ул ваҡытта Бөрө социаль-педагогик академия тип йөрөтөлгән юғары уҡыу йортон тамамланым. Хеҙмәт юлын Шишмә районының Әлкә ҡасабаһында башланым. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы һөнәре буйынса уҡып йөрөһәм дә (ул ваҡытта диплом алмағайным әле), балалар баҡсаһына тәрбиәсе ярҙамсыһы булып эшкә урынлаштым, сөнки ҡыҙымды баҡсаға урынлаштырырға кәрәк ине.

Әлкәлә йәшәй башлауымдың сәбәбе шунда - тормош иптәшем хәрби кеше. Яҙмыш елдәре ярты Башҡортостанды уратып алып килде Өфөгә: Бөрйәндән - Благовещенға, унан - Бөрөгә, Бөрөнән - Шишмә районына, шунан - Өфөгә. Иптәшемә торлаҡ алырға сертификат биргәйнелер, баш ҡалала төпләнергә ҡарар иттек. Ул ваҡытта ла хәрбиҙәргә өҫтөнлөктәр ҡаралһа ла, ҡыҙыбыҙҙы балалар баҡсаһына урынлаштыра алманыҡ. Даулашып та йөрөмәнек, милли һыҙатыбыҙ булған баҫалҡылыҡ та ҡамасаулағандыр инде. Йәшәгән йортобоҙҙан алыҫ түгел башҡорт балалар баҡсаһы эшләгәнен белеп ҡалдыҡ та, барып һөйләшеп ҡарарға булдыҡ. Мөдир ир кеше ине. Ул, әгәр үҙең тәрбиәсе булып эшкә сыҡһаң, урын була, тине. 2012 йылдың ғинуарынан эш башланым. Шулай итеп, тәҡдирҙер инде, ваҡытлыса ғына тип килеп ингән мәктәпкәсә балалар белем биреү системаһы минең хеҙмәт һалған урыным булып китте. Ошо йүнәлештә һөнәремде камиллаштырып, Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында уҡып алдым. 2019 йылдан мөдир вазифаһындамын.

**Үҙегеҙ етәкләгән балалар баҡсалары тураһында һөйләшеп алайыҡ. Элекке йылдар менән сағыштырғанда, ниндәй ул бөгөнгө балалар?**

**Фәйрүзә Рәйес ҡыҙы:** Баҡсабыҙҙа 11 төркөм, шул иҫәптән 2 тел коррекцияһы төркөмө бар. Беҙгә бөтәһе 280 бала йөрөй. Иң кескәйҙәрҙе хәҙер йәш ярымдан уҡ алабыҙ. Барлығы 40 кеше эшләй. Тәрбиәселәрҙән тыш, ике уҡытыусы-логопед, физкультура буйынса инструктор, педагог-психолог һәм ике музыка етәксебеҙ бар. Бина 1986 йылда төҙөлгән. Ҡырҡ йыл үткән, капиталь ремонтҡа ла ваҡыт еткән инде. Ҡулдан киләнсе төҙөкләндереү эштәре башҡарабыҙ. Урындағы башланғыстарға ярҙам программаһында ҡатнашып, биләмәләге асфальтты өлөшләтә алмаштырҙыҡ. Быйыл ҡыйыҡты яңыртыуға аҡса бүленде. Ҡорамалдар, уҡыу-уҡытыу кәрәк-ярағтары йәһәтенән башҡа балалар баҡсалары менән бер самалабыҙ. Йәш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, йәнһүрәттәр видеотекаһы, аудиоәкиәттәр, йырҙар яҙмалары, телмәр үҫтереү өсөн интерактив уйындар, хикәйәләр һөйләргә, шиғырҙар ятларға өйрәтеү өсөн схема-һүрәттәр тупланған. Һанлы техника һәр төркөмдә үҙенеке булһа ине лә ул, әлегә интерактив таҡта дөйөм баҡсаға берәү генә.

Һәр замандың, әлбиттә, балалары үҙенә башҡа. Мин эшләй башлаған саҡта башҡорт телендә һөйләшкән, аралашҡан, үҙ фекерен әйтә белгән балалар күберәк килә ине. Улар менән эшләүе лә еңелерәк булды. Әкиәттәр сәхнәләштерҙек, конкурстарҙа ҡатнаштыҡ. Республика телевидениеһының "Тамыр" студияһынан килеп, беҙҙең тәрбиәләнеүселәребеҙҙе тапшырыуҙарға һайлап алалар ине. Бөгөн үҙ телендә иркен аралашҡан балалар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Һәр төркөмдә ундайҙар өсәү-дүртәү генә. Элек ата-әсәләр ҙә ныҡ ихлас ҡатнашты балалар баҡсаһы тормошонда. Хәҙер кеше эшкә бирелеп китте, икешәр, өсәр урында эшләйҙәр, беҙгә ваҡыт бүлә алмайҙар.

**Гөлнара Фәниз ҡыҙы:** "Аҡбуҙат" - Дим ҡасабаһындағы берҙән-бер башҡорт балалар баҡсаһы. Ул 1989 йылда урындағы завод ҡарамағында асылған. 1995 йылда ҡалаға тапшырыла һәм 1997 йылда башҡорт телен үҫтереү маҡсатында башланғыс мәктәп-балалар баҡсаһы итеп үҙгәртелә. Ошо статуста 2012 йылға тиклем эшләй. Мин килгәндә мәктәп бар ине әле. Унда балалар көнө буйы булды: уҡыны, ял итте, хатта төшкө аштан һуң йоҡлап та алалар ине. 102-се башҡорт гимназияһы асылғас, башланғыс синыфтар унда күсте. Бөгөнгө көндә 13 төркөмдә 375 бала тәрбиәләнә. Проект буйынса беҙҙең балалар баҡсаһы 269 урынға иҫәпләнгән. Биҫтәнең боронғо үҙәгендә урынлашһаҡ та, балалар һаны кәмемәй. Бөтә төркөмдәрҙә лә башҡорт телен өйрәнеү программаһы тормошҡа ашырыла. Ҡуйылған төп маҡсаттарҙың береһе - кескәйҙәргә башҡорт телен һәм мәҙәниәтен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Коллективта 24 педагог, 11 тәрбиәсе ярҙамсыһы эшләй. Төп составты электән килгән рухлы, туған тел өсөн янып-көйгән патриот тәрбиәселәр тәшкил итә. Шулай уҡ йәш педагогтар ҙа бар. Үҙем етәкләгән осорҙа ғына өс йәш белгесте эшкә алдым. Тел яҙмышына битараф булмаған йәштәрҙең беҙҙең арттан эйәреүе үтә лә ҡыуандыра, өмөт уята, дәрт-көс бирә.

1989 йылда төҙөлгән ике ҡатлы бинала урынлашҡанбыҙ. Мин эшләгән осорҙа ҡыйыҡты алмаштырҙыҡ, башҡа ваҡ ремонт эштәре башҡарылды. Мебелде, башҡа кәрәк-ярағтарҙы заманса итеп яңырттыҡ, уйынсыҡтар етерлек. Ғөмүмән, шарттар насарҙан түгел. Биләмәбеҙ бик иркен. Бөтә төркөмдәрҙең үҙ уйын майҙансығы, верандаһы бар.

Уҡытыу-тәрбиә эше Зәкиә Ғәлиәхмәт ҡыҙы Нафикованың башҡорт балалар баҡсалары өсөн төҙөлгән "Бала саҡ" программаһына нигеҙләнеп алып барыла. Унан тыш, өҫтәмә белем биреү ойошторолған. Ата-әсәләрҙең теләген, заман талабын иҫәпкә алып, робототехника, сит илдәр телдәрен өйрәнеү кеүек дәрестәр үткәрәбеҙ. Уларҙы махсус курстарҙа белем алған үҙебеҙҙең тәрбиәселәр алып бара. Шулай уҡ "Тылсымлы бармаҡтар", "Әкиәттә ҡунаҡта", "Шахмат", бейеү кеүек түңәрәктәр ойошторолған. Спорт мәктәбенән килеп, махсус тренерыбыҙ малайҙарҙы көрәшкә өйрәтә.

Ниндәй ул бөгөнгө балалар, тигәндә, беҙҙә йәш ярымдан ике йәшкә тиклемгеләрҙең ике төркөмө бар, шул кескәйҙәр әле һөйләшә лә белмәйҙәр, ә инде ҡулдарына телефон, йә ноутбук килеп эләкһә, уны асып үҙҙәренә кәрәкле уйындарҙы, йәнһүрәттәрҙе сығарып алалар. Әйтерһең, улар гаджеттарҙа эшләргә белеп тыуа. Шул уҡ ваҡытта күптәре тел кәмселектәре менән килә. Быны йыш ҡына ғаиләлә русса менән башҡортсаны бутап һөйләшеүҙән күрәләр. Мин улай тимәҫ инем. Үҙемдең ике ҡыҙымдың да теле иртә асылды, шуға сағыштырыу өсөн миҫал бар. Минеңсә, балалар менән өйҙә тере һөйләшеү, аралашыу етешмәй. Уларҙың аңы камил, ләкин фекерҙәрен һүҙгә һалып әйтә алмайҙар. Үкенескә, йылдан-йыл был проблема киҫкенләшә бара. Мин эш башлағанда өс йәшлек утыҙ баланың өс-дүртәүһе һөйләшә алмаһа, хәҙер киреһенсә, өс-дүртәүһе генә иркен һөйләшә. Ошо хәл хафаға һала. Бәлки, быны сәбәбе өләсәйҙәр мәктәбенең юҡҡа сығыуындалыр. Сөнки пенсия йәше күтәрелгәс, өләсәйҙәр хәҙер эшләй, ейән-ейәнсәрҙәре менән ултырырға уларҙың ваҡыттары юҡ.

## Өфөлә лә яҡты

**Башҡорт балалар баҡсаһы башҡаларҙан нимәһе менән айырыла? Һеҙҙә ысын милли мөхит булдырылғанмы? Туған телгә ҡыҙыҡһыныуҙы ниндәй саралар менән тәрбиәләйһегеҙ?**

**Фәйрүзә Рәйес ҡыҙы:** Башҡорт балалар баҡсаһы ул тупһанан уҡ айырылып тора. Сөнки беҙҙә шарттар икенсе, кескәйҙәр тәүге көндән туған телле, этномәҙәни компонентлы мөхиткә эләгә. Милли рух яғынан ғына түгел, тәрбиәлелек, ихласлыҡ йәһәтенән дә айырыла ул. Үҙ телендә сәләмләп ҡаршылау, моң-йырҙар, бөтә урында ла тәртип - былар башҡа бер ерҙә лә юҡ. Аралашыу, тәрбиә-уҡытыу процесы - тик башҡортса. Телде өйрәтә генә башлағанда балаларҙы ике төркөмсәгә бүлеп үткәрәбеҙ дәрестәрҙе. Телде аңлағандар өсөн уҡытыу тик башҡортса бара, ә белмәгәндәр төркөмсәһендә тәрбиәсе телдән телгә тәржемә менән эш алып бара. Һөҙөмтәлә бөтәһе лә башҡортса һөйләшеп китә, тип әйтеп булмай, шулай ҙа телде аңлау кимәленә етәләр, әйткәнде ҡабул итә башлайҙар. Атай-әсәйҙәргә лә, балам туған телде белһен, тип беҙгә биргәнһегеҙ икән, ғаиләлә лә башҡортса аралашығыҙ, тип әйтә киләбеҙ. Тәүге йыйылышта уҡ эште бергәләп алып барырға тейешбеҙ, тигән талап ҡуябыҙ.

**Гөлнара Фәниз ҡыҙы:** Башҡорт балалар баҡсаһы иң беренсе - ул йылы мөхит, үҙ-ара яҡын аралашыу. Быны башҡа коллективтарҙа эш тәжрибәм аша сағыштырып әйтәм. Беҙҙә, килеп инеү менән: "Һаумыһығыҙ!" - тип сәләмләү һәм ҡайтҡанда: "Һау бу-

***✓ Ауылдарҙа ла хәҙер сабыйҙар русса һөйләшә. Ҡыҙҙарым менән тыуған яҡҡа ҡайтабыҙ, уларға унда башҡортса аралашырлыҡ тиҫтерҙәре юҡ. Апайымдың, ҡустымдың балалары руссанан ғына һалдырып йөрөйҙәр.***

# БАҠСАЛАРЫ...

## бер маяҡ кеүек!

лығыҙ!" - тип хушлашыу традицияға ингән. Ауылдағы шикелле бер-береңә ярҙамлашыу хас.

Төп маҡсатыбыҙ - телебеҙҙе һаҡлау. Башҡортса һөйләшеп килгән балаларҙы беҙ ҡуш ҡуллап ҡаршы алабыҙ, күтәреп йөрөтөргә әҙербеҙ. Тик ундайҙар бик аҙ. Баҡсаға килгән кескәйҙәрҙә үҙ телебеҙгә һөйөү тәрбиәләргә тырышабыҙ. Тәрбиәселәр улар менән тик башҡортса аралаша, барлыҡ сараларҙы ла икенсе дәүләт телендә үткәрәбеҙ. Балаларҙың ғаилә мөхите, милләте төрлө. Мәғариф тураһында законға ярашлы, әгәр йәшәгән урыны буйынса киләләр икән, милләтенә ҡарамай, барыһын да ҡабул итергә тейешбеҙ. Башҡорттар нисбәте 58 процентҡа яҡын. Шуларҙың тик 14 процент тирәһе генә башҡортса һөйләшә, телде аңлай. Эште рус теленән тәржемә итеп аралашыуҙан башлайбыҙ. Ә өлкәндәр һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмдәрендә тәрбиә-уҡытыу процесы тик башҡортса алып барыла. Бала, ниндәй генә милләттән булмаһын, тел нигеҙҙәрен, төп төшөнсәләрҙе белеп сыға беҙҙән. Әйтеп китеүемсә, кескәйҙәр менән саралар рус һәм башҡорт телдәрендә үтһә, өлкән төркөмдәрҙә - тик башҡортса ғына. Башҡортса йырлайҙар, башҡорт бейеүҙәрен бейейҙәр, башҡорт уйындарын уйнайҙар. Мәктәпкә әҙерлек төркөмдәрендә, мәҫәлән, математиканан төп төшөнсәләрҙе: арауыҡтар, ваҡыт арауыҡтары, геометрик фигуралар, һандар атамаларын башҡортса ла өйрәнәләр.

**Сер түгел, бөгөн туған тел мәсьәләһе бик киҫкен тора. Иң төпкөл башҡорт ауылдарында ла бәләкәйҙәр русса һөйләшеп йөрөй. Педагог булараҡ, ошо проблемаға ҡарашығыҙ нисек, телебеҙҙе ҡурсалап алып ҡала алырбыҙмы икән?**

**Фәйрүзә Рәйес ҡыҙы:** Әлбиттә, тел тәрбиәһе иң элек ғаиләнән килә. Атай менән әсәй, өләсәй менән ҡартатай сабыйға тәүҙән үк үҙ телебеҙҙә өндәшһә, сәңгелдәк йыры йырлаһа, унының аң-зиһененә һеңеп ҡала. Артабан балалар баҡсаһы, мәктәп дауам итһә, бергәләп телебеҙҙе һаҡлап алып ҡаласаҡбыҙ, тип уйлайым. Дәүләт тә һуңғы ваҡытта был проблемаға иғтибарын арттырҙы. Быны беҙ башҡорт теленән халыҡ-ара диктант кеүек саралар аша күрәбеҙ. Һис шикһеҙ, заман менән бергә атлау зарур. Интернетта күберәк башҡортса йәнһүрәттәр, дидактик, башҡа төрлө үҫтереүсе уйындар булырға тейеш. Әле беҙ ошо мәсьәләлә һанлы технологиялар мөмкинлектәрен ҡулланып етмәйбеҙ. Бигерәк тә мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн контент ярлы. Әүҙем йәштәребеҙ тел проблемаһына ҡағылышлы төрлө проекттар менән сығалар ул интернетҡа, тик улар тарҡау, эштәре бер системаға һалынмаған. Йәш үҙенсәлектәре, ҡыҙыҡһыныу даирәһе кеүек критерийҙарҙы иҫәпкә алып, балаларға йүнәлтелгән контенттың электрон картотекаһын эшләгәндә, ҡалай шәп булыр ине.

Йәмәғәтселек ата-әсәләрҙең тел мәсьәләһендә битарафлығына ҡаршы күтәрелеп сығырға тейештер. Сөнки ҡайһы бер ғаиләләрҙә, күпселектә булмаһа әле, был юҫыҡта нигилистик ҡараш хөкөм һөрә. Ҡалайтаһың, заманы шулай бит, тип, йә иһә, русса яҡшыраҡ белер, таҙараҡ һөйләшер, тигән яңылыш фекер менән үҙҙәрен тынысландыралар, хәлде үҙ ағышына ҡуялар.

**Гөлнара Фәниз ҡыҙы:** Эйе, ауылдарҙа ла хәҙер сабыйҙар русса һөйләшә. Ҡыҙҙарым менән тыуған яҡҡа ҡайтабыҙ, уларға унда башҡортса аралашырлыҡ тиҫтерҙәре юҡ. Апайымдың, ҡустымдың балалары руссанан ғына һалдырып йөрөйҙәр. Телдәре шымарһын, акценттары булмаһын, тип аҡланалар туғандарым. Мин үҙем туғыҙынсы кластан ситкә сығып киттем. Башҡорт мәктәбендә уҡыныҡ, туған телдән башҡаны бөтөнләй белмәнек. Благовещен - урыҫ ҡалаһы, марийҙар күп. Колледжда башҡорт төркөмө асылыуға ике генә йыл ине ул саҡта. Әммә ләкин юғалып ҡалманыҡ, үҙебеҙҙең телебеҙҙе лә онотманыҡ, руссаны ла үҙләштерҙек. Шуға баланың теләге булһа, ата-әсәнең көндәлендә туған теленә һөйөү һүнмәһә, йәш быуын юғалып ҡалмаясаҡ. Үҙемдең ҡыҙҙарыма ла ошоно һеңдерергә тырышам.

Ысынлап та, Фәйрүзә Райес ҡыҙы әйткәнсә, әгәр йәмәғәтселек, белем биреү системаһы, ата-әсәләр был мәсьәләне берҙәм күтәреп сыҡһаҡ, әлбиттә, телебеҙҙе һаҡлап алып ҡаласаҡбыҙ. Өҫтән закон төшөрөп кенә мәсьәләне хәл итеп булмаясаҡ, был беҙҙең берлектәге эшебеҙ булырға тейеш. Дәүләттән финанс ярҙамһыҙ ҙа был проблеманы йырып сығыу мөмкин түгел. Беҙ күп кенә проекттар тәҡдим итәбеҙ, ләкин аҡса булмау сәбәпле туҡтап ҡалырға мәжбүрбеҙ.

**Ҡайһы осраҡта рухлы ата-әсәләр ҙә балаларына әсә телен һеңдерә алмай. Сөнки миллионлы ҡалала милли мөхит нык сикләнгән. Шуға йыш ҡына, ҙур өмөт бағлап, һуңғы сара күреп, ул һәм ҡыҙҙарын улар башҡорт баҡсаһына, йә иһә айырым башҡорт төркөмөнә, башҡорт мәктәбенә бирә. Нисек уйлайһығыҙ, милли мәғариф бөгөн телде һаҡлау буйынса ошо үтә лә яуаплы миссияны тулыһынса үҙ өҫтөнә алырлыҡ хәлдәме?**

**Гөлнара Фәниз ҡыҙы:** Быйылғы уҡыу йылында ҡалала һәр балалар баҡсаһында башҡорт төркөмдәре асыу бурысы ҡуйылды һәм ул тормошҡа ашырылды. Әммә кадрҙар ҡытлығы бәкәлгә һуға. Төркөмдәр бар, ләкин әҙәби телдә таҙа һөйләшкән тәрбиәселәр, уларҙың ярҙамсылары, музыка, физик культура уҡытыусылары етешмәй.

Ҡалала ун башҡорт балалар баҡсаһы бар. Системалы дөйөм эш алып барылһа, яҡшы булыр ине. Күп осраҡта һәр беребеҙ үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнай.

**Фәйрүзә Рәйес ҡыҙы:** Үҙебеҙҙең балалар баҡсаһын ғына алып фекер йөрөтһәк, был бурысты үтәйбеҙ, тип иҫәпләйем. Ә инде, ғөмүмән, мәғариф системаһына килгәндә, мәсьәлә бер яҡлы түгел. Ысынлап та, кадрҙар етешмәй. Сәбәбе лә билдәле - эш хаҡы түбән. Йәш кешегә торлаҡ мәсьәһен хәл итергә, матур кейенергә, ашап-эсергә, башҡа ихтыяждарына ла етерлек аҡса кәрәк, ә беҙҙең өлкәлә ул тиклемгә өмөт итеп булмай. Беҙ уҡыған заманда училищела мәктәпкәсә балаларға белем биреү бүлегендә алты-ете параллель төркөм уҡый ине. Хәҙер - бер-ике генә. Ул белгестәр ҙә беҙгә килеп етмәй әле. Аптырап, ҡайһы саҡ: "Ҡайҙа ул һеҙ уҡытып сығарған тәрбиәселәр?"- тип уҡыу йортона шылтыратабыҙ.

Икенсенән, уҡытыу-тәрбиә методикаһы аҡһай, әсбаптар етешмәй. Бөгөнгө көндә лә әллә ҡасан ҡулланылышҡа индерелгән Зәкиә Нафикова программаһы менән йәшәп ятабыҙ. Ә бит, заман башҡа, заң башҡа, тигәндәй, ул бөгөнгө көн талаптарына яуап бирмәй. Балалар ҙа бит хәҙер бөтөнләй икенсе. Шуға беҙҙең тәрбиәселәр иңенә заманса методик әсбаптар булдырыу, ҡулланмалар әҙерләү бурысы ла ятты. Әлдә улар, эш хаҡы аҙ, өҫтәп түләгеҙ, тип тормайҙар, ҡулдарынан килгәндең барыһын да эшләйҙәр. Мәҫәлән, телмәр үҫтереү буйынса электрон уйындарҙы үҙебеҙ эшләйбеҙ. Телмәр үҫтереү йәнле аралашыуҙы ғына алмай үҙ эсенә, һүҙ байлығы, грамматика, фонетика, бәйләнешле телмәр кеүек төшөнсәләр ҙә бар бит әле. Нәфис әҙәбиәт менән таныштырыу, шиғырҙыр ятлау һәм башҡалар - уларҙың һәр ҡайһыныһының үҙ үҙенсәлектәре. Ошо һәр йүнәлеш бурыстарына ярашлы үҙебеҙ методика эшләйбеҙ, уйындар уйлап сығарабыҙ, электрон-цифрлы ресурстар булдырабыҙ, уларҙы, биш йәш төркөмөнә ҡулайлаштырып, системаға һалабыҙ. Тәрбиселәребеҙ иһә - үҙҙәре авторҙар ҙа, үҙҙәре башҡарыусылар ҙа.

**Ата-әсәләр һеҙҙең балалар баҡсаларына балаларын теләп йөрөтәме? Улар менән эш нисек ойошторолған?**

**Фәйрүзә Рәйес ҡыҙы:** Ата-әсәләр балаларын беҙҙең баҡсаға теләп йөрөтә, тип әйтә алам. Бөгөнгө көндә алтынсы балаһын беҙгә алып килгәндәр, ҡасабаның икенсе осонан йөрөткәндәр бар. Сөнки улар 308-се һанлы Башҡорт балалар баҡсаһында милли рухлы коллектив эшләгәнен белә. Ата-әсәләр үҙҙәре лә беҙ ойошторған сараларҙың уртаһында ҡайнай. Ата-әсәләр клубы булдырылған. Унда килеп тыуған төрлө проблемалар күтәрелә. Нимәһе ҡыҙыҡ, атайҙар ҙа бик теләп йөрөй клуб ултырыштарына.

**Гөлнара Фәниз ҡыҙы**: Беҙгә лә ата-әсәләр балаларын теләп йөрөтә. "Аҡбуҙат" - башҡорт балалар баҡсаһы икәнен белеп киләләр. Интернетта бит бөтә мәғлүмәт тә бар. Шулай ҙа, килешеү төҙөгәндә, уставҡа һәм белем биреү программаһына ярашлы, тәрбиә эше беҙҙә икенсе дәүләт телендә алып барыла, һеҙ быға ризамы, тип һорайбыҙ. Ҡайһы бер ғаиләнән маҡсатлы рәүештә икенсе, өсөнсө балаларын да алып киләләр. Башҡортса белһендәр, тиҙәр. Тел белеүҙең, ысынлап та, зыяны юҡ, киреһенсә, күберәк белгән һайын, зиһен киңәйә генә бит.

Балаға өс ай тулғас, ата-әсәләр Дәүләт хеҙмәттәре аша ғариза бирә. Нисә бала килерен беҙ алдан белеп торабыҙ. Әлбиттә, мөмкинлектәребеҙҙән артығын ала алмайбыҙ. Иң элек беркетелгән кварталда йәшәгәндәргә өҫтөнлөк бирәбеҙ, әгәр ғаиләнән бер бала йөрөй икән, икенсеһен дә алабыҙ.



**Һеҙҙең балалар беренсе синыфҡа уҡырға ҡайһы мәктәптәргә бара?**

**Фәйрүзә Рәйес ҡыҙы:** М. Иҫҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. Бер-беребеҙгә яҡын ғына, юл аша тиерлек, урынлашҡанбыҙ. Сығарылыш төркөмдәрҙән балаларҙың 80-90 проценты лицейға айырым класс булып барып ултыра. Был бик уңай: балалар ҙа, ата-әсәләр ҙә бер-береһен беләләр.

**Гөлнара Фәниз ҡыҙы:** Беҙҙекеләрҙең дә 80 процентҡа яҡыны Рауил Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһына бара. Ул да беҙгә яҡын ғына урынлашҡан. Башҡалары "Сағыу" биҫтәһендә күптән түгел асылған 2-се "Смарт" Республика полилингваль күп профилле гимназияны, башҡа мәктәптәрҙе һайлай.

**Коллективтың ниндәй өлгәштәре һәм уңыштары менән ғорурлана алаһығыҙ?**

**Фәйрүзә Рәйес ҡыҙы:** Беҙҙең тәрбиәселәребеҙ бик әүҙем. Республика һәм ҡала конкурстары финалистарыбыҙ, лауреаттарыбыҙ бар. Рәшиҙә Рәхим ҡыҙы Ғибәҙуллина һәм Илзидә Рафаил ҡыҙы Хөснөтдинова, ҡала кимәлендә еңеп сығып, республикаға үттеләр. Гөлсирә Ураз ҡыҙы Янышева ла республика конкурсы лауреаты булды. Быйыл Әлиә Мозафар ҡыҙы Мөхәмәтйәнова Башҡортостандың биш иң яҡшы тәрбиәсеһе исемлегенә инде. Методик ҡулланмалар һәм эш дәфтәрҙәре булдырған тәрбиәселәр араһында "Педагог-тикшереүсе", "Педагог-мастер" тип аталған республика конкурсы үтә. Унда ла еңеүҙәребеҙ бар.

Балаларыбыҙ "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсында йыл да призлы урындар ала. Ата-әсәләр ҡатнашлығында Хәсәновтар ғаиләһе, әкиәт сәхнәләштереп, Гран-при яуланы. Ильяна Билалова "Өфөнөң йәш әкиәтселәре" номинацияһында 1-се урын алды. Өс телдә үткәрелгән полилингваль конкурста уңышлы ҡатнашабыҙ. Логопед төркөмдәрендә тәрбиәләнеүселәр ҡалала үткән "Речитайка" конкурсында даими сығыш яһай. Быйыл беренсе, икенсе һәм өсөнсө урын алып ҡайттылар. Нәфис һүҙ оҫталығы буйынса "Илһам" ҡала конкурсында алдынғылыҡты бирмәйбеҙ. Чир спорт төрө (үҙендә хореография, гимнастика, акробатика элементтарын берләштергән команда спорты. **Ред.**) буйынса ла республика кимәлендә призлы урындарҙан ҡалғаныбыҙ юҡ.

**Гөлнара Фәниз ҡыҙы:** Беҙ башҡорт телендә үткән барлыҡ ҡала конкурстарында ла ҡатнашабыҙ. Тәрбиәселәр араһында еңеүселәребеҙ бар. Әлбиттә, улар өсөн был өҫтәмә йөкләмә, шуға бөтә коллектив менән әҙерләнергә ярҙам итәбеҙ. 2023 йылда Мәзүнә Гәрәй ҡыҙы Ҡолһарина ҡала һәм республика кимәлдәрендә лауреат булды. Шулай уҡ быйыл Башҡортостандың биш иң яҡшы тәрбиәсеһе исемлегендә "Аҡбуҙат" вәкиле лә бар. Ул - Венера Фәрит ҡыҙы Хәсәнова.

Балаларыбыҙ ҙа йыл да барлыҡ бәйгеләрҙә ҡатнаша. Быйыл фальклор коллективыбыҙ "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсында ҡала кимәлендә - Гран-при, ә төбәк-ара бәйгелә 1-се урын яуланы. Өс-дүрт йәшлек балаларыбыҙҙың матур итеп башҡортса әкиәт сәхнәләштерә алыуҙары менән нык ғорурланабыҙ. Ошо уҡ конкурстың "Яһалма интеллект күҙлегенән әкиәт донъяһы" тип аталған яңы номинацияһында иң яҡшы буктрейлер (ниндәй ҙә булһа китап тураһында ирекле художестволы формала һөйләгән ҡыҫҡа видео. **Ред.**) өсөн Гран-при алдыҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Телебеҙҙең киләсәге бармы?" Көндәлдә ауыр таш булып ятҡан йән әсеткес ошо һорауға йөрәк йылыһын биреп киләсәк быуынды милли рухта тәрбиәләгән педагогтарҙан ыңғай яуап алып ҡыуандыҡ әңгәмә барышында. Тик шуныһы: башҡорт теле үлмәһен, йәшәһен өсөн, проблеманы тәрәндән аңлап, үҙенең, ғаиләһенең яуаплылығын тойоп, барса халыҡ бергә туплаһырға тейеш. Был юҫыҡта башҡа бер ниндәй сара юҡ, йәмәғәт! Барыһы ла үҙ ҡулыбыҙҙа.**

**Рәсүл БАЙГИЛДИН**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ ***Әҙәми заттың һәм тотош йәмғиәттең ҡатмарлы һәм күп сағылышлы тормошон башкөллә ҡануниәт менән бер ҡалыпҡа һалып, сикләйһен - сикләп, тейешлеһен миҡдарлап үлсәп рөхсәт итеп буламы икән...***






Иртәгә тағы судҡа.

- Юҡ, тағы ла ун көнгә кисектерә алмайым. Аръяғына эште ҡарау мөҙҙәте үтә. Өсөнө, сәғәт туғыҙға ҡуям ултырышты. Һеҙҙән ике һорауға яуап көтәм: үҙегеҙ әйткәнсе, ысынлап та техник өҙлөклөк арҡаһында эштә тотҡарлыҡ килеп тыуғанмы һәм был өҙлөклөктә һеҙҙең ғәйеп бармы? Шулар ғына. Быны өсөн ошо өлкәләге дипломлы белгестең баһалаунамәһе лә тамам булыр. Судья Ноғоманов һанлы мәғлүмәт технологиялары өлкәһендә белгес түгел. Аныҡ ҡына ҡарарға килеү өсөн миңә белгес һүҙенә, ул биргән документҡа таянырға кәрәк. Төшөндөгөҙмө? Аныҡ әйттемме?

- Эйе, аңланым. Бөтәһе лә аңлайышлы, Ваша честь - тине Әсҡәт Әмир улы үтә лә күндәм, баҫалҡы тауыш менән хөкөмдарға.

Йәш кенә, үҙе ҡайһылай уҫал, тип уйлаһа судҡа тарттырылыусы, үҙ улының йәшендәге судьяға хәтере ҡалып. Әйтерһең, алдында хеҙмәт урынында яңылышлыҡҡа юл ҡуйған бәләкәй бер хеҙмәткәр, ябай кеше түгел, ә йөн ҡыйыусы башкиҫәр тора.

Хөкөмдар алдында быға тиклем былайтып закон боҙоусы сүрәтендә баҫып торғаны юҡ уның. Алтмыш йәше етеп килһә лә, судҡа тарттырырлыҡ ғәмәлдәр ҡылмаған ни. Әле эш урынында килеп тыуған бәләкәй генә яңылышлыҡ өсөн мир судьяһы уның өҫтөнән хөкөм ғәмәлен атҡара. Ни бары шул ғына - мир судьяһы ғына уға ҡарата хөкөм ҡыла. Килеп сыҡҡан был яҙыҡлыҡ административ яуаплылыҡ сиктәрендә генә ҡаралһа ла, язаһының иң ҡатыһы биш мең һум штраф һалыуҙан артмаһа ла - күңелендә шом, эсе боша Әсҡәт Әмир улының. Хөкөм итәләр бит уны! Ана, ҡара мантияһын кейгән судья уҫал ҡиәфәттә ултыра, ярайһы ғына күренгән "дело"һын аҡтара.

- Прокурор билдәләүенсә, хеҙмәтегеҙгә һалҡын ҡараш, яуапһыҙлыҡ арҡаһында эшегеҙҙә яҙыҡлыҡ ебәрелгән, - тине ул тағы. - Язаға тарттырыуҙы һорай. Ә миңә хәҡиҡәт мөһим... "Хеҙмәт отличнигы" баһаламаһы, Хөкүмәт шәһрәтнамәһе таныҡлыҡтарының күсермәһе теркәлгән икән "дело"ға, тикшереү мәлендә ауырыған да икәнһегеҙ - документ менән раҫлайһығыҙ быны... Ғәйебегеҙҙе танымайһығыҙ, эйе... Тағы бер тапҡыр ҡабатлайым: эштең асылын аҙағына тиклем билдәләү өсөн техник өҙлөклөк тураһында аңлатма көтәм. Суд кисектерелә. Прокурор ризамы?..

- Риза...

- Ҡарар ҡабул ителде. Һау булығыҙ, - шулайыраҡ тамамланды биш минутҡа һуҙылған суд ултырышы.

Бер аҙна ваҡытҡа хөкөм кисектерелде. Ете көн, ете төн. Ике ялды алып ташлағанда - биш эш көнө.

Эш урынында ҡалыпҡа һалынған тәртип, сиратлап килгән көндәлек мәшәҡәттәр үҙ ағышы менән бара. Берәүҙең бер кемдә эше юҡ. Әсҡәт Әмир улының судҡа тарттырылыуын мәрәкә итеп ҡабул итәләр хатта.

- Йә, злостный енәйәтсе, статья сәпәнеләрме?

- Судимость менән башҡаса бында тотмаҫтар ул һине... Эш ҡарай башланыңмы? Хи-хи-хи... - Кәңәшмә залына йыйылған коллегалары шулай шаяртты.

- Иртәгә сәғәт икелә объектты ҡабул итеү комиссияһы эш башлай. Әсҡәт Әмирович, янғын һүндереү системаһын тағы бер ҡат тикшереп сығыу кәрәк булыр, - тине директор, суд мәшәҡәттәренән минрәүләнгән хеҙмәткәре яғына уҫал ҡараш ташлап.

"Нишләп уҫал ҡарайҙыр инде, аңлай алмайым. Өс көндән минең суд. Шуны ла аңламайҙар, эш өҫтөнә эш өйәләр", - тигән уй үтте Әсҡәт Әмир улының башынан, эсен бошороп.

Онотҡан һымаҡ ине буласаҡ ул ваҡиға тураһында, өс көн ҡалғайны, башынан сыҡмай ҙа ҡуя. Ул көн етер, һис шикһеҙ, етер! Ә артабан ни булыр?

"Юҡ, ун көнгә кисектерә алмайым тағы!" - тине судья. Дәлилдәр менән ғәйепһеҙ булыуын иҫбатларға ҡушты. Үҙенә... Һуң, ғәйепле, йә ғәйепһеҙ булыуҙы билдәләү нәҡ судьяның эше, бурысы түгелме ни? Әгәр, ни сәбәптәндер белгестән баһалаунамә эшләтә алмаһасы. Беҙҙә бит кеше судтан ҡурҡа, тиккә-бушҡа үҙе унда барып юлығыуҙан һипһенә.

Хәйер, булмаһын да ти баһалаунамә, сәпәһендәр әйҙә биш меңдәрен, нимә, донъяң емереләме әллә унан ғына? Түләрҙә - онотор, бөлмәҫ әле кесәһенән биш мең һум сыҡһа, хөкүмәт ҡаҙнаһына инеп ятһа. Аҙ һурмайҙар ҙа баһа былай ҙа.

Сеү, юҡ-бар өсөн суд һынлы суд алдына сығарып хөкөм ҡылмаҡсылар ҙа баһа. Бинахаҡҡа, ҡылмаған эш өсөн, компьютерҙың тейешле бер билдәне, һанды күрһәтеп еткермәгәне өсөн. Йәнәһе лә, закон буйынса талап ителгән мәғлүмәт ойошманың рәсми сайтында юҡ. Асылда, ул бар, тик техник сәбәптәр арҡаһында асылмай ғына. Шуны прокуратура белеп ҡалған һәм судҡа тарттыра хәҙер. Бот сабып көлөрлөк хәл. Был нимә, ҡурсаҡ уйнаған балалар ише, законсылыҡ уйыны уйнайһыҙмы әллә? Депутаттар закон яҙған, ҡағылышы булғандарға уны тормошҡа ашырыу йөкмәтелгән, прокурорҙарға теүәл үтәлешен тикшереү бурысы ҡуйылған, суд ошо законды боҙоусыларҙы хөкөмгә тарттырырға ҡулдарын ыуалап түҙемһеҙлек менән көтөп ултыра - харап шәп һәм мәҙәк уйын персонаждары түгелме улар? Ролдәр бүлешеп алынған, кемдең кем икәне билдәләнгән. Шулай булғас һуң, уйынды башламай әмәл юҡ. Бер-беренә текләшеп тик ултырып булмай ҙабаһа таш балдай. Ултырырҙар ҙа ине, бәлки, әгәр өҫтән тағы ла уҫалыраҡ күҙҙәр бағып тормаһа.

Әҙәми заттың һәм тотош йәмғиәттең ҡатмарлы һәм күп сағылышлы тормошон башкөллә ҡануниәт менән бер ҡалыпҡа һалып, сикләйһен - сикләп, тейешлеһен миҡдарлап үлсәп рөхсәт итеп буламы икән. Мәҫәлән, һәр сабый тәүге тормош һабаҡтарын мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһында алырға тейеш. Дөрөҫ, бик дөрөҫ талап! Ысынбарлыкта иһә, балалар баҡсаһы етешмәй, ата-әсәләр сират көтөргә мәжбүр. Был - Рәсәй граждандарының хоҡуҡтарын боҙоу! Ошо хәлдә прокурор нисек тыныс йоҡлаһын - ул урындағы власҡа һәр баланы балалар баҡсаһына урынлаштырырға ҡуша. Урындағы хакимиәт был талапты үтәй алмай. Ҡуш ҡуллап тотоноп ине эшкә, тик балалар баҡсаһын бер төндә төҙөп ултыртып булмай. Йөҙәрләгән миллион һум аҡса, бер йыл самаһы ваҡыт кәрәк. Аҡса юҡ, сөнки район бюджеты таҡай-тоҡай ғына. Урындағы власть талапты үтәй алмағас, прокурор уның етәксеһен судҡа тарттыра. Закон бар, ул һанға һуғылмай, тимәк, кемдер ғәйепле. Суд урындағы хужаға мул ғына штраф сәпәй. Уйын тамамланды. Урындағы хакимиәт башлығы һәм ата-әсәләрҙән башҡа, бөтәһе лә ҡәнәғәт. Һуң, шулай булмай ни - матур, күңелле уйнап алдылар. Бер кем дә уйын ҡағиҙәһен боҙманы. Прокурорҙың тыпырсыныуынан балалар баҡсаһы төҙөлмәүен, балалар нисек өйҙә ултырһа, шулай ултыра биреүен, әсәләрҙең эшкә сыға алмауын иҫәпкә алмағанда, әлбиттә. Ҡуй, юҡты һөйләмә, баш ҡатырма, кем әйтте һиңә, прокурор башлыҡты хөкөмгә тарттырһа, балалар баҡсаһы ҡалҡып сығасаҡ тип? Күрһәт ул йүнһеҙҙе! Был бит уйын, күңелле уйын ғына, йүләр.

Уның ҡарауы, прокурор менән судья мул ғына премия алдылар закон һағында күрһәткән һиҙгерлектәре өсөн. Ябай урам һепереүсене түгел, ә төп хужаны яуапҡа тарттырҙылар ҙа баһа! Ниндәй саялыҡ, ниндәй ҡыйыу аҙым! Премия, һис шикһеҙ, ҙур премия бындай батырҙарға!

Был фәлсәфәнән Әсҡәт Әмир улына ни фәтүә - өс көндән һуң туп ише уны уйнатып алаҫаҡтар бит. Ай, туп булғыһы килмәй уның, күңеле болоҡһоп тик тора шуға. Туҡта-туҡта, кем уны, туп, ти һуң. Уйындың бер персонажы, унда тиңдәр араһында тиң ҡатнашыусы ла баһа ул. Прокурор менән судьяға ҡарата хоҡуҡтары тиң. Прокурор һөжүм итеүсе, ул ҡурғаусы - футболдағы ише үҙ ҡапҡаһын һаҡлаусы, ә судья - арбитр. Әйҙә, уйна, нимә танау тартып тораһың. Прокурорҙың һөжүмен ҡаҡ та, үҙең алға ташлан!

Шулайлығын шулай ҙа ул, тик уйынға ул үҙ ихтыяры менән ҡатнашып китмәне бит, мәжбүрләнеләр. Прокурор менән судья - улар профессиональ уйынсылыр, ә Әсҡәт Әмир улы - уйын майҙанына осраҡлы ғына барып сыҡҡан кеше. Әллә шуға эсе бошамы икән? Ысын енәйәтсе исемен йөрөтһә, бәлки, уй-кисерештәре башҡараҡ юҫыҡта йөҙөр ине. Вәт унда ысын уйын, оло тамаша ҡуйырҙар ине. Тәс тә кинолағы шикелле. Ә былай, уйнарға дәрте лә, рәте лә юҡ. Күңеле тартмай.

- Ҡуйсы, иптәш прокурор, юҡ менән булышмағыҙ, үҙегеҙ күреп тораһығыҙ ҙабаһа, ғәйебем юҡ. Ябығыҙ ҙа ҡуйығыҙ үҙегеҙ "дело"ны, нимәгә ул суд, - тип ҡараны башта уҡ закон һаҡсыһына.

- Күреп торам, эш шулайыраҡ. Тик яба алмайым "дело"ны. Өҫтән контролгә алынған ул. Мотлаҡ яза биреү менән тамамланырға тейеш эш. Ғәйепләме һин, юҡмы - айырма юҡ. Беҙҙә шулай... Задание был! - тип серҙе асты ул яуап итеп, "задание" һүҙенә ниндәйҙер серле мәғәнә һалып, пауза тотоп.

Атаҡ, прокурор ҙа үҙ ихтыярында түгелме әллә? Улай булғас, судья ғына ысын уйынсы булып сыға ла баһа. Ғәжәп асыш!

Туҡта, бында ла барыһы ла ал да гөл түгел, буғай.

- Прокурор, һеҙ һыуға һәнәк менән яҙғанһығыҙ түгелме? - тип, ҡәнәғәтһеҙлеген белдереп, сәйер өндәшкәйне бит судья закон һаҡсыһына тәү башта уҡ.

Тимәк, ул да үҙ теләге менән ҡатнашып ултырмай уйынға...

Уф, башы ҡатты Әсҡәт Әмир улының. Бер кем дә уйнарға теләмәй, ләкин асыҡтан-асыҡ баш тартыусы юҡ - тупты, миң "дело"ны, улай-былай ығыш ҡына тәгәрәтәләр, ысынтылап тибеүсе юҡ. Был ни ғиллә?

Ә дүртенсе уйынсы һуң - закон сығарыусы һуң? Уның ҡатнашлығы ни миҡтарҙа? Билдәһеҙ был. Ул күренмәй, ул алыҫта. Бында ултырып, уның уй-ниәттәрен белеп булмай.

Көнө килеп етте - бөгөн суд.

Шөрләй әҙерәк ғәйепләнеүсе, тулҡынлана. Хөкөмдар ҡаршыһына тыныс күңел менән барып баҫыу, ғөмүмән, була торған хәл түгелдер. Ул бит Хөкөмдар! Ғәйебем юҡ, ти ҙә ул, ә кем белә, бәлки, яңылышалыр. Фәҡәт Хөкөмдар ғына белә, ул ғына әйтә ала пактай таҙаһыңмы, әллә ҡара эсле йәлләтһеңме икәнеңде.

Прокурор ҙа кәйефһеҙ. Әсҡәт Әмир улының ҡулындағы ҡағыҙҙарға әленән-әле күҙ ташлап ала. "Булдырған был, үҙенең ғәйепһеҙлеге тураһында баһаламанамә әпкигән. Премиянан ҡолаҡ ҡаҡтым былай булғас. Шелтә сәпәмәһәләр әле", - тип бошона, күрәһең.

Ысынлап та, судья һүҙҙе ҡыҫҡа тотто. Әсҡәт Әмир улы биргән ҡағыҙҙарҙы "дело"ға теркәне лә:

- Өҫтәмә дәлилдәр менән таныштырам: дипломлы белгестең баһаламанамәһе күрһәтеүенсә, Моратов Ә.Ә. ғәйепһеҙ. "Дело" ябылды. Прокурор ҡарарҙы кире ҡаҡмаймы? Дәғүә юҡмы?.. Бөтәһе лә риза... Ултырышты ябыҡ тип иғлан итәм, - Хөкөмдар ҡәнәғәт буғай.

Нишләп ҡәнәғәт ул? Тәүге ултырышта тауышы ҡаты, ҡәтғи булһа ла, Әсҡәт Әмир улы үҙен йәлләй һымаҡ тойомлағайны. Яза бирмәй эште ябыуына ҡәнәғәт әллә? Булыр, булмаҫ, тимә. Хөкөмдар ҙа кеше бит. Тойғолары, башҡаларға мөнәсәбәте бар.

Ауыр йөк ташлаған кешеләй, Әсҡәт Әмир улы еңел атланы ҡайтыу ыңғайына. Бәләкәй генә еңеүе ине был.

Һәм ҡапыл кәйефе үҙгәрҙе. "Ҡайһылай бахырланып йәшәйбеҙ, йәмәғәт: бер-беребеҙ өҫтөнән хөкөм ҡылабыҙ, бер-беребеҙҙе уйынлы-ысынлы баҫмаҡлайбыҙ, шуның менән кеше яҙмышында уйнайбыҙ. Бәндә бәндә өҫтөнән хөкөмдар була аламы ни? Гонаһ түгелме был? Закон сығарыусы, иптәш депутат, ау, ишетәһеңме, был һорауға яуап юҡмы икән һиндә? Беҙ, ябай уйынсылар, буталып бөттөк бит, әтеү", - тип ҡысҡырғыһы килде бөтәһе лә ишетерлек итеп суд тырнағынан ҡотолған Аллаһ ҡоло. Тик өндәшмәне, уфтанып ҡына ҡуйҙы.

ИЖАДХАНА

# БӘХЕТЛЕ БАЛА САҠ...

## бәхетле тормоштоң нигеҙе ул



**Янып торған күҙҙәр, һығылмалы зифа буй, ҡайнар темперамент - театр артисы өсөн кәрәк булған сифаттарҙың барыһына ла эйә булған Зилиә Азамат ҡыҙы СИТДЫҠОВА - әлеге көндә М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының сағыу актрисаларының береһе. Ул И. Йомағолов исемендәге Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрының танылған артистары Зөлфиә һәм Азамат Хәлиловтар ғаиләһендә тыуып үҫкән. Зилиә менән әңгәмә барышында уның ижады, шәхси ҡараштары һәм күңел донъяһы тураһында һөйләштек.**

**➔ Зилиә, һуңғы йылдарҙа һин, мәҫәлән, "Фарман ханым" комедияһында - Сатти, "Бөйрәкәй" драмаһында - Рауза, "Еҙнәкәй" музыкаль комедияһында - Шәмсиә кеүек береһенән-береһе матур һәм үҙенсәлекле образдар ижад итеп, тамашасыларҙың сикһеҙ һөйөүен яуланың. Үҙеңде бөтөнләй башҡа яҡтан астың. Һүҙҙе ролдәрҙән башлайыҡ. Яңы ролгә нисек әҙерләнәһең?**

- Яңы роль, ысынын әйткәндә, ул яңынан үлеп терелеү. Һәр яңы әҫәрҙе уҡыу (беҙҙеңсә "читкаға") минең өсөн тулҡынландырғыс мәл. Ни эшләп улай икәнен бер ҙә аңламайым. Артабан образ өҫтөндә туҡтауһыҙ эшләү, мәғлүмәт туплау башлана. Бер-нисә көндән был фекер мейегә һеңә, уйҙарҙы тулыһынса биләп ала. Яңы роль спектакль геройҙары араһындағы мөнәсәбәт, синтез һөҙөмтәһендә тыуа. Тормоштан алынған образдар ҙа бар. Багажымда төрлө кешеләрҙең һыҙаттарынан бөртөкләп йыйылған һәм айырым сифаттарын берләштергән персонаждар ҙа етерлек. Интуитив рәүештә тыуған геройҙарым да булды. Образ өҫтөндә эш актер менән режиссёр берлегендә алып барыла. Эш гел генә тиҙ һәм шыма бармай. Башыма бөртөк тә уй килмәгән көндәрем була, көн генә түгел, унын айҙар буйы булмауы ла ихтимал... Ә эшләргә кәрәк. Еңел бирелгән образдарҙы беренсе көндә үк "елкәһенән" тотоп алып эшкә егәһең. Ролде ултырып ҡына ижад итеп булмай. Күңелеңде биреп уйнай башлағанда ғына сәхнәлә ролең ниндәйҙер кәрәкле формаға килә башлай. Һәм башыңа ниндәй генә уй килһә лә, уйнап ҡарарға кәрәк. Секунд эсендә генә лә тыуған геройҙар була. Образ өҫтөндә эш премьера үткәс тә дауам итә, уйнаған һайын ниндәйҙер тос фекерҙәр, хәрәкәттәр менән байытыла.

**➔ Тормош иптәшең менән бер сәхнәлә уйнауы оҡшаймы? Шәхси тормошҡа тәьҫир итәме?**

- Студент ваҡыттан гел бер ижади майҙанда йөрөгәс, сәхнәлә лә бер-беребеҙҙе яҡшы беләбеҙ. Партнер булараҡ әкиәттәрҙә йыш уйнайбыҙ, бер-беребеҙҙе бер ҡараштан аңлайбыҙ. Элек репетициялар мәлендә йыш ҡына уның уйнауына рөхсәтһеҙ ҡыҫыла инем. Ошо насар холҡом арҡаһында һүҙгә лә килешә инек. Хәҙер был хатамды таныйым. Ирем дә, мин дә үҙебеҙ өҫтөндә байтаҡ эшләп, ижади яҡтан үҫтек, тип уйлайым. Бер-беребеҙҙең эшенә ҡыҫылып, өйрәтеп ултырмайбыҙ. Айнурҙың ҙур диапазонлы, көслө актер икәнен беләм. Ул илһамланып эшләй, уға материалдың оҡшауы зарур. Ә мин, кирећенсә, спектакль йәки проект күңелемә ятмаған хәлдә лә ролемә нисектер инеп китеп, башҡа ракурстан ҡарап уйнай алам. Икебеҙ шулай ике төрлө кешебеҙ.

**➔ Һинең иң төп конкурентың кем?**

- Әлбиттә, мин үҙем. Мине яҡшы белгәндәр быны аңлар. Ҡайһы саҡта бер сиктән икенсегә һуғылыусанмын. Бер ҡараһаң, ут сәсеп торған, бөтәһен дә юл ыңғайында хәл итеп барған көслө ҡатынмын, мәле менән "мәмерйәлә" шым ғына ятып, ярты тәүлек йоҡлап, бар донъянан һәм кешелектән ваз кискән әҙәммен. Ошо ике сифатым араһында өҙгөләнәм. Яҡын кешеләремдән, әхирәттәремдән өлгө алырға тырышам.

**➔ Репетицияларҙа режиссёр менән мөнәсәбәт нисек ҡорола?**

-Үҙемде ыңғай, уңайлы, ишетә белгән, тыңлаусан актриса тип һанайым. Эшемдәге төп ҡағиҙәм - режиссёр менән эш башлағанда уға тулыһынса ышаныу. Һәр проекттың, спектаклдең тик бер генә капитаны була - ул режиссёр.

**➔ Театр һинең өсөн нимә ул?**

- Тәүәккәллек. Азатлыҡ. Күңел утрауы. Мин фәҡәт театрҙа ғына образдарым ярҙамында төрлөсә ҡылана алам, ысын тормоштағы Зилиә улай түгел. Сәхнә мөғжизәһен бер тапҡыр ғына булһа ла татып ҡараһағыҙ, тормошоғоҙ, ҡарашығыҙ ҡырҡа үҙгәрәсәк.

**➔ Театр донъяһына яңы килеп ингән йәш артистарға ниндәй кәңәш бирер инең?**

- Ваҡыт бик тиҙ үтә икән ул! Театрға эшкә килгән осорҙа беҙгә "йәштәр" тип өндәшәләр ине. Тиҫтәнән ашыу ваҡыт үткән. Әлеге мәлдә театрҙа эш башлаған йәштәргә ижадҡа сумып, йәшнәп йәшәүҙәрен теләйем. Итәк тултырып балалар тапһындар, сәйәхәт итеп ҡалһындар - беҙҙең кеүек, ваҡытты дөрөҫ бүлеп йәшәһендәр. Тәүәккәлләргә, эштән ҡурҡмаҫҡа кәрәк, сөнки был бер ҡабатланмаҫ мәл генә. Ә иң мөһиме - ижадты яратһындар.

**➔ Уңышһыҙлыҡтарҙы нисек кисерәһең?**

- Кәзә йылында тыуған Кәзәмөгөҙ мин. Әйткәндәй, бәләкәйҙән һәм бөгөн дә еңелеүҙе ауыр кисерәм. Иркәләнеү түгел, ә характерымдың бер һыҙаты был. Шундай кешемен. "Бөтәһе лә яҡшыға" тигән девиз минең турала түгел, аҡылым менән аңлаһам да, йөрәгемдең ишеткеһе килмәй. Әсәйем - шәхси психологым. Ул мине бала саҡтан уҡ беренсе һәм маҡтаулы, бар эштә алдынғы булыуҙың мотлаҡ түгеллегенә өйрәтте. Әммә еңеүсе рухы барыбер һәр ваҡыт минең менән! Быны насар тип иҫәпләмәйем. Үҙ-үҙең алдында намыҫлы булыу мөһим, ә заманалары төрлөсә булыуы ихтимал. Был инде башҡаса фекер. Элек ныҡ көйөп, хатта илап, бар ғаләмде әрләп, ғәйепләп йоҡлап китә торғайным. Иртәгәһенә барыһын да онотоп уяна инем. Йоҡлау - насар уйҙарҙан, нервылы хәлдәрҙән арынырға ярҙам итә. Минең дауам шул.

**➔ Һиңә кешеләрҙең иғтибары оҡшаймы?**

- Дөрөҫөн генә әйткәндә, тамашасы иғтибарынан ныҡ уңайһыҙланам һәм оялам, шуға күрә был йүнәлештә үҙ өҫтөмдә даими эшләйем. Тамашасыларҙың эргәмә килеп, спектакль өсөн рәхмәт әйтергә, һорау бирергә теләгәнен аңлайым. Элек мин кешеләр менән артыҡ һөйләшеп бармай инем, хәҙер иғтибарҙы тынысыраҡ ҡабул итәм. Бәләкәйҙән сәхнә артында йәшенеп, күҙгә артыҡ салынмай ултырырға тырышыуымдан киләлер инде был...

**➔ Һин тәүлектең ҡайһы ваҡытында әүҙем?**

- Тәүлектең беренсе яртыһында мин театрҙа репетицияларҙа йөрөп, үҙемдең сәхнә тормошомда йәшәһәм, кискеһен командир әсәй, ә төнөн ашнаҡсы-кондитер, тәрбиәсе һәм үҙен йә рәссам, йә тегенсе, йәки турнирҙарға кәрәк-яраҡ әҙерләүсе көйәрмән, ҡунаҡсыл хужабикә лә була белгән ижади кеше мин.

**➔ Элекке Зилиә менән хәҙерге Зилиә араһында айырма бармы?**

- Минең өсөн ҡыҙыҡ һәм мөһим һорау, сөнки һуңғы йылдарҙа был хаҡта күп уйлайым... Ниһайәт, үҙ күңелемә юл таптым. Бала саҡтағы ғәмһеҙ, алсаҡ булмышыма ҡайттым. Кеше үҫә бара үҙенән ҡаса, үҙ теләктәренән ҡурҡа башлай. Минең дә шундай саҡтарым булды, быларҙың барыһын да тәжрибә дәфтәремә яҙам. Был хаҡта оҙон-оҙаҡ фекер йөрөтөргә, һөйләргә була. Миңә хәҙер рәхәт, күкрәк тултырып һауа һулайым, тыныс тормошҡа ышанып йәшәйем.

**➔ Әлеге ваҡыттағы күңел торошоң?**

- Һуңғы йылдарҙа мин йәш сағым менән бөтөнләйгә хушлашҡанымды аңланым һәм быны йөрәгем менән тулыһынса ҡабул иттем. Был асыш рухи яҡтан еңел бирелмәне. Бөгөн мин аяғымда ныҡлы баҫып торам, үҙемдә көс, ҡеүәт тоям һәм хис-тойғоларымды контролдә тотам. Ғөмүмән, үҙемдең энергиямдан ҡәнәғәтлек кисерәм. Уның көндән-көн нығынғанын да һиҙәм.

**➔ Күпселек кешеләрҙең ниндәй фекере менән һин риза түгел?**

- Берәй нәмәгә тырышып инандыра башлағандарын күңелем ҡабул итмәй. Элек мин төрлө хәл-ваҡиғаларға ҡарата хәбәрҙәргә, фараздарға ныҡ иғтибар итә инем, хәҙер үҙем тикшермәйенсә, ышанып бармайым. Һәр нәмәгә ҡарата үҙ фекерем бар.

**➔ Яратҡан цитатаң ниндәй?**

- Эшләһәң, йәнеңде биреп эшлә. Минең өсөн был донъяла бер ниндәй ҙә сикләү юҡ. Ял иткән саҡта рәхәтләнеп һуҙылып төшөп ятам, ә эшләргә кәрәк булһа, йән-фарман йүгереп барып тотонам. Был сифатымдың яҡшымы-насармы икәнлеген белеп етмәһәм дә, мин шулай өйрәнгәнмен.

**➔ Яратҡан шағирҙарың, яҙыусыларың кемдәр?**

- Көмөш быуат шағирҙары әҫәрҙәрен ихлас уҡыйым. Тап ошо шәхестәр ижады рус әҙәбиәтен данлыҡлы әҫәрҙәр менән байытып, донъя әҙәбиәте кимәлендә таныта. Уларҙың мөхәббәт һәм нәфрәт, үлем һәм йәшәү, бәхет һәм хәсрәт хаҡында яҙған шиғырҙары күңелемә яҡын. Тормошҡа ҡарата үҙенсәлекле фекерҙәр менән танышыу мине тәрән уйҙарға күмә.

**➔ Социаль селтәрҙәрҙә ҡайһы артистар тормошон ҡарап бараһың?**

- Интернетта бер ҡалыпта ғына булған материалдарҙы күҙәтеп ултырмайым. Мәҫәлән, бөгөн рилстар ҡараһам, иртәгә опера, иртәгәнән һуң Бөйөк Ватан һуғышы тураһында документаль фильмдарҙы йотлоғоп ҡарайым. Берәй билдәле кеше йәки блогерҙың тормош-көнкүрешен күҙәтеп барам, тип әйтә алмайым. Ваҡытым булһа, төрлө ҡыҙыҡлы подкастар тыңлайым. Дөрөҫөн әйтәм: ундай нәмәләр менән мауығырға артыҡ ваҡытым ҡалмай.

**➔ Үҙеңдәге матур сифаттарыңды һанап үт әле...**

- Пунктуаллек, өйөмдө һәр саҡ тәртиптә тотоуым, яҡын дуҫ була белеүем, ысын күңелдән яратыуым. Йәшәй һәм ижад итә торғас, хаталарымды күрергә һәм үҙ өҫтөмдә эшләргә өйрәндем. Тиҙ ҡыҙам һәм шул уҡ ваҡытта тиҙ һыуынам, минеңсә, был ҙур минус. Тәбиғәтем шулай. Был юҫыҡта эшләргә кәрәк әле. Әйткәндәй, мин ҡаты консерватор, ҡәҙимгелекте яратам: тормоштағы киҫкен үҙгәрештәрҙе ауыр ҡабул итәм - был да минус.

**➔ Һаулығыңды нисек ҡайғыртаһың?**

- Йоҡлайым һәм мунса инәм. Мунса инәм һәм йоҡлайым.

**➔ Мода артынан ҡыуаһыңмы? Ниндәй стилгә өҫтөлөк бирәһең?**

- Бер ҡасан да мода артынан ҡыуманым: оҡшаһа - алам, килешһә - кейәм. Үҙенсәлекле кейем яратам. Күңелемә ятһа, 299 һумға ла, хатта 29 999 һумға ла алырға ризамын. Кәйефемә ҡарап кейенәм, тик ниңәлер барыбер джинсы салбар менән кепкаларҙы үҙ итәм. Шуларҙы һаман кейеп туймайым. Мин үҙенсәлекле аксессуарҙар, биҙәүестәр, алҡалар яратам. Айнур: "Үҫмер кеүек йөрөйһөң, ҡасан ғына матур күлдәктәр, туфлиҙар кейә башлайһың инде", - тип әрләй. Мин: "Әле әҙер түгелмен", - тип яуап ҡайтарам.

**➔ Һиңә ниндәй үҙенсәлекле комплимент әйткәндәре бар?**

- "Күҙҙәрең ҡайһылай сағыу, матур!" тигәндәре иҫемдә ныҡ ҡалған. Тәүҙә көлдөм, сөнки бер ҡасан да үҙемде ҙур күҙле, тип һанамай инем. Бер-нисә кеше миңә: "Һеҙҙең күҙҙәрегеҙ... Сәхнәнән һеҙҙең ҙур күҙҙәрегеҙҙе ҡарап һоҡланып ултырҙым... Һеҙҙең спектаклдәге ҡарашығыҙҙы онота алмаясаҡмын", тип яҙғандары бар. Аптырарлыҡ хәл, сөнки мин үҙемде белгәне бирле Азия ҡыҙҙары кеүек ҡыҫыҡ күҙле һанай инем.

**➔ Кумирың бармы?**

-Бала саҡтан яратҡан берҙән-бер кумирым - Наталья Орейро. Ул миңә шәхес, кеше булараҡ ҡыҙыҡ, уның тормошҡа ҡарашы, энергияһы минеке менән тап килә. Ғәжәп.

**➔ Һинең хобби?**

- Минең кеүек мунса яратҡан кеше юҡтыр ул донъяла. 2024 йылдан бирле футбол менән әүҙем шөғөлләнәм, командабыҙ менән төрлө ярыштарға ла йөрөйбөҙ. Әйткәндәй, улым Айбулат та шул "Танай" профессональ мини-футбол клубында шөғөлләнә.

**➔ Һинең ҡайҙа йәшәгең килә? Ни өсөн?**

- Өфөнө яратам, мин - патриот.

**➔ Үҙеңде бәхетле кеше тип һанайһыңмы?**

- Бәхетлемен! Балаларымдың олаталарын йыш иҫкә алып һорауы йөрәгемде әрнетә, илата. Яҙмыштан уҙмыш юҡ, тип дөрөҫ әйтәләр. Бала сағым мөхәббәткә, бәхеткә тулы булды, шуға ла мин төрлө хәл-ваҡиғаларҙы еңел йырып сыға алам. Бәхетле бала саҡ, минеңсә, "бәхет" тигән һүҙҙең мәғәнәһен аңларға ярҙам итеүсе нигеҙ.

**Алһыу БОҪҠОНОВА әңгәмәләште.**

ИНТЕРНЕТТАН



# БӘЛӘЛӘРҘЕ...
## тамуҡҡа әйләндермә

■ Ниндәйҙер күңелһеҙ хәлдә, бәләне еңел кисереүселәр һаны күпкә аҙыраҡ. Күпселек быңдай ваҡиғаларҙы оҙаҡ, ауыр һәм үҙенең төшөнкө торошо менән эргә-тирәһендәгеләрҙең тормошон тамуҡҡа әйләндереп кисерә. Психологтар раҫлауынса, яҡыныңдың үлеме, айырылышыу кеүек хәлдәрҙән сығыу өсөн кеше бер нисә психологик торошто үтә. Быныӊ өсөн 1-2 йыл үтергә тейеш. Психологтар һығымтаһы буйынса үҙенде ыңғай тойғолар менән уратырға тырышыу күңел яраларын ваҡытлыса ғына дауалай. Шуға ла кеше бер аҙ ҡайғырып, үҙенең юғалтыуына өйрәнергә тейеш. Әммә был хәлдә оҙаҡ ҡалыу ҙа зыянлы, тап ошо ваҡытта улар тормоштоң ыңғай яҡтарын да ҡабул итеп өйрәнергә бурыслы. Тап шунда ғына пациенттарҙың эмоциональ хәле тиҙерәк яҡшырасаҡ, ти психологтар

■ Ҡытайҙа һөттөң антиканцероген сифаттарын асыҡлаған тикшеренеү үткәрелгән. Илань университеты белгестәре һөт аҡһымында булған ферменттарҙы тикшереп, бер пептид ферменттың ашҡаҙан яман шеше күҙәнәктәре үҫеше хәүефен булдырмауын асыҡлаған. Ферменттың эффекты уның концентрацияһына, яман шеш күҙәнәктәренә тәьҫиренең күләменә һәм оҙайлығына бәйле. Тикшеренеүҙең авторы Вэй Чжен Чен әйтеүенсә, был асыш ашҡаҙан яман шешенә ҡаршы препараттар уйлап табыуға булышлыҡ итәсәк. Элегерәк оло кешеләр өсөн һөт зарарлы тигән ҡараш йәшәй ине, әммә белгестәр белдереүенсә, һөттө самаһын белеп ҡулланыу организмды онкологик сирҙәрҙән һаҡлай.

■ Банкта ярайһы ҙур ғына суммала аҡса һаҡлау хроник ауырыуҙарҙан дауа булып тора. Ғалимдар раҫлауынса, аҙ тәьмин ителгән граждандар йәшәгән райондарҙа баш ауыртыуы, депрессия эпидемия характерын ала. Уларҙың фекеренсә, организмға кире хис-тойғолар насар экологик торошҡа ҡарағанда ла зыянлыраҡ. Ҡаҡшаған нервыларҙы нормаға килтереү һәм сәләмәтлекте нығытыу өсөн йәшәү кимәлен 10 процентҡа булһа ла күтәрергә йәки яҡшы кварталға күсеп китергә кәрәк.

■ Генетиктар һәм нейропсихологтар фекеренсә, элек абсолют ишетеү һәләте һәр кешелә тыуымыштан булған, әммә эволюцион процесс барышында практик ҡулланылыш тапмағанға күрә юғалып ҡалған. Бөгөн абсолют ишетеү һәләте кешеләр араһында бик һирәк осрай. Белгестәр әйтеүенсә, мең кешенең берәүһе генә быңдай сифатҡа эйә. Көнсығыш телдәре тональ телдәргә яҡын булыу сәбәпле, Азия кешеләрендә ишетеү һәләте юғарыраҡ, улар соната, симфонияларҙы еңелерәк ҡабул итә икән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, азиаттар араһында билдәле музыканттар һаны европалыларға ҡарағанда күберәк түгел, ти тикшеренеүселәр.

■ Ғалимдар куркума нигеҙендә яңы препарат уйлап тапҡан. Ул инсульттан һуң тиҙерәк һауығырға мөмкинлек бирә. Ғалимдар әйтеүенсә, был дарыуҙы ауырыуҙы иҫкәртеү маҡсатында ҡулланырға ла буласаҡ. Яңы дарыуҙың төп тәьҫир итеүсе матдәһе булып куркумаға сағыу төҫ биреүсе полифенол - куркумин тора. Ул ялҡынһыныуға ҡаршы тора һәм антиоксидант тәьҫиргә эйә. Яңы дарыуҙы инсульт кисергән кешенең организмына өс сәғәт эсендә индереп өлгөргәндә, баш мейеһе күҙәнәктәрен тере килеш һаҡлап алып ҡалырға мөмкин, ти ғалимдар.

ӘЙҘӘГЕҘ!

# ҮҘ РИЗЫҠТАРЫБЫҘҘЫ ҒЫНА АШАЙЫҠ!




**Башҡортостанда етештерелгән аҙыҡ-түлек тураһында һүҙ сыҡһа мин, беренсе сиратта, үҙебеҙҙең милли аш-һыуҙы күҙ алдына килтерәм. Бер быуаттан ашыу ҡымыҙ, буҙа, талҡан күпләп етештерелмәһә лә, сауҙаға сығарылмаһа ла, халҡыбыҙ милли асылына ҡайтырға мөмкинлек булыу менән уларҙы иҫенә төшөрҙө. Төшөрөп кенә ҡалманы, ә сәнәғәт масштабында етештерә башланы.**

Бына беҙ көндө иртәнге аштан башлайбыҙ. Мин кистән Мәләүездә етештерелгән талҡанды эҫе һыу ҡойоп әҙерләп ҡуям. Талҡандың составы төрлөсә: шыттырылған бер төр игендән тирмәндә тарттырылғандан алып биш сорт үҙ еребеҙҙә үҫкән игенгә тиклем бар. Мин, гәҙәттә, арыш, бойҙай, һоло, арпа ярмаларынан етештерелгәнен ашайым. Дөрөҫ, быларҙан тыш, ҡарабойҙайлыһы ла бар, ләкин ҡарабойҙай ононан бешерелгән икмәк һәр ваҡыт өҫтәлемдә. Был тәмле иген орлого нисек кенә файҙалы булмаһын, баланс һаҡлауҙы онотмау кәрәк. Ризыкты кистән әҙерләгәндә бер нисә бөртөк булһа ла йөҙөм ҡушам. Берҙән, тәмле булһа, икенсенән, файҙалы ла. Иртән ашар алдынан етен орлогон да һалып ебәрәм. Был өҫтәмәләрҙең үҙҙәрен генә айырым ашауға ҡарағанда, талҡанды ла тәмлерәк итә кеүек. Кемдер етен орлогона ҡарағанда уның онон тәмлерәк һәм файҙалыраҡ тип тәҡдим итер. Нәмә ул етен оно? Ул етен орлоғонан майын һыҡҡас ҡалған продукт, ә етен майының файҙаһын һәр медицина баҫмаһы даими яҙып тора.

Ҡымыҙға килгәндә, бында ла үҙ фекерем бар. Хәҙер ҡымыҙҙы кәзә һөтөнән яһап ҡына ҡалмайҙар, ә күпләп һатыуға ла сығаралар. Хатта бер мал һыйыр һөтөнән дә эшләй башлағайнылар. Уның исеме генә ҡымыҙ инде, төмен дә, бигерәк тә сифатын бейә һөтөнән яһалған күркәм эсемлеккә яҡын килтереп булмай. Ҡымыҙҙы уйлап тапҡан инәй-бабайҙарыбыҙ уның нисек файҙалы икәнен бер ниндәй медицина ҡорамалдары ҡулланмай ҙа белгән. Был тәмле эсемлеккә сеймал булып ҡылған тора, ә уныһы тик дала яҡтарында үҫә. Башҡортостанда быңдай ерҙәр етерлек, бәлки шуғалыр ҙа, республика Рәсәйҙә ҡымыҙҙың 70 процентын етештерә.

Йыш ҡулланған милли ризыҡтар исемлегенә мин буҙаны ла индерер инем. Уны мин беренсегә 1994 йылда Магнитогорск ҡалаһында уҙған тамьян ырыуы йыйыныңда тәмләп ҡараным. Өс тиҫтәнән ашыу йыл үтһә лә Әбйәлил районында йәшәгән ырыуҙаштарым әҙерләгән буҙаға еткәнде осратманым. Тик улар ғынаһың бороңғо рецебын һаҡлап ҡалғандыр, тип уйлайым. Сит тарафтарҙан килтерелгән йәшелсә-емештә лә ваҡыты-ваҡыты менән генә ашау кәрәктер, сөнки Яңы йылды мандаринһыҙ күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Шулай ҙа уларҙы ашамлыҡ культына әйләндереү кәрәкмәҫ ине. Бына бананды маҡтайҙар. Ул бит бынан бик алыҫ ерҙәрҙә үҫкән, шундағы халыҡ өсөн бик файҙалы булһа ла беҙҙең организм уға өйрәнмәгән. Шуға күрә уны көнө-төнө ашап ултырыуҙан ни файҙа!

Ҡасандыр бер булған хәлде уҡығайным. Төньяҡ тарафына геологик экспедиция шул яҡтағы халыҡтарҙың береһенең чумына төнгөләккә туктала. Геологтарҙың ризығы күптән бөткәнгә күрә, хужалар үҙҙәре ашап ултырған балыҡтан ҡунаҡтарҙы ла ауыҙ итергә саҡыра. Иртән ҡараһалар, бер генә геолог та тере түгел ти. Ул халыҡ нисәмә быуын был ризыҡ менән туҡлана, уларҙың организмы өйрәнеп бөткән, ә килгәндәр өсөн ул ят ҡына түгел, ә зыянлы ла. Был балыҡтың һимеҙ итен организмдары эшкәртә алмағандыр, күрһәнең.

Быуаттар һуҙымында атай-олатайҙар ашаған ризыҡ беҙгә иң файҙалыһы. Беҙ уға өйрәнеп бөткәнбеҙ, был хаҡта уйлап та ҡарамайбыҙ хатта. Алыпһатарҙар байыр өсөн телевизорҙан рекламаға аҡса йәлләмәй, шуға ышанып, маймылдар ғына ашаған ризыҡтарҙы сират тороп алабыҙ, үҙебеҙ генә түгел, балаларыбыҙҙы ла өйрәтәбеҙ. Тәбиғәтте алдап булмай, атай-олатайҙар уҡый-яҙа белмәһә лә беҙгә иҫ киткес бай мираҫ ҡалдырған. Аш-һыу әҙерләгәндә шуны онотмаһаҡ ине.

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ТӘБИҒӘТТӘ ШУЛАЙ

# ЙЫЛАН МЕНӘН ОСРАШҺАҢ...



**Башҡортостандың социаль селтәрҙәрендә йыландар менән осрашыу осраҡтары әүҙем тикшерелә. Халыҡ быны аномаль йылы яҙ һәм ямғырҙар менән бәйләй, популяцияның ҡырҡа артыуы һәм йыландың хәүефлелеге тураһында фараздар төҙөй.**

М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының биоэкология һәм биологик белем биреү кафедраһы доценты, биология фәндәре кандидаты Венер Хәбибуллин уның нимәгә бәйле булыуын һәм йылан менән осрашҡанда тәртип ҡағиҙәләре хаҡында һөйләне:

- Тәбәктә йыландар һанының ҡырҡа артыуы тураһында һөйләү әлегә иртә, - тип аңлатты ғалим. - Кешеләрҙең уларҙы йышыраҡ күрә башлауы ике фактор менән аңлатыла: был миҙгелле миграция. Яҙын йыландарҙың әүҙемлек осоро башлана. Улар ҡышлауҙан сыға, йәйге туҡланыу урындарына күсә һәм үрсей. Халыҡта был ваҡытты "йылан туйҙары" тип атайҙар. Ата йылан инә йылан өсөн көрәшә һәм агрессивлаша. Шуға күрә һәр йыланға теймәү яҡшыраҡ. Мөмкин тиклем алыҫыраҡ китегеҙ, - тип кәңәш бирҙе эксперт. - Икенсе яҡтан, иртә йылы һәм яҡшы һауа торошо күберәк кешене тәбиғәткә сығарҙы. Шуға ярашлы, кеше һәм йыландың бер һуҡмаҡта киҫешеү мөмкинлеге артты.

Теоретик яҡтан һауа торошо йыландарҙың һанына ла йоғонто яһай ала, - ти Венер Хәбибуллин. - Әгәр ҡыш йылы булһа һәм йылан ҡышлау ваҡытында туңмаһа, ә йылы һәм ямғырлы яҙ яҡшы аҙыҡ базаһын, йәғни сысҡан һәм тәлмәрйен булдырһа, популяция, ысынлап та, үҫергә мөмкин. Әммә хәҙер был кешеләрҙең субъектив тойғоһо.

Башҡортостанда бөтәһе алты төр йылан бар, уларҙың икәүһе генә ағыулы. Ҡара йылан йышыраҡ урманда, һыу яҡтылыҡтары янында, ҡоро ҡыуаҡтар араһында осрай. Уны тау-урман, төньяҡ һәм көнбайыш райондарҙа (Бөрйән, Белорет, Әбйәлил, Нуриман, Асҡын) осратырға мөмкин. Дала йыланы Ҡыҙыл китапҡа индерелгән бик һирәк төр. Ул республиканың иң көньяғында ғына йәшәй.

Ағыулы йыландың ағыулы булмаған йыландарҙан төп айырмаһы - ныҡлы кәүҙәһе, ҡыҫҡа ҡойроғо һәм муйын яры һы менән өс мөйөшлө башы. Күпселек йыландарҙың арҡаһында һыҙат бар. Шулай уҡ тулыһынса ҡара төҫтәгеләре лә осрай. Туҙбаш йыландың башында һары йәки ҡыҙғылт-һары "колаҡтары" бар, - тип һөйләне биолог.

**Эксперт кәңәштәре:**

- әгәр йылан ихатаға йәки дача участкаһына инһә, агрессия күрһәтмәгеҙ;
- территорияны сүп-сарҙан, бейек үләндән һәм йыланды йәлеп иткән кимереүселәрҙән таҙартып тороғоҙ.

Әгәр йылан саҡһа:

- зыян күреүсегә тулы тыныслыҡ һәм хәрәкәтһеҙлек тәьмин итегеҙ;
- тешләгән урынға һалҡын нәмә ҡуйығыҙ;
- мөмкин тиклем күберәк шыйыҡса эсегеҙ;
- шунда уҡ табипҡа мөрәжәғәт итегеҙ.

*✓ Йәмле ял көнөндә бында Ишембай районы Урманбишҡаҙаҡ ауылынан ағинәйҙәр килде. Мерәҫтәр уларҙы йыр-моң менән ҡаршы алды, баймаҡтарҙың тәмле аш-һыуынан ауыҙ иттереп, түргә саҡырҙы.*



АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# АРАЛАШЫУ, ҠУНАҠҠА ЙӨРӨШӨҮ...

## шулай уҡ халҡыбыҙҙың изге йолаһы

**Йәш быуынды тәрбиәләү, уларға халҡыбыҙҙың тарихын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын еткереү, туған телгә һөйөү уятыу, тәртипкә өйрәтеүҙә йәмәғәт ойошмаларының әһәмиәте ҙур. Был йәһәттән республикабыҙҙа оҙайлы йылдар эшләп килгән "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ни тиклем мөһим, хатта тарихи эштәр башҡарыуын күптәр, бәлки, аңлап та етмәйҙер. Бөгөн ағинәйҙәр үҙ теләге менән ауылының бар хәстәрен үҙ өҫтөнә алған. Улар тыуған ерҙәге тәртипте һаҡлай, йәш быуынды тәрбиәләй, һәр сараның йәме лә улар. Аҡыллы ауыл биләмәһе башлыҡтары күптән ағинәйҙәр менән бергә эшләй, күп йүнәлештә нәҡ уларға таяна.**


Ишембайҙар.


Баймаҡтар.

Мерәҫ ауылында булған сара ла был ойошманың көсөн, дәртен һәм әһәмиәтен күрһәтте. Йәмле ял көнөндә бында Ишембай районы Урманбишҡаҙаҡ ауылынан ағинәйҙәр килде. Мерәҫтәр уларҙы йыр-моң менән ҡаршы алды, баймаҡтарҙың тәмле аш-һыуынан ауыҙ иттереп, түргә саҡырҙы.

Ишембай тарафтарынан килгән ағинәйҙәр ҙә яуап сәләмләүе итеп, таҡмаҡтарын яңғыратты, тәмле бауырһаҡтары менән һыйланы. "Һеҙҙең саҡырыуҙы ихлас ҡабул итеп, сәскәле майҙың йәмле көнөндә, ашҡынып килеп еттек. Бай тарихлы Баймаҡ ерен бик яратабыҙ, һоҡланабыҙ, ҡайһы саҡта бер аҙ көнләшәбеҙ ҙә. Сөнки Баймаҡ - бай тарихлы ил. 54 район араһынан Баймаҡты рухы, шәхестәре, байлыҡтары, төҙөклөгө, матур тәбиғәте буйынса беренсе урынға ҡуйыр инек. Бында боронғолоҡ еҫе аңҡый. Данлыҡлы "Урал батыр" эпосының ошо ерҙәрҙә яҙылып алыныуы осраҡлы түгел бит. Шуға иғтибар иттек әле, "бай" һүҙе һеҙҙең райондың - беренсе, ә беҙҙең Ишембайҙың икенсе ижегендә тора. Беҙ ҙә бай төбәк: беҙҙең Торатауыбыҙ, ҡара алтын - нефтебыҙ, Ноғман Мусиныбыҙ, рухыбыҙ, алға ынтылышыбыҙ, милләтебеҙ өсөн эштәребеҙ бар. Ошолай ике район ағинәйҙәре араһында дуҫлыҡ күпере һалыу - оло мәртәбә. Беҙ бик шатбыҙ бөгөн", - тине ҡунаҡтар.

Һөйләшеү һыйҙан һығылып торған табын артында дауам итте. Бында ағинәйҙәр бер-береһе менән танышты, баймаҡтар ҡунаҡтарға күңелле йырҙар бүләк итте. Ишембай ағинәйҙәре уларҙың башҡарған эштәре менән танышып, һоҡланыуҙарын еткерҙе. "Ни тиклем дәртле, рухлы, аҡыллы милләттәштәребеҙ йәшәй был тарафтарҙа, тип һөйөндөк",- тинеләр улар.

Мерәҫ ауыл китапханасыһы Рафиға Ғазина китапхана, Баймаҡ районының данлыҡлы шәхестәре менән таныштырҙы. Бында ағинәйҙәр райондарҙа үткән саралар, йолаға һалынған кисәләр хаҡында тәжрибә уртаҡлашты. Бай һәм ҡотло Мерәҫ китапханаһы барыһының да күңеленә хуш килде. Был йәһәттән китапханасы булып уңышлы эшләгән, күп сараларҙы ойоштороп, эсендә ҡайнап йөрөгән Рафиға Ғазинаның хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ.

Китапхана янында урынлашҡан музей ҙа барыһын да хайран ҡалдырҙы. Төрлө экспонаттарға бай, бик күп тарихи мәғлүмәттәр һаҡлаған был урынды үрнәк итеп ҡуйырлыҡ. Ауылдың барлыҡҡа килеүе, унның шәхестәре, хеҙмәт династиялары, хәҙерге ҡаҙаныштар тураһында Зәлифә Ҡаһарманова ентекле итеп һөйләне.

Ағинәйҙәрҙең тарихыбыҙҙы ғына түгел, ә милли аш-һыуыбыҙҙы ла ҡәҙерләп һаҡлауы һәм йәштәргә өйрәтеүе билдәле. Мәғрифә Кейекбаеванан буҙа эшләү серҙәре, шулай уҡ Мөбинә Ғазинаның талҡан тартыу, уның нисек эшләүе тураһында һөйләүе күптәрҙе ҡыҙыҡһындырҙы.

"Өләсәйем һандығында ниҙәр бар икән?" тигән һорауға ағинәйҙәрҙең балалар менән бергә яуап эҙләүе лә әһәмиәтле булды. Һандыҡ менән танышҡанда милли кейем, биҙәүестәр, француз яулыҡтың тарихы бәйән ителде. "Беҙ балалар баҡсаһында йыш булабыҙ. Кескәйҙәргә милли тарихыбыҙ, кейемебеҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ, кәсептәребеҙ һ.б. хаҡында һөйләйбеҙ. Беҙ - бөрйән ырыуы. Балалар ҙа ырыуыбыҙ тамғаһын, оранын, ҡошон белеп үҫергә тейеш. Бына беҙҙең милли күлдәктәребеҙ ҙә бөрйән ырыуыныҡы итеп тегелгән. Милли кейемдә лә мотлаҡ тарихи дөрөҫлөк булырға тейеш", - тип һөйләп үтте Мәфрүзә Зәйнәғәбдинова .

Мерәҫ ағинәйҙәре әҙерләгән ҡул эштәре күргәҙмәһе лә сағыулығы менән хайран ҡалдырҙы. Оҫталығы менән таң ҡалдырған Зәлифә апай Ҡаһармановаға һорауҙар бигерәк тә күп булды. Ул ҡул эштәренең серҙәре менән уртаҡлашты.

Икенсе Этҡол "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Көнһылыу Сөләймәнова: "Беҙҙең район ағинәйҙәре йолаларҙы тергеҙеү һәм мәңгеләштереү өҫтөндә күп эшләй. Яҙ үткәрә торған йолаларҙы атҡарыу рәткә һалынды. Ыуыҙ ҡоймағы, баш итенә ҡунаҡ саҡырыу, ҡар һыуына барыу һәм башҡа йолаларҙы берләштереп, яҙғы байрамдарҙы үткәрәбеҙ. Үҙебеҙ менән бергә мотлаҡ йәштәрҙе һәм балаларҙы алып йөрөйбөҙ. Улар ҙа халҡыбыҙҙың йолаларын ҡәҙерләп һаҡлап, артабан дауам итер, тип өмөтләнәбеҙ", - тине.

Мерәҫкә йәм биреп ултырған паркта булыу ҙа онотолмаҫ тәьҫораттар ҡалдырҙы. Унда уҡытыусы Ҡәмәриә Нәҙербаева "Ветерандар аллеяһы" менән таныштырып, илебеҙ өсөн йәнен-тәнен аямаған батырҙарыбыҙ хаҡында һөйләне. Мерәҫ ағинәйҙәренең бүлмәһен барып ҡарау ҙа һоҡланыу тойғолары уятты. Ағинәйҙәр әҙерләгән концерт та һәр кемдең күңеленә хуш килде.

Эйе, ике район ағинәйҙәренең осрашыуы рухи күтәренкелектә йәнле һәм йәмле итеп үтеп тә китте. Уларҙың тәжрибә уртаҡлашыуы, үткәргән саралары тураһында һөйләшеүе, киләсәккә ниндәй уй-хыялдар менән янып йәшәүе тураһында бәйән итеүҙәре һәм, әлбиттә, даими күрешергә һүҙ ҡуйышыуы онотолмаҫлыҡ булды. Халҡын яратҡан, тарихын ҡәҙерләгән, йәш быуынды хәстәрләгән изге уйлы апай-инәйҙәрҙең ошондай осрашыуы күптәргә өлгө лә инде ул.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Сыбар барҡылдаҡ

**(Деряба)**



Ҙур барҡылдаҡ, күгәрсендән саҡ ҡына бәләкәйерәк. Арҡа яғы йәшкелт-көлһыу, ҡорһағы аҡ, ҡара таптары бар, ҡанатының аҫҡы яғы - аҡ. Осҡанда ҡанаттарын йыш ҡағып алғандан һуң уларҙы йәйгән килеш оҙаҡ кәйелеп осоуы бик матур күренеш. Йыры - сағыу, көслө, флейтала һыҙғыртҡан кеүек, ныҡ ҡысҡырып шыҡырлай.

Һирәк ҡош. Колония менән йәшәмәй. Айырым парҙар булып бейек ботаҡлы, көн яҡтыһы яҡшы төшкән урмандарҙа, уларҙың ситендә йәшәй. Ҡарағайға оя ҡора, шулай уҡ мүкләнгән, лишайник баҫҡан ағастарға ла оялай. Таптары булған зәңгәр йә алһыу ғына 4-5 йомортҡа һала. В.Д. Ильичев, В.Е. Фомин буйынса, Көньяҡ Уралда төньяҡ райондарҙың ылыҫлы тайгаларынан алып Йылайыр платоһының урманлы-далаларына тиклем ерҙә, башлыса ҡуйы итеп муйыл үҫкән әрәмәләрҙә оя ҡора.

### Ҡыҙылбауыр барҡылдаҡ, ҡашҡа барҡылдаҡ

**(Белобровик)**



Ваҡ барҡылдаҡ (сыйырсыҡ тиклем), арҡа өлөшө йәшкелт-көрән, ҡорһағы ҡара таплы аҡ, ҡанаттарының аҫҡы яғы, ҡабырғалары тимер тутығы кеүек сағыу ерән, исеме лә ошонан килеп сыҡҡан ахыры. Күҙҙәре өҫтөндәге ҡаралы-аҡлы ҡашы ла иғтибарҙы йәлеп итеп тора. Йыры - шыҡырлауҙар һәм һыҙғырыуҙарҙан тора, ныҡ әсе итеп ҡысҡыра.

Иҫәбе буйынса мышар барҡылдағынан ғына ҡалыша. Ә бына май айында һайраусы ата ҡыҙылбауыр барҡылдаҡтар иһә һаны йәһәтенән бер ҡошҡа ла алдынғылыҡты бирмәй.

Асыҡ, яҡты ҡайынлы-уҫаҡлы урмандарҙа йәшәй, ояһын ергә лә, түңгәктәргә лә, ағастарҙың эре ботаҡтарына ла ҡора. Ояһы һалам һәм ваҡ сыбыҡтарға тупраҡ ҡушып яһала. 5-6 йомортҡаһының төҫө ҡыҙыл таплы зәңгәрһыу-йәшкелт.

Өфө парктарында йыш осрай. Көҙөн һәм ҡышын мышар барҡылдаҡтары араһында күренә, улар ҡыштың сасҡау һыуыҡтарын шулай бергә үткәрә.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,
"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.
(Дауамы бар).**



## 1 ИЮНЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 1.05, 1.45, 2.20, 3.05, 3.40, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.45 Д/ф "Плохой хороший человек". К 85-летию со дня рождения Олега Даля. [12+]
12.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Потерянная жизнь". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Загляни ему в голову". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Вместе". Концерт детской студии "Тамыр". [6+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.15 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Навигатор истории. [12+]**
**12.30 Территория счастья.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле.**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Асыш. Дети. [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Формула здоровья. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Всероссийская открытая академия "Территория женского счастья". Большой репортаж. [12+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Х/ф "Вы меня видели?" [16+]**
**1.30 Моноспектакль "Цыплёнок из букваря". [12+]**
**3.00 Колесо времени. [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**

## 2 ИЮНЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Потерянная жизнь". [16+]
0.00, 0.45, 1.25, 2.00, 2.35, 3.05, 3.20, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Загляни ему в голову". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Три мушкетера". [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30 Территория счастья.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле.**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Формула здоровья. [12+]**
**18.15 Материнство и детство. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**21.00 Креативный код. [12+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**23.45 На своей земле. [12+]**
**0.00 Х/ф "Дыхание мертвого леса". [16+]**
**1.30 Спектакль "Белое платье матери". [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**

## 3 ИЮНЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Потерянная жизнь". [16+]
0.00 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.05, 1.40, 2.20, 3.05, 3.40, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Загляни ему в голову". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Три мушкетера". [12+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Формула здоровья. [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30 Территория счастья.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле.**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45 Материнство и детство. [12+]**
**17.00 Башкортостан#вместе. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Специальный репортаж. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2026". [12+]**
**0.00 Х/ф "Музыка крыш". [16+]**
**1.30 Спектакль "Гильмияза". [12+]**
**3.15 Ап-асык. [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**

## 4 ИЮНЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.45, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Потерянная жизнь". [16+]
0.00, 0.50, 1.25, 2.00, 2.35, 3.05, 3.20, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.30, 2.20 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Загляни ему в голову". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Три мушкетера". [12+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30 Территория счастья.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле.**
**15.00 Сулпылар. [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 20.30 Формула здоровья. [12+]**
**16.15 Уралым. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 "Всероссийская открытая академия "Территория женского счастья". Большой репортаж. [12+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Материнство и детство. [12+]**
**20.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Битва". [12+]**
**1.30 Спектакль "Эх, голубушки". [12+]**
**3.00 Башҡорттар. [6+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 5 ИЮНЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 18.40 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.20, 14.15 "Время покажет". [16+]
16.15 Давай поженимся! [16+]
17.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Что? Где? Когда?" Экспериментальная серия. [16+]
22.55 Премьера. "Команды". [16+]
23.55 Д/ф "Джерри Ли Льюис: Безумие таланта". [18+]
1.15, 1.50, 2.25, 3.00, 3.35, 4.10, 4.50, 5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
5.59 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Поймай меня, если сможешь". [12+]
23.30 Х/ф "Нарисованное счастье". [12+]
3.00 Х/ф "Любовь и немного перца". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Три мушкетера". [12+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Тирмәкәй. [6+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45, 3.45 На своей земле. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 "Ҡурай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Красотка в ударе". [12+]**
**1.45 "Женюсь на своей жене". [12+]**
**3.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 6 ИЮНЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Чужие внутри". Специальный репортаж. [12+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.05 Т/с "Шифр". [16+]
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.50 Х/ф "Только ты и я". [18+]
1.35, 2.10, 2.50, 3.30, 4.10, 4.45, 5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
5.59 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башҡортостан.
14.50 Петросян-шоу. [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Моя родная". [16+]
0.35 Х/ф "Нет жизни без тебя". [12+]
4.11 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 Материнство и детство. [12+]**
**8.30 На своей земле. [12+]**
**8.45 "Аль-Фатиха". [12+]**
**9.15 Сәләм представляет... [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Ҡурсаҡ". [6+]**
**11.30 Экологично. [6+]**
**11.45 "Зерно". [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30 Навигатор истории. [12+]**
**12.45 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.45, 19.00 Полезные новости. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.15, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байык-2026". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**0.45 Х/ф "Амун". [12+]**
**2.15 Спектакль "Поля мои, луга мои". [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 7 ИЮНЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Будем жить!" [16+]
13.05 Т/с "Вариант "Омега". [16+]
17.05 Д/ф "Чужие внутри". Специальный репортаж. [12+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 "До Ре". [12+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10, 0.55, 1.35, 2.10, 2.45, 3.20, 3.55, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.25, 2.35 Х/ф "Возраст любви". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.50, 1.40 Д/с "Рассказы из русской истории". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Весёлые ребята". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.17 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45, 20.30, 5.00 Автограф. [12+]**
**8.15 Квадратные метры. [12+]**
**8.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 "Ат уйнатып!" [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Ап-асык. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Д/с "Трудности перевода". [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Спектакль "Сверкающие звезды". [12+]**
**19.45 Дневник фестиваля "ЭХО БДФ". [6+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**23.00 Концерт Радика Вальмухаметова. [12+]**
**1.15 Х/ф "Выше неба". [16+]**
**3.00 Спектакль "Очень простая история". [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**



РЕКЛАМА

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1447 һижри йыл.

| Июнь (Зөлхизә) | Иртәнгә намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (15) дүшәмбе | 3:16 | 4:47 | 13:30 | 18:53 | 21:41 | 23:11 |
| 2 (16) шишәмбе | 3:15 | 4:46 | 13:30 | 18:54 | 21:42 | 23:12 |
| 3 (17) шаршамбы | 3:14 | 4:45 | 13:30 | 18:55 | 21:43 | 23:13 |
| 4 (18) кесе йома | 3:13 | 4:44 | 13:30 | 18:55 | 21:45 | 23:15 |
| 5 (19) йома | 3:12 | 4:43 | 13:30 | 18:56 | 21:46 | 23:16 |
| 6 (20) шәмбе | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 18:57 | 21:47 | 23:17 |
| 7 (21) йәкшәмбе | 3:11 | 4:42 | 13:30 | 18:57 | 21:48 | 23:18 |

БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.

✓ *Ике ауырыу бергә килһә, әжәлеңдең еткәне; ике йыртыҡ бергә килһә, абруйыңдың киткәне.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ТУҒАНДАРҒА НИСЕК ӨНДӘШӘҺЕҢ?




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**15-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Болот. Туйсина. Тәхет. Наҙан. Асҡыс. Атайсал. Мәсәғүт. Алмас. Отпуск. Тут. Бал. Табан. Илле. Рейс. Рәсем. Ион. Ат. Ваҡыт. Ерһеҙ. Ғәбитов. Сикәсөй.

**Вертикаль буйынса:** Мортазин. Насретдин. Ғәскәров. Тана. Арағас. НАТО. Бәйет. Бысҡы. Табибә. Хәйбуллина. Токио. Тракт. Вий. Ала. Терпе. Лама. Алҡа. Сүс. Намаҙ.

*ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!*

# ЯНДЫРҺАҢ - ШТРАФ ТҮЛӘ!

**Бөрйәндә урман янғынында ғәйепле кешегә 2 миллион һумға тиклем штраф янай. Штрафтан тыш, уға урман фондына килтерелгән зыянды тулыһынса ҡапларға, шулай уҡ янғын һүндереүгә сығымдарҙы ҡапларға тура киләсәк, был административ яза суммаһынан күп тапҡырға артығыраҡ булырға мөмкин.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 9 апрелдә Бөрйән урмансылығында хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен боҙоу сәбәпле 1,1 гектар майҙанда янғын сыҡҡан. Ғәйепләнеүсегә ҡарата административ тикшереү ҡуҙғатылған, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Урман хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Урман янғындары өсөн административ ҡына түгел, енәйәт яуаплылығы ла бирелә. Мәҫәлән, 2023 йылда Дүртөйлө районында ике урман янғыны өсөн суд ғәйеплегә дәүләткә 1,6 миллион һумдан ашыу түләргә ҡушты.

Белорет районында ошондай уҡ енәйәт өсөн урындағы кеше бер йыл холоҡ төҙәтеү эштәренә хөкөм ителә һәм 5 миллион һум самаһы түләргә бурыслы була.

"Урманға юлланған һәр кем ташланған шырпының йәки һүндерелмәгән усаҡтың хаҡы бөгөн миллион һумға иҫәпләнеүен аңларға тейеш, - тип билдәләне республиканың урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдинов. - Беҙҙең өҫтөнлөклө бурыс - янғындарға юл ҡуймау, шуға күрә янғын хәүефе миҙгелендә патрулдәр һаны бер нисә тапҡырға арттырылды. Беҙ бөтә ресурстарҙы, шул иҫәптән пилотһыҙ авиацияны ла, ҡағиҙә боҙоусыларҙы асыҡлау өсөн файҙаланабыҙ.

Билдәләп үтергә кәрәк, 2 миллион һумға тиклем административ штрафтарҙан тыш, урман ултыртыуҙарҙы юҡ иткән өсөн РФ Енәйәт кодексының 261-се статьяһы буйынса енәйәт яуаплылығы ҡаралған. Урмандағы вайымһыҙлыҡ - финанс көрсөгөнә һәм иректе юғалтыуға килтерә.

Министрлыҡ мәғлүмәттәре буйынса, 2026 йыл башынан алып Башҡортостан урмандарында янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙоуҙың 26 осрағы асыҡланған. Ғәйеплеләргә ҡарата административ йоғонто саралары күрелә.

Урман янғыны йәки ҡағиҙә боҙоуҙар асыҡланғанда 8-347-218-14-14 һанына шылтыратығыҙ.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**29 май "Кейәүҙәр"** (Х.Вәхит, Ф.Ғарипов), музыкаль комедия. 12+

**1 июнь "Аҡ ҡанатлы хыялым"** (А.Симуков, Р.Насибуллина инсц. Ф. Ғарипов), музыкаль әкиәт. 18:00. 6+

**2 июнь "Аҡ ҡанатлы хыялым"** (А.Симуков, Р.Насибуллина инсц. Ф. Ғарипов), музыкаль әкиәт. 10:30. 6+

**3 июнь "Ҡыҙ урлау"** (М.Кәрим, И.Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+

**4 июнь "Кеше булып ҡалырға"** (Е.Коллегова, Х. Үтәшев). 12:00. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**29 май "Я, бабушка, Илико и Илларион"** (Н. Думбадзе), лирик комедия. 11:00 һәм19:00. 12+

**30 май "Каштанка"** (А. Чехов, А. Ерманов), эт тормошонан әкиәт. Мәскәү ҡурсаҡ театры. 14:00 һәм 18:00. 6+

**31 май "Манолито Очкарик"** (Э. Линдо, инсц. Е. Гузёма, А. Старцева), бер малайҙың тарихы. Омск өлкә Йәш тамашасы театры. 14:00 һәм 18:00. 12+

**31 май "Вафельное сердце"** (М. Парр), мажаралы ваҡиға. Санкт-Петербургтың "Ҡурсаҡ форматы" театры. 15:00 һәм 18:00. 6+

**31 май "Людвиг XIV и Тутта единственная"** (Я. Экхольма, Ю. Беляева), дуҫлыҡ тарихы. Тверь ҡала Йәш тамашасы театры. 18:00. 6+

**1 июнь "Пеппи длинный чулок"** (А. Линдгрен, О. Пронин). 10:30. 0+

**1 июнь "Приключения Рустема"** (А.Котой), кемдер күләгәлә. Г. Кариев ис. Ҡаҙан Йәш тамашасы театры. 11:00 һәм 19:00. 12+

**1 июнь "Школа для дураков"** И. А. Гончаров ис. Ульяновск драма театры. 11:00 һәм 19:00. 16+

**3 июнь "Сказание о семи батырах"** (Д.Йосопов, Р.Хәкимов), фэнтези. 10:30. 6+

**4 июнь "Чиполлино"** (Д. Родари, Р. Хәкимов), мажаралар. 10:30. 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**31 май "Терем-теремок"** (Д.Гараева, В.Щербакова). 12:00 һәм 15:00. 0+

**1 июнь "Вечно эта 345-я"** (Ж. Кусаинова), музыкаль спектакль. 10:00 һәм 19:00. 6+

**1 июнь "Путь Победы"** (Д. Ғәрәева, К. Баязитова). 14:00. 6+

**2 һәм 3 июнь "Доктор Айболит һәм уның дуҫтарының мажаралары"** (К. Чуковский). 10:00 һәм 11:30. 0+

**3 июнь "Путь Победы"** (Д. Ғәрәева, К. Баязитова). 12:00. 6+

**4 июнь "Доктор Айболит һәм уның дуҫтарының мажаралары"** (К. Чуковский). 10:00 һәм 11:30. 0+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**29 май "ПРО.АРТ"** тере музыка. 6+

**31 май "Летние вечера в Органном зале"** Париждағы Сент-Эсташ сиркәүе органсыһы Батист-Флориан Марль-уврарҙың концерты. 12+

**1 июнь "Мультконцерт"** Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнө айҡанлы БР Милли халыҡ инструменттары оркестры концерты. 0+

**4 июнь "Летние вечера в Органном зале"** Владислав Мортазиндың концерты (орган, фортепиано). 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**30 май "Легенда о воине дракона"** (Р.Ғәйнуллиин), әкиәт. 13:00. 6+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**29 май Альберт Салауатовтың** концерты. 6+

## БР Милли музейы

**30 май "Сыуаш сигеүе"** оҫталыҡ дәресе. 11:00. 6+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# КИТАП БАЙРАМЫНА САҠЫРАБЫҘ!

**28-30 майҙа Өфөнөң Совет майҙанында, шулай уҡ республика муниципалитеттарында IV "Китап байрамы" халыҡ-ара йәрминкәһе ойоштороласаҡ. Башҡортостандың мәҙәниәт министры вазифаһын башҡарыусы Фәнүр Шәйхисламов Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә сараға абруйлы ҡунаҡтар килеүе хаҡында һөйләне.**



Рәсәй Федерацияһы Президенты ярҙамсыһы, Рәсәйҙең Яҙыусылар союзы рәйесе, Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәте рәйесе Владимир Мединский, Рәсәй Китап нәшер итеүселәр ассоциацияһы президенты һәм Рәсәй китап союзы вице-президенты Константин Чеченев, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, адвокат, Рәсәйҙең атҡаҙанған юрисы Павел Астахов, театр һәм кино актеры, Рәсәйҙең халыҡ артисы Сергей Безруков, Рәсәй Яҙыусылар союзы идараһының яуаплы секретары Николай Иванов, йырсы, Рәсәйҙең халыҡ артисы Анита Цойҙың килеүе көтөлә.

- Быйыл китап йәрминкәһе дүртенсе тапҡыр үткәрелә. Уның тәрбиәүи һөҙөмтәһе ғәйәт ҙур. Беҙ балаларҙы ла китап яратырға өйрәтәбеҙ, китаптың ҡиммәте тураһында һөйләйбеҙ, - тине Радий Хәбиров.

Эшлекле сатырҙарҙа Гөлшат Әбдиева, Алена Филиппова менән осрашыуҙар була. Шулай уҡ Милли китапхана майҙансығында Олег Чегодаев, Лилиә Шафиҡова, Александр Шубенков менән осрашыуҙар ойоштороласаҡ. Дарья Воронова "Слышу себя на сквозь" тигән китабының исем туйын үткәрә.

29 майҙа китап һөйөүселәрҙе йәрминкәлә студент яҙыйның "Ҙур татыу ғаилә" гала-концерты, "Тыуған ер тауышы" музыкаль-әҙәби лекторий, "Нимә? Ҡайҙа? Ҡасан?" спорт уйыны формаһында уҡыусылар өсөн ярыш программаһы көтә. Милли китапхана майҙансығында Екатерина Горбунова, Алһыу Иҙрисова, Рената Вәлиева, Рафаэль Баһауетдинов сығыш яһай.

Башҡортостан Башлығы муниципалитет башлыҡтарына "Китап байрамы"на балаларҙы алып килеүҙе ойошторорға ҡушты.

Әйткәндәй, IV "Китап байрамы" халыҡ-ара китап йәрминкәһенә әҙерлек барышында "Башҡортостан Республикаһының китап календары" рәсми рәүештә эшләй башланы. Проект республиканың барлыҡ муниципалитеттарынан 360-тан ашыу сараны берләштерә. Программала яҙыусылар менән осрашыуҙар, әҙәби кисәләр, китап күргәҙмәләре, конкурстар, оҫталыҡ дәрестәре, тыуған яҡты өйрәнеү акциялары һәм башҡа саралар ҡаралған.

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ КӨНӨ

**6 июндә "Шүлгәнташ" музей комплексында "Урал батыр" эпосы көнөнә арналған тантаналар ойоштороласаҡ. Сараны ойоштороусылар - Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм "Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы.**

Байрам Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың указы менән башҡорт фольклор мираҫын һаҡлау һәм популярлаштырыу, милли үҙенсәлекте нығытыу һәм бороңғо башҡорт һүҙ сәнғәтенә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу өсөн 2025 йылда булдырылды. Байрамды уҙғарыу урыны осраҡлы һайланмаған: Шүлгәнташ мәмерйәһе һәм уның тирә-яғы башҡорт фольклоры һәм мифологияһы менән



айырылғыһыҙ бәйләнгән. 2015 йылда бында төбәк әһәмиәтендәге иҫтәлекле урын - "Урал батыр ере" асыҡланды һәм мәҙәни мираҫ объекттары реестрына индерелде. Ошо 62 мең квадрат метр майҙанда 17 археология ҡомартҡыһы, шул иҫәптән Шүлгәнташ мәмерйәһе, шулай уҡ эпостар һәм ҡобайырҙар буйынса билдәле тәбиғәт объекттары: Йылҡысыҡҡан һәм Ығышма күлдәре, Шүлгән йылғаһы, Зәңгәр күл һәм башҡалар урынлашҡан. 2021 йылда Йылҡысыҡҡан күле буйында эпостың төп персонаждарының береһе булған ҡанатлы Аҡбуҙатҡа һәйкәл ҡуйылды. "Урал батыр" эпосы "Шүлгәнташ" музейы архитектураһында ла сағылыш тапҡан. Аҡ һәм ҡара төҫтәр изгелек менән яуызлыҡтың, Урал менән Шүлгәндең көрәшен символлаштыра. Улар араһында - кеше ғүмеренең символы кеүек быялалы арауыҡ.

Байрам Йылҡысыҡҡан күле буйында ҡунаҡтарҙы ҡаршы алыуҙан башлана. Һуңынан музейҙа "Урал батыр" эпосын өйрәнеү буйынса тематик класс асыу тантанаһы була. Шулай уҡ түңәрәк өҫтәл үткәреү планлаштырыла, уның маҡсаты - Башҡортостандың рухи мәҙәни ҡомартҡыларының береһе булараҡ эпосты өйрәнеү, һаҡлау һәм популярлаштырыу. Төп темалар араһында: эпосты популярлаштырыу, әҫәргә заманса ҡараш һәм уны тикшереүҙең көнүҙәк мәсьәләләре. Музейҙың ғилми хеҙмәткәрҙәре, рәссам-иллюстраторҙар, фольклор буйынса белгестәр һәм республиканың ғилми институттары вәкилдәре доклад менән сығыш яһай.

"Робоһабантуй" робот техникаһы һәм традициялар фестивале - байрамдың төп үҙенсәлеге булмаҡсы. Ойоштороусылар - Бөрйән мәғариф бүлеге булышлығында Әбделмәмбәт ауылы мәктәбе һәм "Тимербатыр" робот техникаһы студияһы. Йәш техниктар Урал батыр кубогы һәм "Шүлгәнташ мәмерйәһе" музей-ҡурсаулығы призы өсөн көрәшә. Ярыштар программаһында - роботтар футболы, робокөрәш, арҡан тартыу, көршәк ватыу һәм дрондар уҙышы.

# БАШҠОРТ КЕЙЕМЕ ОҪТАЛАРЫ...



**Ишембай ябыҡ типтағы махсус уҡыу-тәрбиә учреждениеһы тәрбиәләнеүселәре "Урал батыр" эпосы һәм AY YOLA төркөмөнөң иң популяр "Һомай" йырынан илһам алып, башҡорт кейемдәре коллекцияһын булдырҙы.**

Башта ҡыҙҙар эпосты ентекләп өйрәнә, һуңынан эскиздар эшләй һәм күлдәктәр тегә. Проекты тормошҡа ашырыу идеяһынан алып тормошҡа ашырыуға тиклем ни бары ярты йыл ғына ваҡыт үтә. Кейемдәр бороңғо кейеҙ баҫыу техникаһын ҡулланып эшләнгән. Шулай уҡ һәр костюмда традицион элементтар бар: орнаменттар, сәйлән һәм тәңкәләр менән сигеү, әберкә һәм манжеталар. Әммә шул уҡ ваҡытта һәр күлдәк заманса һәм уникаль булып сыға.

Коллекцияны халыҡ-ара кимәлдә тәҡдим итергә әҙерләнәләр. "Беҙ үҙебеҙҙе ноябрҙә Санкт-Петербургта үтәсәк халыҡ-ара мода аҙналығында һынап ҡарарға теләйбеҙ. Коллекция тураһында мәғлүмәтте ойоштороусыларға ебәрҙек. Әгәр ул уларға оҡшаһа, мотлаҡ ҡатнашасаҡбыҙ", - тип һөйләне учреждение етәксеһе Гүзәл Шаһиева.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҒЫУ ХӘТӘР,

## ағыуҙан ғәйбәт хәтәр

Ике ауырыу бергә килһә, әжәлеңдең еткәне; ике йыртыҡ бергә килһә, абруйыңдың киткәне.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Камиллыҡтың ни икәнен үҙ ҡулдарың менән төҙөмәйенсә белмәҫһең.

**(Гарриет Мартино).**

Мәһәйыусанлыҡ беҙҙең хәтер менән сәйер уйын уйнай...

**(Джозеф Конрад).**

Кеше үҙе күтәрә алмаған инаныусанлыҡты йөторға тейеш түгел.

**(Брукс Адамс).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Шул тиклем бай бер кеше йәшәгән. Уның байлығы сүллектәге ҡом бөртөктәренә ҡарағанда ла күберәк булған. Ләкин һин ниндәй генә байлыҡҡа эйә булһаң да, ғүмерҙе һатып алып булмай. Был бай ҙа берҙән-бер көндө эхирәткә күскән. Йәндең кейеме булмай, был байҙың йәне лә яп-яланғас көйө Хоҙай алдына барып баҫҡан.**

**- Бында бер генә теләк тормошҡа ашырыла, - тигән Хоҙай. - Һинең һуңғы һәм берҙән-бер теләгең ни булыр?**

**- Ишетеүемсә, кешеләр ерҙә бер нисә ғүмер йәшәй ала?- тигән бай.**

**- Эйе, ләкин һин ерҙә йәшәгәндә ҡомһоҙланып байлыҡ артынан ҡыуып, быны киреһен раҫланың: һин үҙеңде бер тапҡыр ғына йәшәгәндәй итеп тоттоң... - тигән Хоҙай.**

**- Эйе, фани донъяла йәшәгәндә мин быға инанғайным шул, шуға типтереп йәшәп ҡалырға тырыштым. Ә эхирәткә күскәс, күрәм, йәндәр яңынан ергә йәшәргә ҡайтарыла, - тигән бай.**

**- Һәр кем икенең береһен һайлай ала, - тигән Хоҙай. - Һин дә мәңгелек тормошто һайлай алаһың, ләкин хәйерселектә йәшәйәсәкһең...**

**- Ни өсөн? - тип аптыраған ерҙә туплаған байлығына кире ҡайтып, мәңге йәшәргә иҫәп тотҡан бай.**

**- Сөнки ҡомһоҙланып байлыҡ туплау гонаһын юяһың бар. Ә уны аҙағынаса юйыу өсөн һинә миллиард ғүмер кәрәгәсәк, - тигән Хоҙай.**

**- Улайһа, хәйерсе булып йәшәүҙән башҡа тағы нимәне һайлай алам? - тип һораған бай.**

**- Һинең бер бөтөнөң фанилыкта туплаған байлығың тураһындағы хәтерҙе һаҡлай, ул хәтерҙән, йәғни гонаһтан ҡотолоу өсөн һинең бер бөтөнөң миллиард өлөшкә бүленә ала...**

**Һайлай ала торған юлдың икеһе лә оҡшамай байға, ләкин ул ҡасан да булһа байлығына ҡайтырға өмөт итеп, һуңғы юлды һайлай һәм миллиард өлөшкә бүленеп, юҡҡа сыға...**

**Был кеше шулай Йәшәйеш Ҡануны тураһындағы белем эйәһе булаһы урынға, байлыҡты өҫтөн күрә һәм Хоҙай алдына юйылмаҫ гонаһлы булып барып баҫа..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

1 582218 911006 26021

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
**"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.**
**Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99
**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 28.05.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 28.05.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 29.05.2026 й.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2677
Заказ - 929

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.